ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

7-13 февраль (шаҡай) 2025

№5 (1149)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Быуындар алышынғанда...

бик күпте юғалтабыҙ түгелме?

6

Йөрәгендә тел көҙерен һаҡлаусы...

ғалимә лә, мөғәллимә лә ул

8-9

"Ашҡаҙар" - мөхәббәтле радио

11

Ял итә-итә...

Башҡортостаныңды таны!

12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы баҫмабыҙға ваҡытынан алда, 1 февралдән, 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн дә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Хаҡы 971 һум 70 тин. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!

МӨХӘРРИРИӘТ.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

Календарҙа яңы дата - наставник, йәғни Кәңәшсе-тәрбиәсе (Остаз) көнө булдырыу тәкдимен күпселек хуплап кабул итте. Был беҙҙең өсөн ниндәйҙер яңылыҡ булып тормаһа ла, кәңәшсе-тәрбиәсе эшмәкәрлеге бөгөнгө шарттарҙа ярашлы нисек ойошторолорға тейеш, тип уйлайһығыҙ?

Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН, журналист: Былтыр көҙ, 31 октябрҙә, "ГосСтарт. Башҡортостан" республика форумы булып үткәйне. Уның темаларының береһе - дәүләт органдарының йәш белгестәренә ярҙам итеү механизмдарын үҫтереүгә арналды. Ошо форумда республика һәм муниципаль власть органдарында кәңәшсе-тәрбиәсе институты булдырыу хаҡында һүҙ барҙы. "Был һәйбәт фекер, - тип хупланы тәкдимде Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Беҙҙең Башҡортостан Башлығы Хакимиәтендә, республика Хөкүмәтендә әле тәжрибәләре аҙыраҡ булған хеҙмәттәштәренә остаз булырҙай һәм ярҙам итерҙәй бик күп белгестәр эшләй. Бөгөн беҙҙең дәүләт хеҙмәткәрҙәре квалификация һәм стажировканы күтәреү буйынса һәр төрлө федераль программаларҙа ҡатнаша. Мин үҙем, мәҫәлән, МХО-ла ҡатнашҡан Оскар Ситдиҡовтың кәңәшсе-тәрбиәсеһемен. Төбәк кимәлендә беҙ шундай системаны яйға һалырға тейешбеҙ. Мәҫәлән, ни өсөн йәштәр, райондарҙан Өфөгә килеп, ҡала хакимиәтендә эшләргә мөмкинлек алмаҫҡа тейеш әле...

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров балалар һәм үҫмерҙәр араһында дәүләт һәм муниципаль хеҙмәт төрөнә ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу маҡсатында республикала был һөнәрҙең абруйын арттырыу буйынса эш алып барылыуын шулай тип билдәләне: "Беҙгә бергәләшеп бөгөнгө чиновниктың образын тыуҙырыу буйынса эшләргә кәрәк. Был теманы мәктәптәрҙә класс сәғәттәрендә күтәрергә тырышыуҙың ғиллә-һе булмаҫтыр. Иң мөһиме - үҙеңдең эшең менән кешеләр тормошон яҡшыраҡ итергә һәм башҡаларға өлгө күрһәтергә кәрәк. Шул да мөһим: үҙҙәренең белекһеҙлеге менән ошо һөнәргә тап төшөргән чиновниктарҙан ваҡытында арыныу мотлаҡ".

Әйткәндәй, 2018 йылдың 2 мартында Рәсәй Президенты Владимир Путин "Остазлыҡ өсөн" тигән махсус билдә булдырғайны. Әле Мәғариф һәм Хеҙмәт министрлыҡтары 2 мартты Кәңәшсе-тәрбиәсе, йәғни Остаз көнө итеү хаҡында башланғыс менән сығыш яһаны. Был иҫтәлекле көндөң маҡсаты - дәүләт кимәлендә кәңәшсе-тәрбиәселек эшмәкәрлегенең абруйын, әһәмиәтен күтәреү һәм статусын нығытыу, йәштәргә эш күнекмәләре һәм тәрбиә биреү.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

ТАУ БАШЫНДА БЕР МӘСЕТ...

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров баш ҡаланың "Әр-Рәхим" мәсетенең төҙөлөш майҙансығында булып, монтажлау һәм биҙәкләү эштәренең барышын баһаланы.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, мәсеткә 2006 йылда нигеҙ һалынғайны. Төҙөлөштө төрлө инвесторҙар финансланы. 2016 йылдың йәйендә эштәр туҡтатылды. 2021 йылдың аҙағына иман йортона бөтәһе 1,8 миллиард һум аҡса йүнәлтелгән булған. 2023 йылдың сентябрендә Башҡортостан Башлығы "Әр-Рәхим" йәмиғ мәсете төҙөлөшөн тергеҙеү буйынса кәңәшмә уҙғарҙы. Шунан һуң белгестәр объектҡа комплекслы тикшереү үткәрҙе һәм уның торошон баһаланы. 2024 йылдың 10 апрелендә республика Башлығы ҡатнашлығында мәсеттә төҙөлөш эштәре тергеҙелде.

(Дауамы 4-се биттә).

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

БАЛА ҠАРАҒАНДА...

Рәсәй Хеҙмәт министрлығы, страховка стажына бала ҡарау буйынса отпускының бөтә осорҙарын да индереү тураһында закон проектын әҙерләп, йәмәғәтселек фекерен өйрәнеүгә сығарҙы.

"Президент ҡушыуы буйынса беҙ 1,5 йәшкә тиклемге баланы ҡарау осорон страховкалау стажына индереү буйынса сикләүҙе бөтөрөүсе закон проектын әҙерләнек. Әгәр элек иң күбендә алты йыл йәки дүрт баланы ҡарау осоро ғына иҫәпкә алынһа, закон ҡабул ителгәндән һуң баланы ҡарау буйынса бөтә отпуск осоро иҫәпкә алынасаҡ. Был күп балалы ғаиләләрҙә ата-әсәләрҙең пенсияһын арттырыуға ла булышлыҡ итәсәк", - тип белдерҙе Антон Котяков. Законға үҙгәрештәр индереү хаҡлы ялға сыҡҡандарға ла ҡағыласаҡ, тип билдәләнә. Закон үҙ көсөнә ингәндән һуң күп балалы ата-әсәләр страховка пенсияһын ҡайтанан иҫәпләү өсөн Рәсәй Социаль фондына мөрәжәғәт итә ала. Бынан тыш, "Герой-әсә" исеменә лайыҡ булған күп балалы әсәләр өсөн матди ярҙам саралары исемлеге лә киңәйтеләсәк. Бындай әсәләр, Хеҙмәт Геройҙары кеүек үк, айлыҡ түләүҙәр аласаҡ, тип күҙаллана.

12+

✓ *Кәңәшселәр балаларға уҡыуҙа ғына ярҙам итеп ҡалыу менән сикләнмәй, ә алдарына яңы маҡсаттар ҡуйып йәшәргә, яуаплылыҡ, үҙаллылыҡ кеүек тормош күнекмәләренә эйә булырға ла өйрәтә, йүнәлеш бирә.*

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

ЙӘШ ҒАИЛӘ ҠЫУАНЫР...

РФ Дәүләт Думаһы һигеҙенсе сессияның тәүге пленар ултырышында Әсәлек капиталы программаһын 2030 йылдың 31 декабренә тиклем оҙайтыу тураһында закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡабул итте. Был хаҡта дәүләт органының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә.

"Әсәлек капиталы программаһын оҙайтыу тураһында закон проекты Президенттың Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәтнамәһен бойомға ашырыуға йүнәлтелгән, шуға күрә ул сессияның тәүге пленар ултырышында өҫтөнлөклө тәртиптә ҡаралды", - тип билдәләне Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин. Әсәлек капиталы программаһы 2006 йылда Владимир Путиндың тәҡдиме менән индерелде, тине Дәүләт Думаһы рәйесе. Ошо осорҙа 14 миллиондан ашыу сертификат тапшырылды. 2025 йылдың 1 февраленән Әсәлек капиталы күләме индексациялана. 2020 йылдың 1 ғинуарынан һуң донъяға килгән йәки уллыҡҡа (ҡыҙлыҡҡа) алынған беренсе бала өсөн түләү күләме 676 398,58 һум була. 2020 йылға тиклем тыуған икенсе бала өсөн дә Әсәлек капиталының суммаһы шундай. 2020 йылдың 1 ғинуарынан һуң тыуған йәки уллыҡҡа (ҡыҙлыҡҡа) алынған икенсе йәки артабанғы балалар өсөн ата-әсәгә, әгәр быға тиклем сертификат алмаған икән, 893 835,55 һум түләнә.

Әйткәндәй, Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең 1 марттан Әсәлек капиталын (эскроу-иҫәпте ҡулланып) төҙөлөш подрядына килешеүе буйынса шәхси йорт һалыу өсөн файҙаланырға рөхсәт биргән ҡарарына ҡул ҡуйылды. Бындай иҫәптәге менән эш хаҡы төҙөлөш тамамланғас ҡына күсерелә, был иһә подрядты намыҫлы башҡарыуҙы тәьмин итә. Әлеге ваҡытта йорт һатып алыу йәки уны реконструкциялау өсөн Әсәлек капиталын файҙаланған ғаиләләрҙең дөйөм һаны 9,5 миллиондан ашыу тәшкил иткән. Уларҙың өстән бер өлөшө быны өсөн кредит алмаған, тип хәбәр иттеләр Министрҙар кабинетының матбуғат хеҙмәтендә.

Торлаҡ төҙөү йәки һатып алыуҙан тыш, Әсәлек капиталын уҡыуға түләү, әсә пенсияһының тупланма өлөшөн булдырыу, инвалид балалар өсөн тауарҙар һәм хеҙмәттәр өсөн йүнәлтергә рөхсәт ителә. Килеме ике йәшәү минимумынан кәмерәк булған ғаиләләр икенсе балаға өс йәше тулғансы Әсәлек капиталынан айлыҡ түләүҙәрҙе рәсмиләштерергә мөмкин.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

Дәүләкән районында йәшәгән Ҡорманаевтар ғаиләһендә 12-се бала тыуған. Уға Наҙгөл тигән исем биргәндәр. Бәхетле әсә ошондай ҡыуаныслы хәбәре менән уртаҡлашты. Наҙгөл - Ҡорманаевтарҙың татыу ғаиләһендә етенсе ҡыҙ. Быға тиклем "Ата-әсә ҡаһарманлығы", "Атай ҡаһарманлығы", "Әсәлек даны" миҙалдары менән бүләкләнгән Гөлназ менән Айнур Ҡорманаевтар 5 малай, 6 ҡыҙ тәрбиәләгән. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2023 йылдың аҙағында Рәсәй Президенты Владимир Путин указы менән Гөлназ Ҡорманаева "Герой-әсә" исеменә лайыҡ булғайны.

АҢЛАТАБЫҘ

ЕР УЧАСТКАҺЫ УРЫНЫНА...

2024 йылда республикала 1204 кеше 250 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған аҡса алған. Программа ғәмәлдә булған ваҡыттан алып был ярҙам менән 4438 кеше файҙаланған.

Был ярҙам төрө 2020 йылдың 13 октябрендә ғәмәлгә индерелде. Бушлай ер участкаһы алырға хоҡуғы булған ғаиләләргә һайлау мөмкинлеге бирелде. Улар ер урынына аҡсалата компенсация ала. Былтыр был хоҡуҡ менән 1204 ғаилә файҙаланған.

- 2025 йылда был хоҡуҡ менән 2023 йылдың 31 декабренә тиклем сиратта торғандар файҙалана аласаҡ, - тип белдерҙе БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры Наталья Полянская. - Аҡсалата алыу тураһындағы ғаризаны беҙҙең министрлыҡҡа йәки урындағы үҙидара органдарына яҙырға кәрәк.

Бер тапҡыр аҡсалата түләүҙе түбәндәге маҡсаттарҙа ҡулланырға мөмкин:

- һатып алынған (шул иҫәптән төҙөлөп яткан) торлаҡ бинаһы өсөн түләү;
- индивидуаль торлаҡ бинаһын төҙөү (шул иҫәптән элек башланған төҙөлөштө тамамлау өсөн);
- айырым торлаҡ йорт һатып алыу өсөн кредит (ипотека) килешеүе буйынса бурыстың төп суммаһын һәм проценттарҙы түләү.
- шәхси торлаҡ төҙөү йәки шәхси ярҙамсы хужалыҡ итеү өсөн ер участкаһын алыу;
- торлаҡ һатып алыуға йәки төҙөүгә ипотека кредиты алғанда тәүге иғанә түләү.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

Календарҙа яңы дата - наставник, йәғни Кәңәшсе-тәрбиәсе (Остаз) көнө булдырыу тәҡдимен күпселек хуплап ҡабул итте. Был беҙҙең өсөн ниндәйҙер яңылыҡ булып тормаһа ла, кәңәшсе-тәрбиәсе эшмәкәрлеге бөгөнгө шарттарҙа ярашлы нисек ойоштоторолорға тейеш, тип уйлайһығыҙ?

Земфира ИСЛАМОВА, Учалы районы "Ғаилә" үҙәгенең директор урынбаҫары, "Башҡортостан Республикаһында остазлыҡ" проектының район буйынса кураторы: Башҡортостанда "Беҙҙең балалар" фонды тарафынан балалар йорттарында тәрбиәләнеүсе ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған етем балалар өсөн "Кәңәшсе-тәрбиәсе (остаз)" программаһы бойомға ашырыла. Был проект бөгөн Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Ишембайҙа, Бөрөлә, Учалыла һәм Салауатта ярайһы уңышлы эшләп килә.

"Кешегә кеше кәрәк" - беҙҙең Учалылағы етем балалар өсөн остазлыҡ, йәғни кәңәшсе-тәрбиәселек проекты шундай девиз менән эшләй, уның ойошторолоуына бишенсе йыл инде. Ошо ваҡыт эсендә утыҙҙан ашыу балаға кәңәшсе-тәрбиәсе беркетелде. Үкенескә, балалар йорттары буш тормай шул, ата-әсәһен юғалтып, тыуған йорт йылыһынан мәхрүм булған балалар менән даими рәүештә тулыланып тора. Әсе яҙмыштары арҡаһында була килеп әләккән балаларҙы ниндәй киләсәк көтә? Улар ошо яҙмыш һынауын еңеп, уҡып, тәрбиә алып, йәмғиәтебеҙҙең лайыҡлы шәхестәре булып китерме? Балалар йорттары нисек кенә тырышмаһын, тейешенсә белем биреү һәм тәрбиә программаларын башҡармаһын, ундағы һәр бала йөрәк йылыһына, шәхсән иғтибар һәм хәстәрлеккә мохтаж; яндарында изге фәрештәләй етәкләп, уй-хыялдарын уртаҡлашып, тормош ҡанундарын төшөндөрә алыусы яҡын, ышаныслы берәй кеше булыуын теләй улар күңеле. Беҙҙең проект командаһы ана шундай остаз булырлыҡ оло йөрәкле, изге күңелле кешеләр - ирекмәндәр эҙләй, һайлап ала һәм үҙебеҙҙең коллективҡа шатланып ҡабул итә. Балаларҙы яратҡан, уларға өлкән һәм тоғро дуҫ була алырҙай кешеләр 24 йәштән алып үҙҙәрен ошо фиҙаҡәр бурыс - кәңәшсе-тәрбиәсе эшмәкәрлегенә бағышлай ала.

Теге йәки был бала менән таныштырҙан алда буласаҡ остаздар махсус тренинг үтә һәм был эшмәкәрлек үҙенсәлектәрен, етемлек психологияһын ныҡлап төшөнөргә тейештәр. Унан һуң әңгәмәләшеү тәртибен үтеп, кәрәкле документтар йыйып тапшырғас, һәр балаға уның холоҡ үҙенсәлектәре, темпераменты һәм яратҡан шөғөлөнә ярашлы остаз беркетелә. Эш тәжрибәһенән күренеүенсә, проект үҙ маҡсатын аҡлай: балалар үҙҙәрен ышаныслыраҡ тоя, ихлас һәм асыҡ күңел менән аралаша башлайҙар. Өлкән дуҫтары - кәңәшселәре ярҙамында балалар уҡыуҙарында осрап торған проблемаларҙы еңелерәк атҡара, ҡайһыларының хатта төрлө өлкәлә ижади һәләттәре асылды. Кәңәшселәр балаларға уҡыуҙа ғына ярҙам итеп ҡалыу менән сикләнмәй, ә алдарына яңы маҡсаттар ҡуйып йәшәргә, яуаплылыҡ, үҙаллылыҡ кеүек тормош күнекмәләренә эйә булырға, һынауҙар алдында юғалып ҡалмаҫҡа ла өйрәтә, йүнәлеш бирә. Һөҙөмтәлә балалар һәм үҫмерҙәр тәртибе күҙгә күренеп үҙгәрә: улар әүҙем рәүештә ҡыҙыҡһыныуҙары буйынса түңәрәктәргә, секцияларға йөрөй башланы, күптәре үҙҙәренең яратҡан шөғөлөн тапты. Был иһә уларға ваҡыттарын файҙалы итеп үткәреү өҫтөнә яңы дуҫтар табырға, үҙбаһаларын күтәрергә ярҙам итә.

Остазлыҡ ул, бынан тыш, ата-әсәһеҙ тәрбиәләнеүселәргә социаллашеү торошон еңеләйтә, өлкәндәр менән сәләмәт мөнәсәбәттәр ҡорорға һәм уларға ышаныс менән ҡарарға өйрәтә. Беҙ хеҙмәттәшем - психолог Олеся Йосопова менән, бергә ошо проекты бойомға ашырыуҙың мөһимлеген аңлап, кәңәшсе-тәрбиәселәргә һәр саҡ ярҙамға килергә, килеп тыуған мәсьәләләрҙе тиҙ һәм ваҡытында хәл итергә тырышабыҙ.

Ғөмүмән, остазлыҡ хәрәкәтен балалар йорттарында ғына түгел, башҡа мәғариф учреждениеларында ла таратырға кәрәк, тигән фекерҙәмен. Айырыуса мәктәптәрҙә, сөнки бөгөнгө дөйөм урта белем биреү мәктәптәрендәге тәрбиә кимәле бөтәбеҙгә лә яҡшы мәғлүм. Үҫмерлек осоро ҡатмарлылығы менән айырылып тора. Ә бит тап ошо осорҙа улар күңеленә һалынған әхлаҡ орлоҡтары кеше шәхесенең артабанғы яҙмышын билдәләүҙә ҙур әһәмиәткә эйә.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Сибайҙағы "Рәсәй эше" күп функциялы кадрҙар үҙәгендә булды. Хәҙер барлыҡ яңы үҙәктәр "Рәсәй эше" тигән бер бренд аҫтында эшләй. Сибай ҡалаһындағы үҙәк етәксеһе Нурзилә Сағитова һөйләүенсә, улар бер йылда яҡынса 500-1000 кешегә эш табырға ярҙам итһә, яҡынса 2000 кешене эшкә урынлаштырған. Бында шулай уҡ эш табыу өсөн ентекле индивидуаль план тәҡдим итәләр. Ул уҡыу курсын, психолог менән тренинг йәки даими урын эҙләгән осорҙа өҫтәмә эште үҙ эсенә алырға мөмкин.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров яҙ көнө "Хәтер баҡсаһы" халыҡ-ара акцияһын үткәреү тураһында иғлан итте. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, апрель башында ошо күләмле акцияға ҡағылышлы кәңәшмә үткәреү планлаштырыла. "Хәтер баҡсаһы"н республика ҡалаларында һәм райондарында ултыртыу ҡарала. Билдәле булыуынса, 2024 йылда Башҡортостан "Хәтер баҡсаһы" халыҡ-ара акцияһында әүҙем ҡатнашыусыларҙың береһе тип танылды. Ултыртылған ағастар һаны (2,25 миллион төп) буйынса республика, Тверь һәм Ырымбур өлкәләренән генә ҡалышып, Рәсәйҙең тәүге өс төбәге иҫәбенә инде.

✓Башҡортостанда студент отрядтарын үҫтереү буйынса оператив штаб булдырыла. Был хаҡта республика етәксеһе Радий Хәбиров Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә белдерҙе. Республиканың Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты рәйесе Вито Сабиров билдәләүенсә, штабтың төп бурыстары - вакансияларҙы туплау һәм яңыртыу мәсьәләһе. "2025 йылға республиканың башҡарма власть органдары 23 000 - 120 000 һум хеҙмәт хаҡы менән студент отрядтары ағзалары өсөн эш урындары буйынса 5213 тәҡдим индергән. Студент отрядтары - республикабыҙ өсөн ҙур кадрҙар потенциалы, шулай уҡ кесерәк быуын өсөн яҡшы һөнәрөҫ өлгө", - тип билдәләне Вито Сабиров.

✓Республикала МХО-ла ҡатнашыусылар араһынан кадрҙар әҙерләү программаһы ғәмәлгә ашырыла килә. Февралдә "Башҡортостан геройҙары" программаһы башланды. Дүшәмбе Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика Башлығы ошо турала белдерҙе. "Геройҙар дәүере" программаһы бар. Беҙ республикала ошо программаның төп һыҙаттарын билдәләнек. Февралдә "Башҡортостан геройҙары" республика программаһына старт бирелә. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар араһынан республика өсөн идарасы кадрҙар әҙерләнәсәк", - тине Радий Хәбиров.

✓Радий Хәбиров Башҡортостан Башлығының "Йылдың йәш ғалимы" премияһын булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Ул тәбиғи, техник һәм гуманитар фәндәр өлкәһендәге инновациялар һәм асыштар өсөн бирелә. "Беҙ йыл һайын тапшырыу өсөн һәр береһе 150-шәр мең һумлыҡ 7 премия булдырабыҙ. Был инде - республикабыҙҙа фәндә үҫтереүгә сираттағы өлөшөбөҙ", - тине Хәбиров.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

Календарҙа яңы дата - наставник, йәғни Кәңәшсе-тәрбиәсе (Остаз) көнө булдырыу тәҡдимен күпселек хуплап ҡабул итте. Был беҙҙең өсөн ниндәйҙер яңылыҡ булып тормаһа ла, кәңәшсе-тәрбиәсе эшмәкәрлеге бөгөнгө шарттарҙа ярашлы нисек ойошторолорға тейеш, тип уйлайһығыҙ?

Тәлғәт ШАҺМАНОВ, педагогия һәм журналистика ветераны, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмә хеҙмәткәре, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты, тыуған яҡ тарихын өйрәнеүсе: Иҫкә төшөрөп ултырам: байтаҡ ғүмеремде, уҡытыусы булып эшләү менән бер рәттән, башҡорт матбуғаты баҫмаларына ла арнағанмын икән. Бына шул өлкәләге остаздарым тураһында һөйләйем әле.

Күмертау ҡалаһының Ю. Гагарин исемендәге 2-се һанлы интернат-мәктәбендә 7-се синыфта уҡып йөрөгәндә эскелектең ниндәй фажиғәгә килтереүе хаҡында "Елдәр генә илай" тигән хикәйә яҙып ташланым. Уны тотоп, юл аша ғына урынлашҡан "Ильич юлы" гәзитенә алып барҙым. Дубляждың мөхәррир урынбаҫары булып эшләгән журналист, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, ул саҡта республикала киң билдәле шәхес Мостафа Кәрим улы Солтанов мине яҡты йөҙ менән ҡаршыла765ны. Яҙғандарыма күҙ йүгертеп сыҡты ла: "Ҡалдыр хикәйәңде. Баҫырбыҙ", - тине. Бер-ике аҙнанан хикәйә гәзиттә донъя күрҙе. Мостафа Кәрим улы мине бик дәртләндерҙе, яҙышып тор, тине.

Уҡытыусы һөнәрен һайлап, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтын тамамлап, тыуған районым мәктәптәрендә эшләп йөрөгәндә төрлө темаларға ҡағылышлы мәҡәләләремде "Совет Башҡортостаны" гәзитенә ебәреп торҙом, уларҙың барыһы ла хаттар бүлеге хеҙмәткәрҙәренең, журналистар Сабир Шәриповтың, Ризуан Хажиевтың тырышлығы менән гәзит биттәрендә урын табып торҙо. 1987 йылдың көҙөндә мине "Совет Башҡортостаны" гәзитенең баш мөхәррире Мансур Әнүәр улы Әйүпов редакцияға эшкә саҡырҙы. Берәй башҡорт телендәге матбуғат баҫмаһында эшләү күптәнге хыялым ине. Шунда уҡ ризалыҡ бирҙем. Ауыл хужалығы бүлегенә махсус хәбәрсе итеп тәғәйенләнеләр. Редакция хеҙмәткәрҙәре барыһы ла мине ихлас ҡабул итте. Тәүге көндәрҙән үк бында үҙ кеше булып киттем. Уларҙың күптәре, бигерәк тә ауыл хужалығы бүлеге мөдире, журналист Ислам Мырҙабаев минең остаздарыма әйләнде, тип әйтә алам. Эйе, күп нәмәгә өйрәндем был редакцияла. "Совет Башҡортостаны" гәзитендә эшләгән осор бәхетле йылдарым булды. Бында күбеһенсә оло быуын ағайҙар, апайҙар эшләй ине. Улар хатта редакцияға килгән ҡунаҡтарҙы нисек ҡаршы алырға, улар менән нисек һөйләшергә, аралашырға өйрәтте, кәңәштәрен бирҙе. Быларҙың барыһы ла ихлас күңелдән эшләнә ине. Хатта бала урынына ла күрәләр ине мине. Берәй мәҡәләм сыҡһа, ғәҙәттә, маҡтау һүҙенә һаран яуаплы секретарь урынбаҫары Кинйәғәли Амантаев: "Афарин, улым! Шәп яҙғанһың", - тип арҡамдан ҡағып яратып китә торғайны.

Редакция тормошо шәп тә ул, тик ярты коллектив фатирһыҙ интекте. Бигерәк тә йәштәр ятаҡтан ятаҡҡа күсеп йөрөп йәшәне. Бер фатир бирһәләр, шуны бүлешә алмай, тауыш-ғауға була торғайны. Был проблема мине лә йүнкетте. Өйләнгәс, Күмертауға эшкә ҡайтырға мәжбүр булдым. Мостафа Кәрим улы миңә күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәҫкә, яҙышыуымды ташламаҫҡа саҡырҙы. "Тормоштоң бөтә мәғәнәһе ауырлыҡтарҙы еңеп йәшәй белеүҙән тора", - тине ул. Беҙҙең игеҙәк улдарыбыҙ тыуғас, тәжрибәле, республикала лайыҡлы абруй менән файҙаланған кәңәшсе-тәрбиәсем Мостафа ағай Солтанов Күмертау ҡала хакимиәтенә барып, беҙҙең ғаиләгә фатир мәсьәләһен дә хәстәрләп йөрөнө хатта. Шулай итеп, 1997 йыл фатирлы ла булдыҡ. Яратҡан һөнәрем мине яңынан район гәзитенә эшкә алып килде: ул ваҡыттағы район хакимиәте башлығы Әхәт Ҡотләхмәтов ағай мине үҙе килеп эҙләп табып, яңы ойошторолған "Көйөргәҙе" гәзитенең башҡортсаһына дубляж буйынса мөхәррир урынбаҫары итеп эшкә саҡырҙы. Бер нисә йылдан Күмертау ҡалаһы менән Көйөргәҙе районы өсөн берләштерелгән үҙ аллы "Юшатыр" башҡорт гәзитен ойошторҙоҡ һәм мин хаҡлы ялға сыҡҡансы ең һыҙғанып шунда эшләнем. Мостафа Кәрим улы инде өлкән йәштә булһа ла "Юшатыр"ға яҙышып, аҙаҡҡы көндәренәсә редакцияға юлды һыуытманы, кәңәштәренән өҙмәне. Остазымдың миңә ҡарата ихтирамын, кешелеклелеген, ихласлығын, ярҙамсыллығын бөгөн, ундай шәхестәр көндән-көн кәмей барған заманда, һағынып иҫкә алам.

Остазлыҡ тап ана шулай - Мостафа ағай кеүек, йөрәк ҡушыуы буйынса йәшәүҙән, киң күңелле булыуҙан һәм үҙ быуынына лайыҡлы алмаш тәрбиәләүҙән ғибәрәттер, тип уйлайым...

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА яҙып алды.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

ЯМАН ЭШЕНӘН КҮРМӘҪ...

кешенән күрер

• Украина Ҡораллы көстәре, Рәсәй биләмәләренә һөжүм итеп, үҙҙәренең енәйәти-террористик ғәмәлдәрен башҡарыуҙан туҡтамай. 1 февраль кис нацистар Курск өлкәһе Суджа ҡалаһындағы граждандар объекты - өс ҡатлы интернат бинаһын ракета утына тотто. Бында күпселек өлкән йәштәгеләр, инвалидтар, сирлеләр һәм йортһоҙ тороп ҡалған йөҙгә яҡын кеше йәшәгән. РФ Оборона министрлығы мәғлүмәтенә нигеҙләнеп, Курск өлкәһенең губернатор вазифаһын башҡарыусы Александр Хинштейн был ракеталарҙың Украинаның Сумы өлкәһенән ебәрелеүен хәбәр итә. "Был нацистарҙың тағы бер тапҡыр йыртҡыслыҡ һәм кешелекһеҙлек йөҙөн фашланы",- ти ул һәм әлегә зыян күреүселәрҙең хәле тураһында аныҡ ҡына мәғлүмәттәрҙең булмауын белдерҙе.

Украина Ҡораллы көстәре был һөжүмде Рәсәй ғәскәренә япһармаҡсы. Әммә уларҙың Суджаға ут асыуы сәғәте-минуты менән Рәсәй мониторинг каналында сағылып тора, шуға ла был енәйәти актты Рәсәй иңенә һалырға маташыуҙың мәғәнәһе юҡ; был бары нацистарҙың донъя йөҙөндә Рәсәйҙең абруйына тап төшөрөргә һәм яңыраҡ ҡына Рус Поречныйы тораҡ пунктында ҡылған йыртҡыслыҡтарынан иғтибарҙы ситкә йүнәлтергә маташыу ғына. Был хәлгә хатта Америка сәйәсмәне Эрл Расмуссен да битараф ҡала алманы: "Боевиктарҙың Суджалағы интернатҡа ут асыуы - Украина Ҡораллы көстәренең сираттағы бысраҡ һәм ауяһыҙ провокацияһы",- тип яҙҙы ул.

• Ә тап ошо мәлдә Британия менән башҡа Европа илдәре Украинаға "тыныслыҡ көстәре" ебәреү хаҡында уртаҡ фекергә килә алмай йонсой. Британия, Франция һәм Скандинавия илдәре был идеяны яҡлаһа ла, Германия менән тағы бер нисә ил быға ҡаршы, ә инде Балтик буйы илдәре һәм Польша Рәсәй менән сиктәш НАТО илдәренең хәрби һаҡлауһыҙ ҡаласағынан ҡурҡа. Вашингтон иһә Украинала президент һайлауҙары үткәреүҙе талап итә. Был йәһәттән Мәскәү менән оҙайлы тыныслыҡ килешеүе өсөн Украинаның яңы президенты яуаплылыҡ аласағы һәм ҡул ҡуйыуы күҙҙә тотола.

• Дональд Трамп бер нисә илгә ҡарата үҙенең сауҙа һуғышын башланы: 1 февралдә ул АҠШ-тың сауҙа партнерҙары тауарҙарына пошлина хаҡтарын арттырыу хаҡында указға ҡул ҡуйҙы. Шуға ярашлы, Ҡытайҙан килтерелгән тауарҙарға - 10 процент, Мексика өсөн - 25 процент һәм Канада өсөн энергия ресурстарына - 10, башҡа төр продукцияға 25 процент пошлина билдәләнә. Оттаванан белдереүҙәренсә, Канада АҠШ-тан импортҡа шулай уҡ 25 процент яуап пошлинаһы иғлан итте, Мехико ла шундайыраҡ сара күрергә йыйына, ә Ҡытайҙың коммерция министрлығы белдереүенсә, Пекин ВТО ҡағиҙәләрен боҙған өсөн АҠШ-ҡа ҡарата юллау (иск) менән мөрәжәғәт итергә ниәтләй. Бынан тыш, ҠХР үҙ мәнфәғәттәрен яҡлау өсөн башҡа төр яуап саралары ла эҙләйәсәк. Bloomberg агентлығы белдереүенсә, Канада менән Мексикаға ҡарата юғары сауҙа пошлиналары Төньяҡ Америкала нефть баҙары тотороҡлоғон өҙәсәк һәм бензинға хаҡ күтәрелеүгә килтерәсәк.

• Ниһайәт, Рәсәй властары вәкилдәре Бәшәр Әсәд режимы ҡолатылғандан һуң тәүге тапҡыр Сирияның баш ҡалаһына килде. Мәскәүҙе Рәсәйҙең бындағы ике хәрби базһы яҙмышы борсой, сөнки Латакиялағы Хмеймим авиабазаһы менән Тартустағы РФ Хәрби-Диңгеҙ Флотының матди-техник тәьминәт пункты Мәскәү өсөн бик мөһим , тип яҙа "Известия" гәзите. Рәсәй, яғы, Сирия Ғәрәп Республикаһының берҙәмлеген, территориаль бөтөнлөгөн һәм суверенитетын яҡлауы хаҡында белдереп, көрсөктән һуң илде аяҡҡа баҫтырыуҙа Сирия халҡына ярҙам итергә әҙер булыуы хаҡында хәбәр итте. Рәсәй делегацияһын Яҡын Көнсығыш һәм Африка илдәре буйынса РФ Президентының махсус вәкиле, Рәсәй сит ил эштәре министры урынбаҫары Михаил Богданов етәкләне. Сирия яғынан осрашыуҙа Сирия хакимиәте башлығы, илдең күсеү осорондағы президенты булған Әхмәд аш-Шараа һәм уның министрҙары ҡатнашты. Визит һөҙөмтәләре буйынса Дамаскиҙан хәбәр итеүҙәренсә, ике яҡлы һөйләшеүҙәрҙә "аныҡ саралар ярҙамында Сирия халҡы менән үҙ-ара ышаныслы мөнәсәбәттәргә ҡайтыуҙа Рәсәйҙең роле" тураһында һүҙ барған. Шулар иҫәбендә компенсация һәм илде аяҡҡа баҫтырыуҙа булышлыҡ мәсьәләһе иғтибарҙы йәлеп итә. Сирияның яңы властары мөнәсәбәттәрҙе тергеҙеүҙә "үткәндәге хаталарҙың иҫәпкә алыныуын, Сирия халҡының ихтыярын ихтирам итеү һәм уның мәнфәғәттәренә хеҙмәт итеү" мәсьәләләрен алға ҡуйған. Ҡайһы бер сығанаҡтарҙан күренеүенсә, элекке президент Бәшәр Әсәдте яңы власть ҡарамағына тапшырыу хаҡында ла һүҙ булған, имеш, ләкин Рәсәй яғы был хәбәр буйынса бер ниндәй ҙә аңлатма бирмәй.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Салауат районының Нәсибаш ауылынан Сания Әхмәтова 100 йәшлек юбилейын билдәләне. Ошо уңайҙан яҡташыбыҙҙы ил Президенты Владимир Путин ҡотланы. "Беҙ һеҙҙең быуын - еңеүселәр быуыны менән ихлас ғорурланабыҙ. Һеҙ Бөйөк Ватан һуғышының ауыр һынауҙарын намыҫ менән үттегеҙ, ә һуғыштан һуң иптәштәрегеҙ, халҡыбыҙ менән илде тергеҙҙегеҙ. Тормош юлығыҙ һәр саҡ ныҡлыҡ, изгелеккә һәм ғәҙеллеккә ышаныс, Тыуған илгә тәрән һөйөү өлгөһө булып хеҙмәт итер", - тиелә ҡотлау телеграммаһында.

✓Белореттан Матвей Потапов бәләкәй калибрлы ҡоралдан атыу буйынса Рәсәй кубогы этабында өсөнсө урын алды. Илдең көслө спортсылары араһындағы ярыштар Ижевскиҙа үтте. Башҡортостандың Спорт министрлығында билдәләүҙәренсә, Матвей - Белорет районының олимпия резервындағы спорт мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе, Рәсәйҙең спорт мастеры.

✓2024 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостандың Бокс федерацияһы илдә иң яҡшыһы тип танылды. Республиканың вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов үҙенең телеграм-каналында ҡыуаныслы яңылыҡ менән уртаҡлашты. Юғары награда бишенсе Бөтә Рәсәй боксерҙар форумында тапшырылды. Спорт министрлығында билдәләүҙәренсә, әлеге ваҡытта Башҡортостанда 4 меңдән ашыу кеше бокс менән профессиональ рәүештә шөғөлләнә. Ә 499-ҙан ашыу спортсы - Рәсәйҙең спорт мастерына кандидат, 23-ө - Рәсәйҙең спорт мастеры исеменә, шулай уҡ икәүһе бокс буйынса Рәсәйҙең халыҡ-ара класлы спорт мастеры исеменә лайыҡ булды.

✓Башҡортостанда 2024 йылда ЭКО ярҙамында 455 сабый, шул иҫәптән 14 игеҙәк тыуған. Был хаҡта республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр иттеләр. Ведомствола билдәләүҙәренсә, былтыр республикаға ярҙамсы репродуктив технологияларға 2178 квота бүленгән, шул иҫәптән 1743 ЭКО процедураһына һәм 435 криокүсереү программаһына. Бер йылда көндөҙгө стационарҙа 829 ҡатын-ҡыҙ түлһеҙлектән дауаланған, 250-һе йөккә уҙған, был иһә ЭКО программаһының түлһеҙлектән яфаланған ғаиләләр өсөн мөһим булыуын һәм уның демография үҫешенә тос өлөш индереүен дәлилләй.

✓Һуңғы өс йылда Башҡортостанда сабыйҙар үлеме 18 процентҡа кәмегән. Был хаҡта Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 18-се ултырышында республикала бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Ольга Панчихина белдерҙе. Медицина белгестәренең эше һәм һаулыҡ һаҡлау учреждениеларын яңыртыу һөҙөмтәһендә ошондай һөҙөмтәләргә өлгәшелде, тине ул. Панчихина әйтеүенсә, әле республикала 890 меңгә яҡын бала йәшәй, был халыҡтың дөйөм һанынан 21,9 процент тәшкил итә.

✓ *Манараларҙы эшләү бик ауыр, һәр элемент 80 килограмдан ашыу тарта, архитектура яғынан да үҙ балансын һаҡларға кәрәк ине. Күп көс талап иткән эш, бер квадрат метрҙы ҡайһы берҙә ике көн эшләргә тура килде.*

ҠЫҪҠАСА

БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ...

Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды "Мираҫ" йәштәр башланғыстарына булышлыҡ итеү фонды менән берлектә башҡорт алфавиты өсөн 30 төрлө шрифт булдырыу һәм яраҡлаштырыу буйынса үҙенсәлекле проект өҫтөндә эштең тамамланыуы хаҡында иғлан итте. Дизайнерҙар, нәшер итеүселәр, уҡытыусылар һәм башҡорт теле менән эшләүселәр милли алфавиттың үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып әҙерләнгән сифатлы шрифттар коллекцияһын бушлай ҡулланыу мөмкинлегенә эйә. Барлыҡ 30 шрифтты ла проекттың рәсми сайтында, шулай уҡ уңайлы телеграм-бот аша күсереп алырға була. Яңы проект ярҙамында бына ошо маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыу планлаштырыла: дизайнерҙар башҡорт телендә аутентик һәм заманса график материалдар эшләй ала; киң мәғлүмәт саралары һәм нәшриәттәр өсөн сифатлы баҫма продукция сығарыу өсөн инструменттар була; уҡытыусылар һәм студенттар шрифттарҙы белем биреү һәм ғилми материалдарҙа ҡуллана ала; веб-уйлап сығарыусылар һәм UI/UX-дизайнерҙар цифрлы продукттарҙы башҡорт телен белгәндәр өсөн ҡулайлаштыра ала.

✓ **Махсус хәрби операция биләмәһендә яраланған яугирҙарҙың ата-әсәләре һәм хәләл ефеттәре йылына 35 көнгә тиклем түләүһеҙ отпуск алыу хоҡуғына эйә.** Дәүләт Думаһы депутаттары беренсе уҡыуҙа Рәсәйҙең Хеҙмәт кодексына тейешле төҙәтмәләр ҡабул итте. Закон проекты тулыһынса хуплау тапҡа, эш биреүсе ғаризала күрһәтелгән ваҡытта отпуск бирергә бурыслы. Дәүләт Думаһы сайтында билдәләнеүенсә, хәрби һәләк булған осраҡта ата-әсәһе һәм тол ҡатыны (тол ире), документка ярашлы, 14 көнгә тиклем өҫтәмә отпуск (эш хаҡы һаҡланмай) алырға мөмкин. Әлеге ваҡытта ошо сараларҙың ҡайһы берҙәре ғәмәлгә ашырыла, ләкин МХО-ла ҡатнашыусыларҙың барыһына ла ҡағылмай. Закон фронтовиктарҙы һәм уларҙың ғаилә ағзаларын социаль яҡлауҙы көсәйтә, отпускыға гарантияларҙы арттыра, тип билдәләне парламентарийҙар.

✓ **Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы медицина ойошмаларында һәм уларҙың структура бүлексәләрендә медицина хеҙмәткәрҙәренең вакантлы вазифалары исемлеген раҫланы.** Документ Башҡортостандың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. Һүҙ Башҡортостан биләмәһендә урынлашҡан ауылдарға, эшсе ҡасабаларға, ҡала тибындағы ҡасабаларға, йә иһә 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаларға эшкә ҡайтҡан табиптарға түләүҙәр тураһында бара. Бер тапҡыр бирелә торған компенсацияның күләме - 750 мең һумдан алып 1,5 миллион һумға тиклем. Вазифалар реестрында - участка терапевы, педиатр, хирург, невролог, стоматолог, акушер-гинеколог, анестезиолог-реаниматолог, ғаилә табибы, эндокринолог, фтизиатр, офтальмолог, онколог, травматолог-ортопед, фельдшер, фельдшер-акушерлыҡ пункты мөдире һәм башҡалар.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

ТАУ БАШЫНДА БЕР МӘСЕТ...



(Башы 1-се биттә).

Төҙөүселәр әйтеүенсә, бөгөнгө көндә мәсеттең дүрт манараһы ла Грецианан килтерелгән мәрмәр менән йөҙләнгән, мозаика менән биҙәлгән.

- Манараларҙы эшләү бик ауыр, һәр элемент 80 килограмдан ашыу тарта, архитектура яғынан да үҙ балансын һаҡларға кәрәк ине. Күп көс талап иткән эш, бер квадрат метрҙы ҡайһы берҙә ике көн эшләргә тура килде. Тотош илдән белгестәр йәлеп ителде. Бөгөн үк Өфө халҡы һәм баш ҡала ҡунаҡтары уларҙың матурлығы менән һоҡлана ала. Төҙөүселәр мәсеттең эсе яҡты булһын өсөн тәҙрәләрен алмаштыра. Беҙ Радий Фәрит улына ярҙамы өсөн рәхмәтлебеҙ, финанслау йәһәтенән бер ниндәй ҙә һорауҙар юҡ. Бөтә этаптарҙы ваҡытында тамамлау һәм республика Башлығы ярҙамында алға барыу өсөн барыһы ла төҙөүселәргә бәйле, - тине Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты аппараты етәксеһе Тимур Зәйнуллин.

- Шәхсән минең өсөн был - иң ҡатмарлы төҙөлөш объекттарының береһе, сөнки оҙаҡҡа һуҙылған объектҡа килеүе һәр саҡ ауыр. Әле тегендә, әле бында төрлө проблемалар килеп тыуа, шуға күрә тикшереү өсөн күп ваҡыт сарыф ителде. Быйыл фасадты көпләүгә тотонорға тигән ҡарар ҡабул иттек. Быйыл фасадты эшләп, киләһе йылда эске биҙәкләү эштәрен башлаһаҡ, яҡшы булыр ине. Ваҡытын әйтмәйем, финанс мөмкинлектәренә ҡарап, эште тыныс ҡына дауам итербеҙ. Уны туҡтатмайбыҙ, Хоҙай ярҙамы менән башҡарып сығырбыҙ, - тине Радий Хәбиров "Башинформ" журналисына, "Әр-Рәхим" мәсетендә төҙөлөш барышы менән танышҡандан һуң.

Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.

ИЗГЕ ҒӘМӘЛ

Өфөлә Йәһүд милли-мәҙәни үҙәге янында Үҙенсәлекле балалар өсөн үҙәккә тәүге нигеҙ ташы һалыу тантанаһы уҙҙы. Унда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, Рәсәйҙең баш раввины Берл Лазар, Өфөнөң һәм республиканың баш раввины Дан Кричевски ҡатнашты.

- Бөгөн Өфө йәһүдтәре ойошмаһы тормошонда ғына түгел, ғөмүмән, республикабыҙҙа ла бик мөһим һәм сағыу ваҡиға. Хөрмәтле ребе менән беҙ ике йыл буйы ошондай объект төҙөү проектын тикшерҙек. Был уның башланғысы булды. Беҙ ер участкаһы алырға ярҙам иттек. Был проектты башлаған саҡта мин 2019 йылда ҡарттар йортон асҡан ваҡытты иҫемә төшөрҙөм. Ул да беҙҙең ҡәҙерле ребе тәҡдиме һәм тырышлығы менән төҙөлгән. Уның өсөн, Өфө йәһүдтәре ойошмаһының 25 йыллыҡ юбилейы йылында, ихлас рәхмәт һүҙҙәрен еткерәм. Әле төҙөләсәк үҙәк тә беҙгә бик кәрәк. Республикала социаль медицина реабилитацияһына мохтаж 20 меңдән ашыу бала бар, - тине Радий Хәбиров.

Рәсәйҙең баш раввины һүҙҙәренсә, иң яҡшы инвестиция - балаларыбыҙға. "Үҙенсәлекле балаларға ярҙам итеү - иң изге ғәмәл. Беҙҙең Өфө ойошмаһы үҙ балалары хаҡында ғына түгел, тирә-йүндәгеләр хаҡында ла хәстәрлек күрә. Бына шул була инде халыҡтар дуҫлығы", - тип билдәләне Берл Лазар.

ШӨКӨР, ТАТЫУБЫҘ

Тышҡы мәғлүмәт баҫымына ҡарамаҫтан, Башҡортостанда 2024 йылда милләт-ара һәм конфессия-ара конфликттар булманы. Республика халҡы тыныслыҡ һәм татыулыҡ мөхитендә йәшәй, быны социологтарҙың мәғлүмәттәре раҫлай.

Мәсәлән, һорау алыуҙа ҡатнашҡан республика халҡының 90 проценттан ашыуы төрлө этностар вәкилдәре араһындағы мөнәсәбәттәрҙе ыңғай баһалай. Урындағы халыҡ менән мигранттар араһындағы мөнәсәбәттәр ҙа тыныс: һорау алыныусыларҙың 77,1 проценты сит ил граждандарына кире мөнәсәбәт кисермәй. Был мәғлүмәттәр Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса советтың даими эксперт комиссияһы ултырышында яңғыраны.Эксперт комиссияһы ултырышында федераль һәм төбәк башҡарма власть органдары, хоҡуҡ һаҡлау органдары, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре, ғалимдар милләт-ара мөнәсәбәттәр өлкәһендә экстремистик күренештәрҙе иҫкәртеү йәһәтенән үҙ-ара эш итеүҙең көнүҙәк мәсьәләләрен ҡараны һәм 2024 йылға эшенә йомғаҡ яһаны.

"Республика халҡы провокацияға бирешмәй. Киләсәктә лә йәмғиәтебеҙҙе милли, дини һәм тел билдәләре буйынса бүлеү һәм тарҡатыу, беҙгә ҡаршы йүнәлтелгән һәр төрлө провокациялар һәм агрессив ғәмәлдәр уңышһыҙлыҡҡа дусар буласағына ышанам. Был йәһәттән власть органдары хеҙмәткәрҙәренең хеҙмәте ҙур", - тип билдәләне эксперт комиссияһы рәйесе, БР Мәҙәниәт министрлығының гуманитар тикшеренеүҙәр үҙәге директоры Марат Мәрҙәнов. Ултырыш йомғаҡтары буйынса эксперттар Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Милләт-ара мөнәсәбәттәр буйынса советҡа республикала дәүләт милли сәйәсәтен камиллаштырыу буйынса тәҡдимдәр ебәрҙе.

Роман ЯКИМЧУК.

ЯУГИРҘАРҒА - ҠОРОТ

Йылайыр районы ирекмәндәре Махсус хәрби операция яугирҙары өсөн 700 порция ҡорот киптергән.

"Преображенск" халыҡты социаль хеҙмәтләндереү үҙәгендә ошондай рекорд ҡуйылған. Был хаҡта республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова үҙенең телеграм-каналында хәбәр итте. Үҙәк етәксеһе Ғәлиә Солтанова һүҙҙәренсә, оло йәштәге ирекмәндәр клубында 300-гә яҡын кеше эшләй. Улар маскировка селтәрҙәре бәйләй, тегеү майҙансығында эшләй, шифалы үсемлектәр, йәшелсәләр йыйып, уларҙан аш-һыу өсөн витамин йыйылмалары әҙерләй. "Ҡорот - ул башҡорт халҡының милли ризығы, беҙ уны ике төрлө итеп: һыйыр майы менән һәм майһыҙ әҙерләнек. Башҡорт яугирҙары ҡоротто бик ярата. Егеттәр хәрби заданиеға барғанда уны үҙҙәре менән ала", - ти Ғәлиә Солтанова.

Әйткәндәй, "Преображенск" халыҡты социаль хеҙмәтләндереү үҙәге РФ Президенты грантын яулаған. Хәҙер ирекмәндәрҙең ҡеүәтле дегидраторҙары, уңайлы ваҡлаусылары, электрон үлсәүҙәре һәм башҡа етештереү процесы тиҙләткестәре бар.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры бойороғо менән Альберт Закиров республиканың урман хужалығы министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Ул 1984 йылда Дәүләкәндә тыуған. "Урман хужалығы инженеры" белгеслеге буйынса Башҡорт дәүләт аграр университетын тамамлаған. 2016 йылдан Урман хужалығы министрлығында эшләй, 2017 йылдан 2025 йылдың 29 ғинуарына тиклем урмандарҙы файҙаланыу һәм тергеҙеү, дәүләт урман реестрын алып барыу бүлеге етәксеһе вазифаһын биләй.

✓2024 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостанда 3 миллион 348 мең "квадрат" торлаҡ файҙаланыуға тапшырылған. Был хаҡта РБК-Өфө Росстатка һылтанма менән хәбәр итә. Баҫма мәғлүмәттәре буйынса, был 2023 йылғы күрһәткестәрҙән 1 процентҡа юғарыраҡ. Уҙған йылдың декабрендә генә республикала 534,7 мең кв.м торлаҡ сафҡа индерелгән, уларҙың 115 меңе - шәхси төҙөүселәргә, ә дөйөм күләмдән 2,3 миллион кв.м халыҡҡа тура килә. Башҡортостан Рәсәй субъекттары араһында торлакты сафҡа индереү буйынса илдә - һигеҙенсе, Волга буйы федераль округында икенсе урынды биләй.

✓Бөрйән районы хакимиәтенең элекке башлығы Ғәзиз Манапов Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләнде. Тейешле бойороҡҡа республика Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған. Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты мәғлүмәттәре буйынса, Ғәзиз Миңләхмәт улы 1983 йылда Бөрйән районында тыуған. Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтын, "Муниципаль берәмектең социаль-иҡтисади үҫеш стратегияһы" белгеслеге буйынса республика Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын тамамлаған.

✓2025 йылда Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыу процедураһында артыҡ үҙгәрештәр көтөлмәй, тип билдәләне Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлитбирҙин. "Иң мөһиме, хәҙер сығарылыш уҡыусыларына имтихан биреү өсөн фәндәрҙе һайлап, 1 февралгә тиклем Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыу өсөн ғариза бирергә, артабан тыныс ҡына имтихандарға әҙерләнергә кәрәк. Беҙҙең бурыс - дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын һәүефһеҙ һәм мөмкин тиклем асыҡ итеп үткәреүгә әҙерләнеү", - тине Илдар Мәүлитбирҙин.

✓Америка Ҡушма Штаттарында һәләкәткә тарыған самолетта Рәсәй фигуристары - 1994 йылда фигуралы шыуыу буйынса донъя чемпиондары Евгения Шишкова һәм Вадим Наумов булған. Был хаҡта РИА Новости хәбәр итә. Киң мәғлүмәт саралары мәғлүмәттәре буйынса, Канзастан Вашингтонға осҡан пассажир самолеты Black Hawk хәрби вертолеты менән бәрелешкән. American Airlines авиакомпанияһы рейсы бортында - 60 пассажир һәм 4 экипаж ағзаһы, вертолетта 3 хәрби булған.

БАЛАЛАР ҺАҠЛАУЛЫ БУЛҺЫН!

ФИЗКУЛЬТУРА ДӘРЕСЕН...

Башҡортостанда уҡыусыларға ҡыш көнө асыҡ һауала физкультура дәрестәрен үткәреү өсөн температура нормалары хаҡында иҫкә төшөрҙөләр.

"Ҡышҡы миҙгел - балаларыбыҙҙың сәләмәтлеген нығытыу өсөн иң яҡшы ваҡыт! Саф һауала физкультура организмды сыныҡтырыуға, иммунитетты нығытыуға һәм кәйефте күтәреүгә булышлыҡ итә. Иҫегеҙгә төшөрәм, "Физик культура" предметы федераль эш программаларына ярашлы, дөйөм белем биреүҙең барлыҡ кимәлдәрендә лә мотлаҡ һанала. Ҡышҡыһын физкультура дәрестәрен үткәргәндә, Башҡортостандың айырым биләмәләренең төрлө климат зоналарына ҡарауы мөмкин икәнлеген иҫәпкә алып, санитар ҡағиҙәләргә һәм нормаларға таянырға кәрәк", - тип яҙа Башҡортостандың мәғариф министры Илдар Мәүлетбирҙин социаль селтәрҙәгә сәхифәһендә. Министр шулай уҡ "Физик культура" дәресе буйынса федераль эш программаларына ярашлы тейешле шарттар булмаһа (мәсәләң, ҡарһыҙ ҡыш), "Саңғы ярышы" программаһын "Еңел атлетика", "Гимнастика", "Йөҙөү" һәм "Спорт уйындары" кеүек программаларҙы тәрәнәйтеп үҙләштереү менән алмаштырырға мөмкин икәнен билдәләне.

СӘЛӘМӘТ БУЛЫП ҮҪҺЕН

Дәүләт Думаһы депутаттары икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодекска балаларҙы хәүефле газлы тауарҙар ҡулланыуҙан яҡлауҙы көсәйткән үҙгәрештәр ҡабул итте.

Яңылыҡ бер тауыштан ҡабул ителде, тип хәбәр итәлә парламент сайтында. Был үҙгәрештәр кодексты боҙған өсөн административ яуаплылыкты күҙ унында тота, шул иҫәптән штрафтар формаһында ла. Әйтәйек, физик берәмектәр өсөн штраф күләме - 60 мең һум, вазифа биләгәндәргә - 300 мең һум, ойошмалар өсөн 600 мең һум була. "Балалар һау-сәләмәт булып үҫһен, шулай уҡ уларҙы хәүеф-хәтәрҙән һаҡлау өсөн барыһын да эшләргә кәрәк", - тип белдерҙе Вячеслав Володин. Бынан алдараҡ Башҡортостан парламенты Дәүләт Думаһына мәктәптәрҙә тәмәке тартҡан өсөн штраф тураһында закон проектын индерҙе.

ТӘМӘКЕ ҺАТМА!

Дәүләт Думаһы балаларға тәмәке һәм составында никотин булған продукция, уның ҡулайламаларын йәки етештереү өсөн сеймал һатҡан өсөн яуаплылыкты арттырған закон ҡабул итте.

Граждандарға штраф 300 мең һумғаса арта (әле - 60 мең һумға тиклем), вазифа биләгәндәргә - 700 мең һумғаса (әле 300 мең һумға тиклем), ойошмаларға - 2 миллион һумғаса (әле 600 меңгә тиклем). Дәүләт Думаһында билдәләүҙәренсә, быйыл уҙғарылған тикшереүҙәр никотинлы продукцияның 43 процентын маркировка талаптарын үтәмәйенсә һатыуҙарын күрһәткән. Шулай уҡ башҡа етешһеҙлектәр ҙә теркәлгән, шул иҫәптән - белем биреү учреждениелары янында һатыу. Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында 6,5 мең самаһы протокол төҙөлгән. Быларҙың барыһы ла ошо өлкәлә ҡатыраҡ закондар кәрәклеге хаҡында һөйләй.

ЯЛЫН ДА ХӘСТӘРЛӘ

Дәүләт Думаһы ҡабул иткән законға ярашлы, бөтә балалар ҙа шифаханаларҙа һәм балалар лагерҙарында ял итеү өсөн тиң мөмкинлеккә эйә.

Хәҙер төбәк властары, инвалид балалар муниципаль һәм дәүләт һауыҡтырыу лагерҙарына бара алһын өсөн, квоталар билдәләргә хоҡуҡлы. Ләкин бындай балаларҙы ҡабул иткән учреждениеларҙа тейешле ҡоралмалар һәм башҡа шарттар булырға тейеш. Квоталар ошондай ойошмалар араһында бүленә. "Закон һаулыгы буйынса проблемалары булған балаларҙың ялы өсөн мөмкинлектәрҙе киңәйтә. Махсуслашҡан лагерҙар күп түгел. Әммә сәләмәтлек мөмкинлектәре сикле балаларға көс туплау, яңы һығай тәьҫораттар алыу айырыуса мөһим. Уларҙың йәй көнө өйҙә ултырыуы дөрөҫ түгел", - тип белдерҙеләр Дәүләт Думаһында.

ТӘРБИӘҮИ ЭШ МӨҺИМ

Рәсәйҙә балалар өсөн ял лагерҙарында тәрбиә эше камиллаштырыла. Дәүләт Думаһы депутаттары икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа тейешле закон ҡабул итте.

Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин һүҙҙәренсә, балаларҙың ял лагерҙарында тәрбиәүи эштең берҙәм программаһы булдырыла. Программаны һәм уның календарь планын федераль башҡарма власть органы раҫлай. Вожатыйҙар һәм тәрбиәселәр үҙ эшен ошо документтар буйынса төҙөргә бурыслы. "Календарь планға мотлаҡ ата-әсә көндәре, балаларҙы сәнғәт һәм нәфис әҙәбиәт әҫәрҙәре менән таныштырыу, фильмдар күрһәтеү, шулай уҡ уйындар һәм ватансылыҡ тойғоһо, эш һөйөүсәнлек, үҙ-ара хөрмәт, мәҙәни мираҫҡа, тәбиғәткә һәм тере-йәк мәхлүккә һаҡсыл мөнәсәбәт формалаштырыуға йүнәлтелгән башҡа саралар индерелә", - тине Дәүләт Думаһы рәйесе. Билдәләнеүенсә, депутаттар 2025-2027 йылдар бюджетына төҙәтмәләр әҙерләгән һәм ҡабул иткән, уларға ярашлы 2025, 2026 һәм 2027 йылдарҙа балаларҙың ялы һәм уларҙы һауыҡтырыу өсөн заманса инфраструктура булдырыуға бюджет ассигнованиелары йыл да 1 миллиард һумға арттырыла.

НИМӘ ЯРАМАЙ?

Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты белгестәре бала ниндәй иң мөһим "ярамай"ҙы үҙләштерергә тейешлеген хәбәр итте.

Тәҡдимдәр балиғ булмағандар ҡатнашлығында булған фажиғәләр статистикаһына нигеҙләнеп төҙөлгән. Шулай итеп, балалар өсөн төп хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре:

- Асыҡ ут һәм ҡыҙған әйберҙәр янында уйнамағыҙ.
- Электр приборҙары ҡабыҙылғанын онотмағыҙ.
- Плита өҫтөндә әйбер киптермәгеҙ.
- Шырпы, фейерверк, шәм, бенгаль уттары һәм аэрозоль баллондары менән уйнамағыҙ.
- Газ торбаларына эленеп тормағыҙ.
- Электр приборҙарына дымлы ҡулдар менән ҡағылмағыҙ һәм уларҙы ванна бүлмәһендә ҡулланмағыҙ.
- Яҡтырткыстарҙы ҡағыҙ һәм туҡыма менән ҡапламағыҙ.
- Өлкәндәрһеҙ усаҡ яҡмағыҙ.
- Ҡоро үлән һәм тирәк мамығын яндырмағыҙ.
- Үләндә шешә йәки быяла ярсыҡтары ҡалдырмағыҙ, сөнки улар лупа кеүек янғынға сәбәпсе була ала.

Ғәҙәттән тыш хәл осрағында 112-се һанлы ашығыс хеҙмәттәргә шылтыратырға мөмкин.

Ләйсән ЗАКИРОВА.

ҠЫҪҠАСА

ҺУҒЫШ ВЕТЕРАНЫ ИКӘН...

Еңеүҙең 80 йыллығы уңайынан Рәсәй Президенты Владимир Путин Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына үҙҙәре йәшәгән төбәктәрҙең, ҡалаларҙың һәм муниципалитеттарҙың почетлы граждандары исемен биреү башланғысы менән сығыш яһаны. Һәр фронтовик ошондай статуска лайыҡ, тип билдәләне дәүләт башлыгы. Өфө хакимиәте башлыгы Ратмир Мәүлиев социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итеүенсә, ул ҡала советына Башҡортостандың баш ҡалаһында теркәлгән һәм йәшәгән 45 Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыға "Өфө ҡалаһының почетлы граждандары" исемен биреү тураһында үтенес менән мөрәжәғәт иткән. "Улар үҙҙәренең ҡыйыулығы, батырлығы менән ошо исемгә лайыҡ булды. Тыуған илде һаҡлағандары өсөн ысын йөрәктән рәхмәт белдерәбеҙ! Ғорурланабыҙ һәм ныҡлы һаулыҡ теләйбеҙ!" - тип яҙа Ратмир Мәүлиев. Хәбәр ителеүенсә, Башҡортостанда Еңеүҙең юбилейына алты меңдән ашыу ветеранға "Путин аҡсаһы" түләнә.

✔ **Өфөлә 5-9 мартта грек-рим көрәше буйынса 21 йәшкә тиклемгә юниорҙар араһында Рәсәй беренселеге ойоштороласаҡ.** Башҡортостан вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов үҙенең телеграм-каналында хәбәр итеүенсә, был башланғыс менән Рәсәйҙең Спорт көрәше федерацияһы сығыш яһаған. "Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров был идеяны хупланы. Республиканың спорт көрәше федерацияһы һәм Рәсәй юниорҙар йыйылма командаһының тренерҙар составы вәкилдәре менән ойоштороу мәсьәләләрен тикшерҙек. Ярышты Көрәш һарайында үткәрергә йыйынабыҙ", - тип билдәләне Хәбибов. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Өфөнөң Көрәш һарайы 2024 йылдың авгусында баш ҡаланың 450 йыллығы уңайынан асылды. Үҙенсәлекле спорт объектында "Рәсәй - спорт державаһы", XX Рәсәй һәм Ҡаҙағстандың төбәк-ара хеҙмәттәшлек форумы һәм Ялта халыҡ-ара иҡтисади форумы үткәрелде. Көрәш һарайы шулай уҡ билбау көрәше буйынса Донъя кубогын, Артур Әхмәтханов иҫтәлегенә көрәш буйынса Бөтә Рәсәй турнирын ҡабул итте.

✔ **2025 йылдың 1 июленән республикала торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә түләү арттырыла. Уртаса ул 14,6 процентҡа күтәреләсәк. Былтыр ул 13,6 процентҡа арттырылғайны.** Яңы йылдың 1 ғинуарынан хеҙмәткә түләүҙең минималь дәүмәле артты. Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова әйтеүенсә, район коэффициенты менән бергә ул айына 25 806 һум тәшкил итте. Бюджеттан тыш сектор өсөн - 27 277 һум. Тимәк, эш биреүсе хеҙмәткәре өсөн эш хаҡын ошо күрһәткестән дә кәмерәк ҡуя алмай. Шулай уҡ йәшәү минимумы 14,8 процентҡа артты һәм йән башына 17 733 һум тәшкил итте. Хеҙмәткә һәләтле йәштәгеләр өсөн - 19 329 һум, пенсионерҙар өсөн - 15 250 һум, балалар өсөн - 17 201 һум. Ошо күрһәткескә ҡарап, социаль түләүҙәр билдәләнә.

БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә муниципалитет башлыҡтарына Еңеүҙең 80 йыллығына әҙерләнергә ҡушты. "Яңы йыл алдынан Еңеүҙең 80 йыллығын билдәләү буйынса ойоштороу комитеты ултырышы булды. Беҙ Өфөлә Парад үткәрәбеҙ, төрлө саралар ойоштороласаҡ. Муниципалитет башлыҡтары, ошо бөйөк датаға бәйле пландар ҡора башлағыҙ", - тине Радий Хәбиров республика район-ҡалалары хакимиәттәре етәкселәренә.

✔Өфөнөң Салауат Юлаев һәйкәле 1000 һумлыҡ аҡсала һүрәтләнеүе ихтимал. Был хаҡта Башҡортостан Милли банкы идараһы Марат Кашапов республика журналистары менән осрашыу ваҡытында белдерҙе. "Аҡсаларҙың дизайны даими үҙгәреп тора. 2025 йылдың аҙағына тиклем 1000 һумлыҡ яңыртылған аҡсаны күрһәтеү планлаштырыла. Башҡортостандан унда Салауат Юлаев һәйкәле һүрәтләнер тип өмөтләнәбеҙ. Билдәле булыуынса, ул Милли банк үткәргән һорау алыу һөҙөмтәләре буйынса исемлектә бар", - тине Марат Кашапов. Уның һүҙҙәренсә, 2028 йылдың аҙағына тиклем 1997 йыл өлгөһөндәге 10, 50 һәм 500 һумлыҡтарҙы яңыртыу планлаштырыла.

✔Сергей Плотников Башҡортостандың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры урынбаҫары итеп тәғәйенләнде. Әлегә тиклем ул Өфөнөң Октябрь районы хакимиәте башлығы вазифаһында эшләне. Плотниковтың яңы вазифаға тәғәйенләнеүен республика Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығының матбуғат хеҙмәтендә раҫланылар. Ул йылылыҡ, һыу менән тәьмин итеү һәм һыу бүлеү системаларын төҙөү, реконструкциялау, ремонтлау; айырым фатирҙы йылытыу системаһына күсеү өсөн яуаплы.

✔Башҡортостан спортсыһы Динислам Зюзин Сочиҙа уктан атыу буйынса Бөтә Рәсәй ярыштарында алтын миҙал һәм кубок яуланы. Республиканың Спорт министрлығы хәбәр итеүенсә, "Рәсәй Федерацияһының Генераль прокуроры кубогы" турнирында илдең 500 спортсыһы ҡатнашты. Улар араһынан Динислам Зюзин "21 йәшкәсә юниорҙар" дисциплинаһының шәхси зачетында иң мәргәне булды.

✔Башҡортостан фристайлсыһы Ксения Шаронова "акробатика" дисциплинаһында Рәсәй кубогын яуланы. Республиканың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, спортсы ярыштарҙың икенсе этабында еңеүгә өлгәште. Бынан тыш, Илдар Хәкимов бронза миҙалға лайыҡ булды. Ике спортсы ла Елена һәм Роберт Муллағәлиевтар етәкселегендә тау саңғыһы спорты буйынса олимпия резервындағы спорт мәктәбендә шөғөлләнә.

"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...

КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

Ҡурпысыҡ, урман өйрәге

(Вальдшнеп)

Эре (күгәрсен ҙурлығында), оҙон суҡышлы, ҡыҫҡа аяҡлы сәпсәү. Өҫкө яғы - ерән, аҫҡы өлөшө тар ғына буй һыҙыҡлы һәм көл төҫөндә. Башы - йәш ҡоштарҙың маңлайы ла - ҡара һыҙатлы. Күҙҙәре ҙур, бер аҙ елкәһенә сығып тора. Ҡанаттары киң. Шым ғына осоп китә.

Киң таралған. Дымҡыл урманда (ғәҙәттә, ҡатнаш урмандар шундай була) оя ҡора, баҡса һәм парктарҙа ла йыш осрай.

Ҡош туйы осоронда энерҙә ата ҡурпысыҡ башта "мырҡылдаған", унан һуң ике ижектән торған "цит-цит" тигән тауыш сығарып талғын ғына осоп йөрөй, инә ҡоштоң иғтибарын йәләп итә.

Ҡурпысыҡ Башҡортостанда ла күп, тик далалы районда ҙа уны осратырмын тимә. Көньяҡ Уралда урманлы далаларҙа һәм тау урмандарының ситтәрендә оя ҡороп йәшәй. Урал аръяғының төньяҡ өлөшөн үҙ иткән, әммә унда таулы-урманлы районға ҡарағанда һирәгерәк осрай.

Апрелдең икенсе яртыһында осоп ҡайта. Июль башына тиклем көн һайын ҡояш байығандан ҡараңғы төшкәнсе һайрай.

Парлашып йәшәй. Ояны инә ҡош ҡыуаҡтар аҫтына йәки ҡороған ағастарҙың ергә төшөп ятҡан ботаҡтары араһына ҡора. Ерҙәге тәрән булмаған соҡорға үлән, япраҡ түшәй. 4 йомортҡа һала. Уларҙы инә ҡош үҙе генә баҫа. Әгәр ҙә йомортҡаларҙы йә бәпкәләрҙе йыртҡыс ҡоштар ашаһа, яңынан оя ҡора һәм йомортҡа һалып, баҫып сығара. 22-24 көндә бәпкәләр сыға. Инә ҡош уларҙы үҙе эйәртеп йөрөтә һәм ашарға ризыҡ таба. Һуңғараҡ улар үҙ йүндәрен үҙҙәре күрә башлай. Ниндәйҙер хәүеф янай икән, инә ҡош иғтибарҙы үҙенә йәлеп итә һәм шул рәүешле бәпкәләрен һаҡлап ҡала. Инә ҡоштоң аяҡтары менән бәпкәһен ҡорһағына ҡыҫып, шул рәүешле осороп икенсе урынға күсереүен күргәнебеҙ ҙә булды. Бына шулай бик хәстәрлекле әсә ул ҡурпысыҡ йәки урман өйрәге. 10 көнлөк бәпкә үҙе лә осорға маташа, 3 аҙналыҡ булғас иһә ныҡлап оса башлай.

Ҡурпысыҡ - энерҙә һәм төндә әүҙем тормош алып барған ҡош. Ямғыр селәүсендәре һәм башҡа умыртҡаһыҙҙар менән туҡлана. Уларҙы ер аҫтынан үҙе соҡоп эҙләп ала. Төнөн ризыҡ эҙләп баҫыуҙарға, көтөүлектәргә, баҡсаларға, урман юлдарына осоп бара. Үҫемлектәрҙән еләктәр, һуғанбаш үҫемлектәрҙе ашай.

Япраҡ ҡойола башлағас йылы яҡҡа оса һәм был осор ҡара көҙгә тиклем дауам итә. Тупланып осмайҙар, шулай ҙа бер нисә ҡош бергәләшеп оса. Европаның көньяғында, Азия һәм төньяҡ Африкала ҡышлай. 15-20 йыл йәшәй.

М. Баянов, Ә. Мәмәтов,
"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.
(Дауамы бар).

УЙЛЫҒА - УЙ

БЫУЫНДАР АЛЫШЫНҒАНДА...

бик күпте юғалтабыҙ түгелме?

Ни өсөн Рәсәйҙә батша индергән крепостной хоҡуҡты юҡҡа сығарған көндөң 100 йыллығын да, 150 йыллығын да билдәләп үтмәнеләр? Был даталар бит беҙҙән әллә ни йыраҡ та китмәгән - 5-6 быуын ғына алмашынған. Тимәк, был хәлдәр хан заманында түгел, ә бына-бына булған. Асығыраҡ күҙ алдына килтерер өсөн рус әҙәбиәтенән миҫал алайыҡ. Чеховтың атаһы ла, ҡартатаһы ла крепостной крәҫтиәндәр булған. Ҡартатаһы, көнбағыш майы һатып, хәлләнеп киткән һәм, 3 мең 500 һум аҡса түләп, алпауыттан үҙен һәм ғаиләһен һатып алған.

Бына шунда күңелдең иң төпкөләндә, майҙай яғылып, ғорурлыҡ тойғоһо уяна - ә беҙҙең халыҡҡа был ҡағылмаған, бер ҡасан да, власта кем торһа ла... Тормошобоҙ әллә ни маҡтанырлыҡ булмаһа ла, үҙебеҙсә азат тормошта йәшәгәнбеҙ. Ошо азат кеше тойғоһо һәр беребеҙҙә әле лә сағыла. Бындай осраҡта ҡанында бар, тиҙәр. Уйлап ҡараһаң, был да насар түгел. Ҡанда булғас, юғалмаҫ, тибеҙ ҙә ул, ләкин...

...Ҡартинәйем Бөйөк Октябрь революцияһы ваҡытында ҡыҙ бала булған. Граждандар һуғышын хәтерләр, аҡтар-ҡыҙылдар ваҡытында баҙҙа ҡасып ултырҙыҡ, тип һөйләр ине. Беҙ - өс быуын вәкиле. Ул революцияны күрһә, әсәйем - Бөйөк Ватан һуғышына атаһын оҙатҡан, мин Советтар Союзының тарҡалыуына шаһитмын. Уйлап ҡараһаң, былар ҙа әллә ҡасан булмаған икән.

Нимә юғалттыҡ, нимәгә байыҡтыҡ һуң беҙ ошо ваҡыт арауығында?

Ҡартинәйемдең ҡулы алтын булды: йөн иләне, эрләне, бәйләне, балаҫ һуҡты. Бешергән аш-һыуы теләнде йөторлоҡ ине. Йортонда ир кешеһе булмағас (ҡартатайым Шакирйән һуғыштан ҡайтмаған), балта-бысҡыһын да тотто, мал ҡарағас, бесән әҙерләү ҙә уның өҫтөндә булды. Һәр эшкә таҫыллы ине, алтмыш йәшенә тиклем һыйыр ҡараны. Бер ҡасан да тик ултырыуҙы, ял итеүҙе хуп күрмәне, бер эше артынан икенсеһе, сылбыр муйынсаҡтары кеүек, теҙелеп китте. Иҫкесәне иҫәпләмәгәндә, уҡыу-яҙыуҙы, рус телен белмәне. Хаҡлы ялға сыҡҡас, пенсия аҡсаһын 1965 йылда 12 һум итеп ала башланы. Колхозда эшләмәне, мәктәптә йыйыштырыусы ине. Тормошта бары үҙ-үҙенә генә ышанып йәшәне. Яңғыҙы өс ҡыҙын аяҡҡа баҫтырған, буй еткереп кейәүгә биргән. Һуғыштан һуң, урамы менән балалар астан шешенеп үлгәндә, быныһы ла - батырлыҡ. Ҡартинәйем ауырлыҡтарға бирешмәҫ ныҡлы заттан ине, ҡыйынлыҡтар уны сыныҡтырған ғыналыр, урыны менән уҫал да, бик тәртипле һәм ғорур булды. 95 йәшкә етеп, яҡты донъянан китеп барҙы. Ул заманда был йәшкә еткән әбейҙәр бик һирәк булды.

Ҡартинәйем үткән быуат башында донъяға килгән, мин белгән беҙҙең нәҫел-заттың тәүге кешеһе, унан килә - утыҙынсы йылғы инәйем. Уға, һуғыш заманы балаһына, колхоз эшенең бөтә ауырлығы төшкән. 16 йәшендә урман ҡырҡырға ебәрәләр. Сатлама һыуыҡтарҙа билдән көрт йырып, йәш кенә ҡыҙҙар аслытуҡлы агас йыға. Бригадир тоҡсайындағы борсаҡ ондо ҡалаҡлап ҡына урмансыларға өләшә, фатирҙа торған әбейгә ҡайтҡас, уны ҡайнар һыуға болғап эсәләр. Иртәнге аш та, төшкөһө лә, кискеһе лә шул була.

Колхозда эшләгән кешеләрҙең хәле крепостной крәҫтиәндәрҙең яҙмышынан әллә ни йыраҡ китмәгәйне: тапҡан-таянғанына - һалым (ул һуғыштан һуң биш тапҡыр арта), ҡулдарында бер төрлө лә документ юҡ, ауылдан сығып китергә ярамай. Бәлки, шуға ла крепостной хоҡуҡты бөтөрөү көнөн билдәләмәйҙәрҙер

...Был системаның ауыр башы һуғыштан һуңғы быуынға төшә. Әсәйем ғүмере буйы ауыр эштә йөрөнө. Кейәүгә сығып, балалары тыуғас, йөрөмәһә лә булғандыр, юҡ, ни эшләптер башҡа ҡатын-ҡыҙҙар кеүек өйҙә ултырманы. Гел, эш, эш, тине лә йүгерҙе. Ҡара эштә һаулығы ныҡ ҡаҡшаны. Ғүмеренең һуңғы йылдарында быға бик үкенде. Шуныһы яҡшы, етмешенсе йылдарҙа колхозсыларға юғары ғына хеҙмәт хаҡы түләй башланылар.

Әсәйемә лә, миңә лә ауыл кешеләре башҡара торған эштәр таныш. Быға өҫтәп, беҙ уҡырға-яҙырға белдек, шул йәһәттән әсәйем латинса ла өйрәнеп ҡалғайны. Рус теле уның әпәйлек-тоҙлоҡ ҡына ине. Шулай ҙа, балалары таралғас, сит ҡалаларға ла ҡурҡмай сығып китә ине. Йәшерәк саҡтарында атайымдың апаһы донъя көткән Иркутск ҡалаһына ҡунаҡҡа йөрөнөләр. Ҡайтҡас, әсәйемдең шулай тип һөйләгәне хәтерҙә ҡалған: "Эйе, кашолка күтәреп, көнө буйы һөйәк артынан сиратта тормам да!" Атайымдың апаһы менән магазинға барған да, шунда ите комбинатта һуйылып алынған ҡаҡ һөйәк киҫәктәр артынан теҙелгән сиратты күреп ҡайтҡан. Үҙенең көнөнә ике мәртәбә һөт һауып алып инеүенә, ҡаймағы, ҡатығы, майы булыуына ғорурланыр ине...

Әсәйем 75-кә тиклем йәшәне.

...Хәтерләүселәр булғанда, кеше йәне әле йәшәй тиҙәр. Бына ҡартинәйем дә, әсәйем дә һаман минең аша, йәғни өсөнсө быуын вәкиле аша борсола, уйлана, үкенесле генә тормоштарын бәйән итә.

Ҡартинәйем, әсәйем менән сағыштырғанда, мин ул тиклем ауырлыҡ күрмәнем. Уҡыным, эш хаҡына ҡарап йәшәнем. Туған телемдә лә, рус телен дә беләм.

Ә дүртенсе быуынға, балаларыма килгәндә, ауыл кешеһе донъя көтөр өсөн белергә тейешле эштәрҙе улар күреп кенә тоймолай. Йәштәрҙең ауылға ҡайтҡыһы ла килмәй. Уҡығандар, рус теленән тыш, инглиз телен өйрәнделәр, ә бына туған телдәре бик насар. Беҙҙең ата-бабаларҙың шөғөлө булған эштәрҙең береһе менән дә ҡыҙыҡһынмайҙар. Үҙҙәре минең кеүек эш хаҡына ғына ҡарап йәшәйҙәр...

...Шулай итеп, беҙ нимә юғалттыҡ, нимәгә байыҡтыҡ? Был юлда иң ҙур хафа, юғалтыу, әлбиттә, халыҡты халыҡ итеп укмаштырып тотоп торған телебеҙҙең бөгөнгө хәле. Ауылдарыбыҙ тарҡала. Буш ҡалған йорттарҙан да эс бошорғосораҡ бер нәмә лә юҡтыр. Был күренешкә тыныс ҡына ҡарап тороп та, өйрәнеп китеп тә булмай. Ә ауыл, мәҙәниәт, мәғариф, фән өлкәләрен байытып, яңы көс биреп тороусы ине бит.

Бик күп юғалтҡанбыҙ, кире әйләнеп ҡайтмаҫ юғалтыуҙар.

Тиҙ генә бер нәмә лә төҙәлмәй. Беҙ, өс быуын совет кешеләре артынан тағы өс быуын килеп, бөтә яҡтан да камил булған йәмғиәткә атларбыҙ, бәлки. Тик улым быуынына һынауҙарҙың тағы ла яманырағы тура килде. Беҙгә һәүетемсә генә барған тормош кәрәк, шул тормошта башланғыс булырҙай бер нөктә кәрәк, ундай нөктә, үкенескә ҡаршы, әлегә юҡ. Әллә яңылышаммы?..

Мәүлиҙә ӘХМӘТЙӘНОВА,
яҙыусы.
Мәсетле районы Теләш ауылы.

✓ *Случевск тауынан башланып (хәҙерге С. Юлаев скверы) Телеүҙәккә тиклемге территория тотошлайы ҡәберҙәрҙән тора. Биналар төҙөгәндә төҙөүселәр Өфө байҙарының бай ҡәберлектәренә тап була.*

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

(Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)

Граф В.А. Перовский

(1833-1842 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).

Ҡазак отрядтары ҡурсалаған солтан-хакимдарҙың гәйепле барымтасыларҙы язаға тарттыра алырлыҡ көсҡеүәттәре булмай, һәм былай маҡсатҡа өлгәшеү өсөн казак командалары йәлеп ителә. Перовский ваҡытында ошондай командировкалар йыш була һәм ҡайһы берҙә ҡуйылған маҡсатҡа өлгәшелә. Ҡырғыҙ өйөрҙәрен тар-мар иткәс, уларҙың етәкселәре үлтерелә - әммә быға ҙур ауырлыҡтар менән өлгәшелә, һәм быны бары тик бәхетле осраҡ тип атарға була.

1839 йылда элекке мәжбүри полктың бер нисә йөҙ казагы полковник Геке етәкселегендә үҙенең өҫтөнән бер ниндәй ҙә власты танымаған билдәле батыр Исәт Ҡотобаровты язаға тарттырыу маҡсатында далаға ебәрелә. Башҡорттар менән көсәйтелгән был отряд йәйге эҫе көндәрҙә Ҡотобаровты далала оҙаҡ эҙләй. Унһыҙ, үҙ сиратында, ниндәй ҙә булһа батырҙарса гәмәл менән дан ҡаҙанырға ниәт итеп, үҙҙәренең насар ғына ҡоралланған рус отряды һаҡлаған солтан-хакимын тар-мар итергә ҡарар итә һәм шымсылары аша солтандың төнгә ҡайҙа урынлашыуы хаҡында белешеп тора. Быңа нисек килеп сыға: шымсылар солтандың бер ниндәй хәүеф-хәтәр тоймайынса ғына төн уҙғарырға йыйыныуын белеп ҡалып, ошо хаҡта Ҡотобаровҡа хәбәр итер өсөн сапҡын ебәрәләр; әммә тап шул саҡта төнгә ҡаршы солтан янына казакатар, башҡорттар, пехота ротаһы һәм атлы казак артиллерияһы дивизионы менән полковник Геке килә. Ҡотобаров, шымсыларынан хәбәр алғас, үҙенең 3 меңдән артығыраҡ кешенән торған отряды менән солтан-хакимға һөжүм итергә була. Иртәгәһенә, шымсылар күрһәткән урынға килеп еткәс, үҙенең алданғанына төшөнә, шымсыларҙы аҫып ҡуйырға бойора, һәм, үҙен ҡурҡаҡ итеп күрһәтмәҫ өсөн, алышҡа инә; ҡырғыҙҙар өсөн уның һөжүмтәһе яман була: күмәкләп ташланыуҙарына ҡарамаҫтан, уларҙың һөжүме кире ҡағыла, улар ҙур юғалтыуҙарға дусар ителә. Казактар уларҙы эҙәрлекләй башлай. Ырымбурҙарҙың бер төркөмө кешеләре Исәт Ҡотобаровты күреп ҡалып, таный, ә Каменноозерный отряды урядницы, йылғыр һәм отҡор Богатырев, уның ҡасып барған юлын ҡыйырға телә, алғараҡ сабып барып етә; һыуырҙарҙан ҡалған түңгәктәр артына йәшенеп, Исәттең килеп етеүен көтә; уны эҙәрләкләп килеүсе казактар уға мылтыҡтарынан аталар; уларҙың ҡайһы бер пулялары Исәткә тейһә лә, зыян килтермәй, сөнки ул тимер һайман кейгән була.

Богатырев, ошоно һиҙеп ҡалып, унын атына төҙәп атырға була; унын бер пуляһы аттың сатына барып тейә; яраланған ат йығыла, Исәт аты янында тороп ҡала. Сабып килеп еткән казактар уны шашкалары менән тураҡлап ташлай.

Далаға ебәрелгән отрядтарҙа, гәҙәттә, беҙгә тоғро ҡалған ҡырғыҙҙар араһынан абруйлы кешеләр ҙә була; һуңғылары беҙҙекеләргә лә, үҙҙәренекеләренә лә хеҙмәт күрһәтә ине: улар рустарҙың ҡайҙа табан барыуы хаҡында һуңғыларына хәбәр итеп тора, ә барымтасылар шайкаһы һәр саҡта ла отрядтан арттараҡ килә, йә иһә унан ситтәрәк, параллель рәүештә бара. Беҙҙең отрядтар юл ыңғайы осраған ауылдарҙы тар-мар итеп, уларҙың барса малын ҡыуып алып китә һәм, улар менән барған ҡырғыҙ башлыҡтарының күрһәтмәһе буйынса телӛһә ниндәй милекте юҡ итә, гәрсә улар бер гәйепһеҙ кешеләрҙеке булһа ла, сөнки талап алынған милектең һәм малдарҙың билдәле бер өлөшө менән ошо тоғро ҡырғыҙҙар файҙалана ине.

Малдарҙы линияға ҡыуып алып килгәнсе улар, етерлек аҙыҡ булмау сәбәпле, арыҡланып бөтә, уларҙы бик арзан хаҡҡа һатып ебәрәләр. Ҡырғыҙҙарға яза биреү шул рәүешле, ҡәҙимгесә тамамлана.

Хәҙерге Ырымбур, Өфө һәм Һамар губерналары ингән Волга аръяғы-Кама төбәге беҙҙең быуат башынан алып 40-сы йылдарға тиклем Рәсәйгә сағыштырмаса яңыраҡ ҡушылған дәүләт сиге ерҙәре ине. Ырымбур линияһын күбеһе казактарҙан торған гәскәр биләне. Улар линия буйын һаҡлауҙан башҡа, төбәктең эске яғында ла, Өфө, Стәрлетамаҡ, Бөрө һәм хатта Красноуфимск өйәҙҙәрендә һалынған Һамар линияһының эске ҡәлгәләрендә урынлашҡтырыла.

Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.

(Дауамы бар).

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

ӨФӨ-II ҠАЛАСЫҒЫНА - 1500 ЙЫЛ

Батшалар ҙа, ғалимдар ҙа һөйләгән

1669 йылда батша Алексей Михайлович Өфөгә рус кешеләре килеп, боронғо ҡәберлектәрҙән "алтын һәм көмөш әйберҙәр һәм һауыт-һаба ҡаҙып алыуға" борсолоуын белдерә. XVIII быуаттың 30-сы йылдарында Ырымбур экспедицияһының секретаре булған рус ғалимы Петр Рычков бик күп билдәле башҡорттар менән һөйләшә. Ҡара-Табын олоҫо старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаевтың: "Ҡаҙан ханлығының һәм башҡорттарҙың Рәсәй скипетрына буйһонғанға тиклем күп йылдар әүәл хәҙерге Өфө ҡалаһы урынында Ағиҙел йылғаһынан үргә табан Ҡариҙел йылғаһының башына һәм йылға яры буйлап урынлашҡан тауҙарға тиклем оҙонлоғо 10 саҡрымға һуҙылған бөйөк ҡала булған", - тигән һүҙҙәрен үҙенең "Ырымбур топографияһы"нда теркәп ҡалдыра. Рычков күрһәтеүенсә, Муллаҡаевтың мәғлүмәттәре 1735-1740 йылдарҙағы ихтилал ваҡытында юғалған башҡорттарҙың йылъяҙмаһы мәғлүмәттәренә нигеҙләнә.

Башҡортостандың боронғолоғон күнел биреп тикшереүсе, Өфө ҡалаһының башлығы Дмитрий Волков (1875 - 1887 йылдарҙа башлыҡ була) "Өфө губерна ведомстволары"нда: "Беҙ, нигеҙҙә, ҡала ситендә өңһөҙ ҡурғандар: күптән юғалған халыҡтарҙың һәйкәлен - күптән инде тынған көрәш шаһиттарын күрәбеҙ. Йылғалар араһындағы һәм хәҙер Өфө иркен йәйелгән барлыҡ кин майҙан кеше һөйәктәре менән тулған баҫыуҙы хәтерләтә: ҡайҙа ғына көрәк тыҡма, һәр ерҙә һөлдәләр һәм һөйәктәр... Был кеше һөйәктәре менән ашландырылған Аллаһ яланы былда ҡасандыр оҙаҡ һәм ҡаты алыш булыуын, күп кешеләр ыҙаланыуын һәм үлеүен асыҡ һөйләй", - тип яҙа.

Случевск тауынан башланып (хәҙерге С. Юлаев скверы) Телеүҙәккә тиклемге территория тотошлайы ҡәберҙәрҙән тора. Биналар төҙөгәндә төҙөүселәр Өфө байҙарының бай ҡәберлектәренә тап була. Бихисап алтын һәм көмөш биҙәнеү әйберҙәре, һауыт-һаба, башҡа предметтар табыла, уларҙың күп өлөшө юғалып бөтә, бары тик ҙур булмаған бер өлөшө генә Милли музейҙа һаҡлана.

Салауат ХӘМИҘУЛЛИН.

(Дауамы бар).

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79

ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

Апрель айының аҙаҡтарында, май баштарында бойомға ашырылған Берлин операцияһы барышында башҡа үтә мөһим ваҡиғалар булып уҙа. 27 апрелдә 1-се Белорус һәм 1-се Украин фронттары гәскәрҙәре Потсдам ҡалаһын ала. 28 апрелдә 1-се Украин фронты гәскәрҙәре Берлин урамдарында барған алыштар барышында Фриденау, Грюневальд, Рулебен райондарындағы дошман көстәрен юҡ итә. Берлин төркөмөн хасил иткән немец гарнизоны һәм уға ҡушылған гәскәрҙәр 3 өлөшкә бүлгеләнә. Германия командованиеһының Берлин гарнизонына ярҙамға икенсе бер частарҙы йәлеп итеү планы гәмәлгә ашмай: Берлинды ҡамауға алған совет гәскәрҙәре уларҙы тар-мар итә. 29 апрелгә беҙҙең яугирҙарыбыҙ Берлиндың Моабит районын, Ангальт вокзалын, ҡала үҙәгендәге 180-гә яҡын кварталды ала. 30 апрелдә рейхстаг өсөн һуңғы, хәл иткес, алыш башлана. Ул 1 май иртәһенә тикем бара. 1 майға ҡаршы төндә 150-се уҡсы дивизияһының 756-сы уҡсы полкы разведчиктары М.А. Егоров һәм М.В. Кантария рейхстаг өҫтөнә Еңеү Байрағын беркетә. Әлбиттә, тиҫтәләгән совет һалдаттары һәм офицерҙары үҙ частарында алдан әҙерләнгән ҡыҙыл флагтарҙы шулай уҡ рейхстагтың төрлө яҡтарында, төрлө ҡаттарында элеп ҡуйыуға өлгәшә. Советтар Союзы етәкселеге тарафынан рәсмиләштерелгән Еңеү Байрағын ҡан дошманыбыҙҙың төп ояны булған рейхстаг бинаһына өҫтөндә 1945 йылдың 1 майында елберләгән башҡа флагтарҙың уртаҡ символы итеп ҡабул итергә кәрәк.

1945 йылдың 1 майында, СССР-ҙың иң күркәм байрамдарының береһе булып танылған көндә, 1-се Белорус фронты гәскәрҙәре Берлиндың Шорлоттенбург, Шенеберг райондарын, Бранденбург, Линдов ҡалаларын ала; 2 майҙа 1-се Белорус һәм 1-се Украин фронттары гәскәрҙәре дошмандың Берлин төркөмөн тар-мар итеү операцияһын уңышлы тамамлай, совет һалдаттары һәм офицерҙары фашистик Германияның баш ҡалаһын ҡаһармандарса яулап ала. Берлин урамдарында һис бер ышанып булмаҫтай тынлыҡ урынлаша. Артиллерия генералы Г. Вейдлинг етәкселегендәге Берлин гарнизоны ҡалдыҡтары совет командованиеһына баш һалырға мәжбүр була. Шулай уҡ дошмандың Франкфурт-Губен төркөмө лә тулыһынса юҡ ителә: 3 майҙа 1-се Белорус фронты гәскәрҙәре Виттенберг ҡалаһынан көньяҡ-көнсығыштараҡ Эльба йылғаһына килеп етә һәм союздаш Америка армияһы гәскәрҙәре менән бәйләнешкә сыға.

16-сы гв. атлылар дивизияһының Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында ҡатнашыуы хаҡында ҡыҫҡаса рәсми мәғлүмәттәр унын тарихи формуляры тип аталған документта сағылдырыла. Ошо сығанаҡта бына ниҙәр теркәп ҡалдырылған: "19 апрелдән 1945 йылдың 5 майына тиклем дивизия 216 км юл үтте, етди һыу тотҡарлыҡтары булған Фриндландерштром, Гогенцоллерн, Руппинер, Хаупт-Гросс, Гренц-Грабен, Цвейтель-Флюгель-Грабен, Эрстер-Флюгель-Грабен (ике тапҡыр), Зило каналдары, Хафель йылғаһы аша сыҡты. Дивизия алған ҡалалар: Вандлитц, Зандхаузен, Креммен, Бранденбург, Премниц, һәм эре тораҡ пункттары: Лобеталь, Везикендорф, Шмахтенхаген, Гермендорф, Амалиенфельде, Гросс-Бенитц, Метлов, Липе, Дамме, Неннхаузен, Букков, Гарлитц, Бушув, Барневитц, Брилов, Герден, Дюберитц, Темпельфельде, Даневитц, уларҙың барыһы ла дошман оборонаһының эре терәк пункттарына әйләндерелгәйне.

Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.

(Дауамы бар).

✓ *Боронғолоҡ билдәләре телебеҙҙә ярылып ята бит - быны күреү, белеү һәм баһалай алыу бик мөһим. Шул уҡ Ҡашғари тураһында уҡыусыларға аҙ ғына булһа ла мәғлүмәт бир - был уларҙың зиһененә уйылып ҡаласаҡ, ҡыҙыҡһыныу уятасаҡ.*

ЙӨРӘГЕНДӘ ТЕЛ

ғалимә лә,

Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - Өфө фән һәм технологиялар университеты профессоры, филология фәндәре докторы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты деканы Гөлфирә Риф ҡыҙы АБДУЛЛИНА.

Әңгәмәбеҙ башында үҙегеҙ, нәҫел-нәсәбегеҙ хаҡында бер кәлимә һүҙ әйтеп әйтеп үтһәгеҙ, урынлы булыр: уҡыусыларыбыҙ заманыбыҙҙың арҙаҡлы заттарының тәржемәи хәле менән дә ҡыҙыҡһына бит.

- Боронғо этник тамырҙарыма килгәндә, мин - данлыҡлы юрматы ырыуы ҡыҙымын, ошо хаҡта ғорурланып әйтә алам. Шағирәбеҙ Әнисә Таһирова маҡтап яҙған Һикәҙе йылғаһы һыуын һыулап үҫкәнмен, тыуған ауылым - Маҡар, ул - бик ҙур тарихлы боронғо ауыл. Әүәл районыбыҙ Ишембай түгел, Маҡар районы тип аталып йөрөтөлгән. Әйтергә кәрәк, районыбыҙҙа күп кенә билдәле шәхестәр тыуып үҫкән, йә иһә бында килеп уҡыған. Мәҫәлән, киң билдәле ғалимыбыҙ Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев, Советтар Союзы Геройы Зөбәй Төхвәт улы Үтәғолов, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусин, шағир, әҙәбиәт белгесе Вафа Әхмәҙиев, микробиолог, медицина фәндәре докторы, профессор Зәйнулла Ғәбиҙуллин, физика-математика фәндәре докторы, профессор Камил Вәлеев (уның әсәһе Сара Ә.З. Вәлидинең бер туған һеңлеһе) беҙҙең мәктәптә белем алған. Маҡарҙа үҙ ваҡытында эшселәр мәктәбе лә була, урындағы халыҡ уны ФЗО тип атаған.

Мин ошо мәктәптә уҡыған йылдарҙа күренекле шәхестәр менән осрашыуҙар йыш уҙғарыла ине, мәктәбебеҙҙең үҙенсәлекле рухи аураһын уҡыусылар ҙа тоя ине. Йәштәр алдында юғары маҡсаттар ҡуя белгән, һәр яҡтан өлгө булырлыҡ, уларҙың киләсәк тормошона рухи йүнәлеш бирерлек шәхестәр булыуы фарыз. Шәхсән ниндәйҙер бер билдәле кеше булырмын тип уйламаным, әммә ошондай шәхестәргә ҡарап, үҙ тормошомда ла күп нәмәгә өлгәшеп була икәнен күҙаллай инем.

Һеҙҙең затығыҙҙа уҡымышлы, зыялы шәхестәр ҙә булғандыр, әҙәм балаларының күп сифаттары нәҫелдән бирелә бит.

- Атайым яғынан олатайым Сәйфулла Ғәбитов Маҡар ауылындағы май заводында мастер булып эшләгән, ауыл мөхите өсөн завод исемен йөрөткән предприятиела эшләү үҙе бер мәртәбә һаналғандыр ул саҡтарҙа. Әллә ни тиклем уҡыу әләкмәһә лә, грамоталы кеше була, уның ғәрәп графикалы яҙмалары ла бар ине. Сәйфулла олатайымдың 6 балаһы ла, һөнәри уҡыу йорттарын тамамлап, тормошта үҙ урындарын таба. Оло ҡыҙы Фәүзиә башланғыс кластарҙа уҡыта, икенсе улы Абдулла оҙаҡ йылдар дауамында Маҡар урта мәктәбенедә директор булып эшләй, уҡытыусыларҙың II Бөтөн Союз съезына делегат булып һайлана. Бына шул бабайыбыҙ, съезд делегаттары алдында ҡурайҙа уйнап, боронғо башҡорт көйҙәренең береһен йырлап та күрһәтә. Уның шундай баҙнатлы, ҡыйыу булыуының сәбәптәре лә билдәле: ни тиһәң дә, 17 йәшендә генә фронтҡа алынып, армия хеҙмәтендә 8 йыл йөрөп ҡайтҡан кеше була. Бабайым һөйләүенсә, тыуған яҡтарын, ғәзиз туғандарын һағынған саҡтарында ватыҡ самолет фюзеляжынан киҫеп алынған алюмин көпшәнән үҙе эшләп алған ҡурайында уйнап, һағышын баҫҡан.

Абдулла бабайым минең рухи остаздарымдың береһе булды. Ул үҙе тәүҙә Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтында белем алһа, һуңынан Ырымбур педагогия институтының тарих факультетын тамамлай. Мәктәптә тарих һәм йәмғиәтте өйрәнеү предметтарын уҡытты. Һәр бер дәрес политинформация менән башланып китә торғайны, "Правда" гәзитенән алынған мәғлүмәттәр хаҡында һөйләп, башҡаларға аңлатыуым хәтеремдә ҡалған. Икенсе бер уҡыусы "Комсомольская правда" гәзитенә байҡау эшләй. Бер яҡтан, беҙҙе гәзит уҡыуға ылыҡтырһалар, икенсе яҡтан, ошо рәүешле аҙмы-күпме сәйәси тәрбиә лә ғәмәлгә ашырылған. Шул уҡ "Йәмғиәтте өйрәнеү" дәрестәрендә үҙебеҙҙе лә ил һәм донъя кимәлендә барған хәлваҡиғаларҙа ҡатнашыусылар итеп тоя инек. Бабайым мине район кимәлендә уҙғарылған предмет олимпиадаларына йөрөттө, уларҙа ҡатнашыу беҙҙең өсөн фекерләү, камиллашыу мәктәбе булғандыр, тим.

Атайыма килгәндә, ул, олатайымдың иң кесе улы булып, 1939 йылда донъяға килгән. Уның ғүмере буйына ҡабатлап әйтеп йөрөгән бер һүҙе иҫемдә: "Эх, атайҙың ниндәй булғанын бик күргем килә ине". Мин үҙем дә атай ҡыҙымын, ул мине бик яратып үҫтерҙе, ҙур өмөттәр бағланы. "Ни эшләп малай булып тыуманың икән, иң ышаныслы кешем булыр инең", - тип әйтер ине. Атайым мине маҡсатлы тормош юлына баҫтырыусы булды, шуға күрә уға бик рәхмәтлемен. Ул колхозда ябай шофер булып эшләне, оҙайлы командировкаларҙа йөрөп, ҙур илебеҙҙе айҡап-байҡап сыҡҡан кеше. Матур итеп гармунда уйнаны, шиғырҙар яҙҙы. Тик уның йәшлеге һуғыштан һуңғы йылдарға тура килеп, юғары белемгә эйә булыу мөмкинлеге булмай. Шуға күрә үҙенең 4 балаһын уҡытыу, белемле кеше итеү өсөн барыһын да эшләне. Аллаһҡа шөкөр, дүртебеҙ ҙә юғары белем алып, зыялы шәхестәр рәтенә баҫтыҡ.

Һеҙ билдәле ғалимә, тел белгесе булараҡ, ғилми тикшеренеүҙәр алып бараһығыҙ, бер үк ваҡытта вуз уҡытыусыһы сифатында башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика өлкәләре өсөн кадрҙар әҙерләйһегеҙ. Эшегеҙҙең ғәмәли яғының мөһимлеген бер кем дә инҡар итмәй. Тел даирәһе бик киң, лингвистар ниндәйҙер бер айырым темалар буйынса тикшеренеүҙәр алып барып, бик күп ғилми мәҡәләләр, монографиялар баҫтырып сығара. Ә ябай кешеләр, ғәҙәттә, ғилми эштәр менән ҡыҙыҡһынмай, ғалимдар яҙғанды уҡып та бармай. Тел ғилеме "саф фән", ғалимдар өсөн генә кәрәкме, уның әһәмиәте нимәлә һуң?

- Тел теорияһы - лингвистика фәненең нигеҙе. Төрки телдәре һәм, ғөмүмән, донъя телдәре араһында башҡорт теле лә айырым бер урын биләй. Шуға күрә башҡорт тел ғилемен, төрки һәм бар донъя лингвистикаһы рәтенә индереп, айырым тел тәғлимәте итеп ҡарау фарыз. Башҡорт теле өлкәһендәге теоретик тикшеренеүҙәр, эҙләнеүҙәр уны фәнни яҡтан яҡтыртыу һәм нигеҙләү өсөн кәрәк. Әлбиттә, тел теорияһын ғалимдар яҙа, уны бар тәрәнлегендә шул уҡ лингвистар, тел белгестәре аңлай һәм ҡуллана. Әйтәйек, йыһан киңлектәрен өйрәнгән ғалимдарҙың космос тураһындағы теоретик тикшеренеүҙәре һәм һығымталары ни өсөн кәрәк тип, бер кем дә дәғүә белдермәй бит. Башҡорт теленең теорияһы, йәғни тәғлимәте, уның килеп сығышына һәм тарихи эволюцияһына асыҡлыҡ индерә, ә был туған телебеҙҙе фәнни яҡтан бар донъя кимәленә сығарыу мөмкинлеген бирә.

XXI быуаттағы башҡорт тел ғилеме, XIX - XX быуаттарҙа уҡ башланған тикшеренеүҙәрҙе яңы кимәлдә дауам иткән хәлдә лә, элеккеләренән күпкә айырылып тора. Ни өсөн? Тел йәмғиәттәге үҙгәрештәрҙе сағылдыра, уның менән бергә үҫешә, уны өйрәнеүсе лингвистика фәнендә шулай уҡ яңы алымдар ҡулланыла, яңы теоретик һығымталар эшләнә. Уларҙы филологик белеме юғары кимәлдә булмаған кешеләргә лә аңлатып була, ә был тикшеренеүсе ғалимдарҙың ошондай ихтыяжы булыуы менән бәйле. Шәхсән морфология, морфонология, морфемика буйынса белгесмен. Ябай уҡыусыларға, студенттарға, мәктәп һәм вуз уҡытыусыларына ошо өлкәләргә ҡараған тикшеренеү һөҙөмтәләрен еткереп була - быны өсөн махсус ҡулланмалар һәм дәреслектәр сығарырға тура килә. Әлбиттә, аңлайышлы булһын өсөн, ҡулланылған терминдарҙы, теоретик һығымталарҙы бер ни тиклем ябайлаштырыу, үҙгәртеберәк биреү фарыз. Әгәр шулай эшләмәйһең икән, ғилми тикшеренеүҙәреңдән артыҡ фәтеүә булмаясаҡ.

Был осраҡта тел уҡытыу методикаһы мәсьәләләренә иғтибарлы булыу кәрәктер. Ғилми сығанаҡтарға таянып, өйрәнелгән телдең үҙенсәлектәренә уҡыусылар иғтибарын йүнәлтә алыу йәһәтенән, үҙебеҙҙең башҡорт телен уҡытыуҙа ла оригиналь алымдар ҡулланып булалыр бит?

- Эйе, була, әлбиттә. Миҫал килтерәйем. Мин һеҙҙән "Башҡорт телендә нисә килеш бар?" тип һораһам, "алтау" тип яуап бирәсәкһегеҙ. Рус теле грамматикаһына яраҡлаштырып ҡабул ителгән, күнегелгән методика буйынса шулай. Студенттарыма ла һөйләйем: һеҙ үҙ уҡыусыларығыҙға ла ошо 6 килеш тураһында ғына аңлатма бирәһегеҙ икән, ошо 6 һаны уларҙың аңына һеңеп ҡаласаҡ. Шул уҡ ваҡытта ғалим-филолог Радик Зарипов башҡорт телендә 19 килеш формаһы булыуы хаҡында яҙа. Мин үҙем 19 уҡ тип иҫәпләмәһәм дә, 13 килеш формаһын ҡабул итәм. "Ә телебеҙҙә башҡа бер килештәр бармы икән?" тип һораһаң, улар ғәжәпкә ҡаласаҡ. Мәктәптә килештәрҙе өйрәнгәндә бына ошо хаҡта ла уҡыусыларға аңлайышлы ғына итеп әйтеп үтергә була. Ошондай миҫалдар килтерәһең икән, уҡыусыларҙа телгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уяна, уларҙың бер-икеһе булһа ла тәрәнерәк фекерләй башлай, уҡытыусыһына һорауҙар бирә.

XI быуаттың төрки телдәре белгесе, ошо өлкә буйынса энциклопедик мәғлүмәт эйәһе булған Мәхмүт Ҡашғари 20 төп төрки телдәре араһында башҡорт телен дә атап киткән, тимәк, телебеҙҙең бай тарихы бар. Шуға күрә тел уҡытыу өлкәһендәге тағы ла бер мәсьәләгә ҡағылышлы һорау: мәктәп программаларына ярашлы, уҡыусыларҙы телебеҙҙең килеп сығышы, тарихы менән таныштырыу ҡаралмаған, ә был мөһим проблема түгелме ни?

- Эйе, быныһы дөрөҫ. Әммә мәктәп уҡытыусыһы, теге йәки был тема менән бәйләп, артыҡ төпкә төшмәйенсә, тел тарихына ҡағылышлы моменттарҙы ла аңлатып китә ала. Был осраҡта тел уҡытыусыһының үҙенең мәғлүмәтле булыуы мөһим. Ә беҙҙең факультетта студенттар тел тарихын мотлаҡ өйрәнә, был предметты яҡшы әҙерлекле белгестәр уҡыта. Беҙҙең факультетты тамамлап, мәктәп системаһында эшләп йөрөгән уҡытыусыларыбыҙ тел тарихы буйынса белемдәрен ҡуллана ала икән, быны хупларға ғына ҡала. Әммә был осраҡта мәктәптә генә, уҡыусылар, уҡытыусыларыбыҙ ғына түгел, ғалимдарыбыҙҙың да телебеҙҙең боронғолоғона тейешле баһа биреп еткермәүе хаҡында әйтеп үтеү кәрәк. Ә ошондай боронғолоҡ билдәләре телебеҙҙә ярылып ята бит - быны күреү, белеү һәм баһалай алыу бик мөһим. Шул уҡ Ҡашғари тураһында уҡыусыларға аҙ ғына булһа ла мәғлүмәт бир - был уларҙың зиһененә уйылып ҡаласаҡ, ҡыҙыҡһыныу уятасаҡ.

Билдәле булыуынса, ошо ғалим төрки халыҡтары йәшәгән ерҙәргә сәйәхәт иткән, уларҙың тел айырымлыҡтарын өйрәнгән. Баш-

✓ ***Башҡорт әҙәби теле, дәүләт теле һәм туған тел булараҡ, ике төрлө була алмай. Факультетыбыҙҙа төньяҡ-көнбайыш райондарҙа тыуып үҫкән студенттар ҙа уҡый, һәм улар саф башҡорт әҙәби телендә бик таҙа һөйләшә.***

ҡорт теле хаҡында мәғлүмәтле булғас, уның башҡорттар менән осрашҡан булыуын фаразларға ҡала. Бында беҙҙең өсөн бына нимә бик мөһим: 1000 йыл әүәлерәк уҡ башҡорт теле айырым бер тел булып танылған. Ошо мәғлүмәтте тарихҡа индереп, теркәп ҡалдырған өсөн генә лә беҙ Мәхмүт Ҡашғариға рәхмәтле булырға тейешбеҙ. Һеҙ бер матур идея бирҙегеҙ әле: башҡорт теле буйынса олимпиадалар уҙғарғанда ниндәй боронғо тел белгесенең башҡорт телен 20 төп төрки телдәре иҫәбенә индереүе хаҡында. Шундуҡ яуабын таба алмаһалар ҙа, аҙаҡтан уйланасаҡтар, белешмә эҙләйәсәктәр. Башҡорт теленең фонетикаһына, фонологияһына бәйле темаларҙы өйрәнгәндә телебеҙҙәге тамаҡ һәм тел-теш ярҙамында хасил булған өндәрҙең боронғолоғона, башҡа бер телдәрҙә һаҡланмауына уҡыусыларҙың бер сиктәре һәм ҡалыптары бар. Ҡасандыр уның теоретик нигеҙҙәре билдәләнгән, заманында фундаменталь ғилми тикшеренеүҙәр уҙғарылып, тейешле һығымталар эшләнгән икән, уны ҡайтанан ҡарау кәрәкме һуң? Әлбиттә, ваҡыты-ваҡыты менән тел теорияһын тәнҡит күҙлегенән ҡарап сығыу хилафлыҡ түгелдер, әммә беҙҙең корифейҙарыбыҙ Николай Дмитриев һәм Жәлил Кейекбаевтың башҡорт теле һәм төрки телдәре буйынса яҙған ғилми хеҙмәттәрен фән кандидаты йә иһә докторы исемдәренә дәғүә иткән диссертацияларҙа тикшереү мораль яҡтан дөрөҫ булмаҫ ине, тип уйлайым. Ә хәҙерге осорҙа башҡорт теле буйынса алып барылған ғилми тикшеренеүҙәрҙең темалары, бәлки, тарыраҡ булып күренәлер, шулай ҙа бына нимәгә иғтибар итергә кәрәк: фонология йә иһә морфемика өлкәләрендә ниндәйҙер бер яңылыҡ табыу мөмкин дә түгелдер, әммә тел лексикаһы, тер***ғалим булараҡ, шул уҡ төньяҡ-көнбайыш башҡорттары диалектында өҫтәмә ҡулланмалар ғына сығарып булыр ине, тигән фекерҙәмен. Унан һуң, дәүләтебеҙҙең Мәғариф тураһындағы ҡануниәте һәр бер предмет буйынса бер генә, берҙәм дәреслек булыуын талап итә. Башҡорт әҙәби теле, дәүләт теле һәм туған тел булараҡ, ике төрлө була алмай. Факультетыбыҙҙа төньяҡ-көнбайыш райондарҙа тыуып үҫкән студенттар ҙа уҡый, һәм улар саф башҡорт әҙәби телендә бик таҙа һөйләшә лә, уҡый-яҙа ла белә.***

Республикабыҙ мәктәптәрендә башҡорт теле байтаҡ йылдар буйына дәүләт теле булараҡ та уҡытыла. Әммә был мәсьәлә буйынса ла хәл ителеп бөтөлмәгән проблемалар бар, атап әйткәндә, шул уҡ уҡытыу концепцияһы, дәреслектәр буйынса ла.

...сыларымды ҡыҙыҡһындыра, әүрәтә алһам, уңыш ҡаҙанасаҡмын. Айыуҙы бейергә өйрәткән кеүек булды инде. Дәрт-дарман, көслө эмоциялар булһа, хатта йырлап, бейеп тороп башҡорт теленә башҡа милләт балаларын да өйрәтеп булыуына үҙ тәжрибәмдә инандым. Эш башлаған йылымда уҡ "Йыл уҡытыусыһы" конкурсында ҡатнашып, лауреат та булдым.

Башҡорт теле орфографияһына ҡағылышлы проблемалар булыуы хаҡында әйтеп үтмәйенсә булмай. Мәрхүм ғалимыбыҙ Рәшит Закир улы Шәкүров та башҡорт теленең орфография ҡағиҙәләрен ҡайтанан ҡарау зарурлығы менән килешкәйне.

- Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының башҡарма комитетында ла ошо хаҡта һөйләшеү булды. Орфография өлкәһенә ҡараған һорауҙар күп йыйылып киткән, уларҙы ваҡытында хәл итеү фарыз. БР Хөкү...

...ынса абруйлы белгестәр, журналистар, көнсығыш телдәре буйынса тәржемәселәр һәм башҡа һөнәр эйәләре булыуы ғәжәп түгел. Бында хатта атҡаҙанған һәм халыҡ артистары ла уҡып сыҡҡан! Факультетта барлығы 10 тел уҡытыла. Тәржемәселәр әҙерләүгә лә иғтибар артты: башҡортсанан рус теленә һәм руссанан башҡортсаға, башҡорт теленән тура инглиз теленә һәм киреһенсә, рус теленән инглиз теленә һәм инглизсәнән руссаға тәржемә итергә өйрәтәбеҙ. Унан башҡа факультетта көнсығыш телдәренән төрөк, ҡытай, япон, фарсы, ғәрәп һәм корея телдәре уҡытыла. Студенттар ошо 6 телдең өсөһөн үҙҙәре һайлап өйрәнә, башҡалары менән ҡыҙыҡһынған хәлдә түләүле курстарға йөрөй ала.

Башҡортостандың киң матбуғат саралары өсөн милли кадрҙар әҙерләүҙә проблемалар ҙа юҡ түгелдер?

ҠӘҘЕРЕН ҺАҠЛАУСЫ...

МӨҒӘЛЛИМӘ ЛӘ УЛ

иғтибарын йүнәлтергә кәрәк. Боронғо кешеләрҙең телдәрендә иң элгәре һуҙынҡы өндәрҙең өҫтөнлөк итеп, торабара уларға төрлө тартынҡы өндәр ҡушылыуы һөҙөмтәһендә тәү һүҙҙәрҙең хасил булыуы механизмын балаларға аңлатып була. Дәрестәрҙә ябай ғына миҫалдар нигеҙендә морфемика - һүҙ яһалышы хаҡында әңгәмә ҡороп була: мәҫәлән, һуҡмаҡ, туҡмаҡ, суҡмар, ҡоймаҡ һ.б. һүҙҙәрҙең нисек яһалыуын уҡыусылар үҙҙәре лә тиҙ төшөнә башлай.

Уҡытыусыларыбыҙ һәр бер дәрескә, ниндәй генә тема ҡаралмаһын, тел менән бәйле ҡыҙыҡлы элементтар индерә ала икән, ул уҡыусыларға ыңғай йоғонто яһай. Бына элегерәк ғалимыбыҙ Р.Ф. Ишберҙиндың "Ҡыҙыҡлы грамматика" тигән китабы популяр булды, бына ошондай әсбаптарҙы, яңынан баҫып сығарып булһа ла, ҡулланыу фарыз.

Тел ғилеме өлкәһенә ҡайтһаҡ, беҙ яңынан-яңы фән кандидаты һәм докторы исеменә дәғүә иткән ғилми диссертацияларҙың, айырым хеҙмәттәрҙең, монографияларҙың күбәйә барыуына шаһитбыҙ. Был, әлбиттә, башҡорт тел ғилеме өсөн ҡыуаныслы күренеш. Шул уҡ ваҡытта телебеҙҙең фундаменталь проблемаларына иғтибар аҙайғандай тойола. Башҡорт телен донъя лингвистикаһы кимәленә күтәргән Николай Дмитриев, Жәлил Кейекбаев кеүек ғалимдар башлаған фундаменталь тикшеренеүҙәрҙең дауамы булырмы икән?

- Минең шәхси фекерем ошондай. Телдең, ул даими үҫеш кисергән хәлдә лә, билдәле

минология буйынса ғилми тикшеренеүҙәр әле лә бик актуаль, һәм тап шул проблемаларға арналған ғилми хеҙмәттәргә ерлек бар. Уйлауымса, шул уҡ Мәхмүт Ҡашғариҙың XI быуатта яҙылған "Диван лөғәт ат-Төрк" энциклопедик һүҙлеге буйынса ниндәйҙер яңы ғилми тикшеренеүҙәр уҙғарыуҙың, диссертациялар яҙыуҙың кәрәге юҡтыр.

Башҡорт әҙәби теле уҙған быуаттың 20-се йылдарында уҡ формалаша башланы, уның өс диалекты ентекләп өйрәнелгән. Һуңғы йылдарҙа төньяҡ-көнбайыш диалектына ярашлы яҙма тел булдырыу, дәреслектәр баҫыу хаҡында һүҙ ҡуйыртыла. Ошо хаҡта үҙ фекерегеҙҙе әйтеп китһәгеҙ ине.

- 2020 йылда беҙ БР Башлығы грантын отҡайныҡ, шуға ярашлы төньяҡ-көнбайыш райондарҙа ҙур экспедиция ойошторҙоҡ. Экспедиция ағзалары барлығы 418 ауылда булып, урындағы халыҡ менән аралашып ҡайтты. "Уҙған быуаттың 70-се йылдарынан бирле ғалимдарҙың беҙгә килеп, беҙҙең һөйләште өйрәнеп йөрөгәне булманы. Бына һеҙ ҡалай башҡортса таҙа, матур итеп һөйләшәһегеҙ", - тип тә әйтеүселәр булды. Мин уларға яуаплайым: "Һеҙ ҙә башҡортса һөйләшәһегеҙ бит, тик үҙегеҙҙең һөйләшегеҙҙә", - тим. Шунан үҙ яғымдың диалектына күсеп, "Анта, мынта, йөрөп ята шунта", - тип көлдөрөп тә алам. ***Башҡорттар, ниндәй генә диалектта һөйләшһәләр ҙә, берберенен аңлай бит инде. Башҡорт әҙәби теле шулай уҡ барыһы өсөн дә аңлайышлы. Тик бер ҡайҙа ла: "Ни эшләп беҙҙең һөйләштә дәреслек сығарылмай ул?" - тип һораған бер генә кеше лә булманы. Мин, телсе***

- Эйе, был өлкәлә проблемалар булыуын инҡар итеп булмай. Әммә хәҙер Мәғариф министрлығы ошо предмет буйынса дәреслектәр әҙерләүгә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу тәжрибәһе ҙур булған, барса етешһеҙлектәрҙе күрә белгән уҡытыусыларҙы, теоретик белемле ғалимдарҙы һәм методистарҙы йәлеп итә. Башҡорт теле буйынса методистарыбыҙҙың роле ҙур бында - улар барса ижади эшмәкәрлеген тап ошо өлкәлә һынаған, танылыу тапҡан шәхестәр. Улар - БР-ҙың Мәғарифты үҫтереү институтында, университеттарыбыҙҙа эшләгән абруйлы ғалим-методистар. Дәреслек Мәғариф министерлығында махсус булдырылған Уҡытыу-методик советында тикшерелеп хупланғас ҡына баҫыуға тәҡдим ителә. Беҙҙә әҙерләнгән дәреслектәр Рәсәйҙең берҙәм федераль реестрына индерелде, мәктәптәрҙә рәсми рәүештә раҫланмаған дәреслектәрҙе ҡулланып булмай. Дәғүәләр бар икән, атаәсәләрҙән, уҡытыусыларҙан, уларҙы бик ентекле рәүештә нигеҙләп, дәреслек авторҙарына еткерә алыу кәрәк.

Башҡорт дәүләт теле аҙнаһына бер сәғәт кенә уҡытылғас, уны предмет булараҡ уҡытыу концепцияһын төптән үҙгәртеү кәрәктер бит?

- Эш бер концепцияла ғына түгел. Барыһы ла уҡытыусының шәхесенән тора, бер сәғәт эсендә лә ул уҡыусыларын күп нәмәгә өйрәтә ала. Әлегә башҡа бер мөмкинлек юҡ. Әле хәтеремә төшә, нисек итеп Стәрлетамаҡ мәктәптәренең береһендә уҡыта башлаған осором. Дипломым буйынса башланғыс кластар уҡытыусыһымын. 1995 йыл. Башҡорт телен барса мәктәптәрҙә уҡыта башлаған мәл. Бер ниндәй ҙә әҙер программалар, дәреслектәр, ҡулланмалар юҡ. Мин шуны аңлай инем: уҡыу...

мәте ҡарамағындағы Терминология комиссияһының яңы составы ошондай мәсьәләләрҙе ҡараясаҡ. Орфография ҡағиҙәләре тел ҡанунына торошло, һәм уларҙың мотлаҡ үтәлеүенә өлгәшеү кәрәк. Уҙған йылдың декабрендә 70 муниципалитет сәркәтиптәрен йыйып, кәңәшмә уҙғарылды. Төп бурыс - алтаҡталарҙың, урам исемдәренең, төрлө күрһәткестәрҙе эш режимының һ.б. башҡорт телендә дөрөҫ яҙылыуын тәьмин итеү. Кем нисек теләй, шулай яҙыуға сик ҡуйылырға тейеш.

Быйыл башҡорт теле факультеты ойоштороලоуға - 95 йыл, яңыртылған башҡорт теле, шәрҡиәт һәм журналистика факультетына 35 йыл тулды. Әйтергә кәрәк, башҡорт телен фән булараҡ өйрәнеү, башҡорт теле уҡытыусыларын әҙерләү йәһәтенән ошо факультет өлгәшкән ҡаҙаныштарҙы һанап бөтөп тә булмаҫ ине. Йөҙәрләгән башҡорт шағирҙары, яҙыусылары, журналистары, фән кандидаттары һәм докторҙары Башҡортостаныбыҙҙың төп университетының ошо факультетын тамамлаған. Был изге эстафетаны факультеттың хәҙерге быуын уҡытыусылары дауам итә.

- Беҙҙең факультет университеттың ябай ғына бер өлөшө түгел, ул белем биреү, фәнде үҫтереүгә генә иғтибар йүнәлтмәйенсә, шәхестәр тәрбиәләүсе, хатта ниндәйҙер кимәлдә сәйәси анды ла формалаштырыусы бер мәмек, сөнки тап ошонда республикабыҙ өсөн байтаҡ ҡына милли кадрҙар әҙерләнә. Элекке Башҡорт дәүләт университетының (хәҙерге Өфө фән һәм технологиялар университетының) башҡорт бүлеген тамамлағандар араһында бихисап дәүләт эшмәкәрҙәре, фән әһелдәре, мәғариф алдынғылары, әҙәбиәт һәм тел ғилеме, фольклор буй...

- Журналист һөнәрен һайларға теләгән абитуриенттарға ҡытлыҡ юҡ. Әммә ошо бүлектә уҡыу түләүле, был үҙе үк башҡорт мәктәптәрен тамамлаусылар өсөн ҙур кәртәгә тиң. Улар журналистика бүлегендә түләүле нигеҙҙә уҡырға теләк белдермәй. Журналистар форумында башҡорт журналистарын әҙерләүгә бюджет урындары бүлеү хаҡында һорау күтәрелгәйне, шул саҡта республика Башлығы Радий Фәрит улы Хәбировтың күрһәтмәһе менән 10 урын булдырылғайны. Беҙҙең факультетта башҡорт журналистикаһы бүлегендә әлеге мәлдә ни бары 10 студент уҡый. Әммә 2022 йылдан һуң ошо маҡсатта бюджет урындары бүленмәне. Ошо 10 студенттың барыһы ла тиерлек йә телевидениела, йә радиола эшләп йөрөй. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ваҡытлы матбуғат сараларында эшләргә атлығып тороусылар юҡ, уларҙың береһе лә гәзит, журнал редакцияларын һайламаны. Бында эш хаҡтарының бик түбән булыуы ла бәкәлгә һуға. Шулай ҙа башҡорт телендә сыҡҡан матбуғат сараларының киләсәге булыр, улар өсөн милли кадрҙар әҙерләүгә лә дәүләт иғтибары артыр тиергә ерлек булһын.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Халҡыбыҙҙың күп быуатлы боронғо тарихы бар, боронғолоҡ аңҡып торған гүзәл теле бар. Ер йөҙөндә халҡыбыҙ йәшәй икән, уның милли асылына тиң теле лә йәшәр. Был ата-әсәләребеҙҙең, уҡытыусыларыбыҙҙың туған телебеҙҙең халҡыбыҙ яҙмышы өсөн ни тиклем мөһим икәнлеген аңлауынан да тора. Башҡорт балалары бөйөк шағирыбыҙ Рәми Ғариповтың гимнға торорлоҡ "Туған тел" шиғырын киләсәк быуаттарҙа ла ғорурланып яттан һөйләр, тигән ышаныстан яҙмайыҡ.

Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ
әңгәмә ҡорҙо.

✓ Үҙ ғүмерендә әүлиә заттарҙы күп күрҙе Буранбай. Әммә тәү ҡарамаҡҡа иҫәүәнерәк, һиңмайыраҡ булып тойолған әҙәмдең бер-ике һүҙ менән үҙен "кәкере ҡайын" тип атауын тик бер төрлө генә атай ала ул: уның алдында әүлиәнең үҙе.

БУРАНБАЙ

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ

(Тарихи-фәлсәфәүи романдан өҙөк)

Күҙ күреме арауығындағы хозурлыҡҡа һоҡланып, һәр ҡаяның, таштың, йылғаның атамаһын һорашып ултыра бирҙеләр хикмәтле ҡарт менән Буранбай. Береһе һабаҡ алған мөғәллим кеүек һорауын биреп тә өлгөрмәй, икенсеһе өлгөр шәкерт кеүек яуабын теҙә барҙы. Уларҙы ситтән күҙәтеп торған кеше булһа, моғайын да, асыҡ һауалағы һабаҡ тип тә нарыҡлар, тик был икәүҙең сабыйҙарса йылмайыуҙарын ғына аңлай алмаҫ ине.

Буранбай юрый һүҙ уйнатҡандай, шаяртҡандай тойолһа ла, ысынында ҡарттың иғтибарын Юлбарыҫ Бикбулатов уны көтөп ултырған Ташъяр мәмерйәһенән ситләштереү, шиктәрен юйыу ине. Тик хикмәтле ҡарт ундайға оҡшамаған, Буранбайҙың уйын да белеп ултырғандай. Шуға күрә ҡаҫҡын, башҡа бирерлек һорауы ҡалмағас, ағастарға төбәлеп, тағы ла күҙҙәрен алмаш-тилмәш ҡыҫып һорай ҡуйҙы.

- Ағай, ә ниңә һеҙҙең ауыл янындағы ҡайындар барыһы ла кәкере ул? Күпме ултырам, бер генә төҙө лә күҙемә салынманы. Береһенән береһе кәгеҙ-бөгөҙөрәк. Был тирәлә, ҡайындарҙан тыш уҫаҡ ағастары ла, хатта ҡарағайҙар ҙа төҙ түгел. Берәй урман һалыуы-фәләне юҡтыр ҙа ул?

Яңы ғына Буранбайҙың биргән һорауҙарына еңел генә яуаплап, осоп-ҡунып ултырған отҡор ҡартты ҡапыл алмаштырып ҡуйҙылармы ни. Күҙ менән ҡаш араһында башҡаға әүерелгән әңгәмәләшен хатта танымады ла Буранбай. Бығаса гел көләп йөрөүҙән йөҙө шыма күренгән ҡарттың сырайында ҡапылғарай һырҙар пәйҙә булды. Гел көләп-йылмайып ултырып ҡаҫҡын хикмәтле ҡарттың йөҙөндәге ошо билдәләргә иғтибар ҙа итеп еткермәгән. Уйсанлыҡ кешене һырлы итәлер, иртә ҡартайталыр, күрәһең. Ниңә шундай уңайһыҙ һорауҙы биреүенә үкенә лә башланы Буранбай. Ҡарттың яуабы оҙаҡ көттөрмәне:

- Әгәр ҙә әҙәм балаһы ошо донъяла ҡылған ғәмәлдәренең һауабын да фанилыҡта алһа, пәйғәмбәрҙәр ғазап кисермәҫ ине. Ә бит фанилыҡ аҙаптарының иң ауырын татыйҙар улар. Беҙ ғүмер тип атағаныбыҙ ней бары һынау, һабаҡ ҡына. Урман - ул беҙ йәшәгән фани донъя, ағастар - кешеләр...

Ҡарт һөйләүенән туҡтаны. Ҡапыл башын тубалдай иткән һорауҙан шаңҡып ҡалғайны ул. Кәрәкле һүҙҙәрен кәрәкле урынға ҡуя алмай аҙапланғанын да, фекерҙәре буталып бөткәнен дә аңлап өлгөрҙө Буранбай. Ҡарт аяғына баҫып кәкере ҡайынға ҡулын ҡуйып, олонона ҡарап тора башланы. Әкрен генә һүҙен дауам итте:

- Кәкере ағастар бураға ла, таҡта ярыуға ла, бағанаға ла яраҡһыҙ, хатта утынға ла ҡырҡа һалып бармайҙар, үҙең беләһең, ярыуы ауыр уларҙы. Һинең һорауыңа ла яуабым шул, кем, Исмәғил - ағастарҙың төҙҙәрен генә ҡырҡалар. Әҙәмдәрҙең дә башҡаларға ышыҡ, терәк, таяу, ҡалҡан була алырлыҡ ныҡлыларын, ғорурҙарын, мәғрурҙарын, ҡорос ихтыярлыларын һындырырға тырышалар. Ҡатилдарға ярамһаҡланып баш эйеүселәр, гел эйелеп йөрөй торғас, бөкөрәгә әйләнәләр. Төҙ ағастар тапҡың килһә, ауылдарҙан ситкәрәк, урман төпкөләнә барып ҡырҡаһың инде...

Ҡарттан бындайын яуапты көтмәгәйне Буранбай. Һеңгеҙәттә хикмәтле ҡарт. Терәләй һүҙҙә, тиҙәр бындай осраҡта Һаҡмар буйында. Шаярып ҡына башлаған әңгәмәләре ана ҡайҙарға барып ялғанды. Ҡарт уйламағанда-көтмәгәндә Буранбайҙың ошо хәләтен асты ла һалды. Әүлиә зат. Үҙен Исмәғилмен, үҫәргәндәрҙән, тип танытҡан ҡаҫҡынды үтәнән-үтә күрҙе Шығай ҡарты. Үҙ ғүмерендә әүлиә заттарҙы күп күрҙе Буранбай. Әммә тәү ҡарамаҡҡа иҫәүәнерәк, һиңмайыраҡ булып тойолған әҙәмдең бер-ике һүҙ менән үҙен "кәкере ҡайын" тип атауын тик бер төрлө генә атай ала ул: уның алдында әүлиәнең үҙе.

* * *

Юлбарыҫ Буранбайҙы Ташъярҙа ут йотоп ҡаршыланы. Йөҙө һурығып, һаҡалы етеп киткән. Элекке ер һелкетеп атлап йөрөгән ир-уҙаманды ҡапылғарай танырлыҡ та түгел. Мөҙәрәгән. Юлбарыҫтың кәйефе барыһын да емерҙе. Шуғамылыр, осрашыу шатлығы ла оҙаҡҡа һуҙылманы. Бер урында тик тора алмай, бер туктауһыҙ тегеләй-былай йөрөй ҡорҙашы. Йәшеренеп ултырған мәмерйә эсе лә тап-таҡырға әйләнгән. Борсолоуы йөҙөнә сыҡҡан, үҙе мәмерйә эсендә һымаҡ та түгел, уйҙары, булмышы менән әллә ҡайҙарҙа йөрөгән кеүек. Уны бындай хәлдә күргәне булмаған Буранбай ҡорҙашының ғаилә хәлдәрен белергә теләп һорай ҡуйҙы:

- Юлбарыҫ, ҡорҙашым, яҙмышыбыҙҙы Хоҙайға тапшырайыҡ. Хаҡ Тәғәлә ҡушҡанды үтмәй, юлына осраҡлы ғына килеп сыҡҡан ҡарттың хатта исемен дә һорашып өлгөрмәне. Хикмәтле ҡарт шул тороуынан ауылы яғына китә лә башланы. Күҙ асып-йомған арала ер аяғы, ер башы ара ла үтеп өлгөргән. Әллә уны шаңҡытып, иҫәңгерәп ҡалыуын файҙаланып алыҫлашып өлгөрҙөмө? Әммә үҙен алда тағы ла бер тетрәнеү көткән икән. Буранбайҙың Рәз йылғаһы үренә табан ҡуҙғалыуын күргән Шығай уҙаманы уны тиҙ арала ҡыуып та етте.

- Туҡта, мин алташланып әйтергә онотоп торам, Буранбай ҡустым. Һине Юлбарыҫ Ташъяр мәмерйәһендә көтә...

Ҡарт шул арала тағы ла хикмәтләргә әүерелеп, үҙенә генә хас кинәйә менән йылмайып ҡуйҙы. Эх, йылмайыуҙары, ташты иретерлек, үлгән кешене торғоҙоп ултыртырлыҡ...

- Юлбарыҫ тиһеңме? - Буранбай артабан ни тиергә лә белмәне, шуға ла аңламағанға һалышты. - Юлбарыҫ аталғаны кем була һуң?

- Эйе, Юлбарыҫ, Бикбулат улы, - ҡарт ауылы яғына китә башланы ла, тағы боролоп. - Юлбарыҫҡа әйтерһең, Буранбай туғаным, уландары Ҡужәхмәт менән Баймөхәмәт һеҙҙән янға төшкә килер...

- Ағай, ағай, һин үҙең кем булаһың?

Был ваҡытта хикмәтле ҡарт унан күпкә алыҫлашып өлгөргәйне. Әллә ишетмәне, әллә ишетмәмешкә һалышты. Күрәһеләре, ишетәһеләре бар икән Буранбайҙың Рәз буйында...

башҡаса әмәлебеҙ юҡ. Зарураттан ҡаҫҡынбыҙ. Йәнеңә ут ҡапҡан бит, ниңә төһөң ҡасҡан?

Юлбарыҫ унан тик шул һорауҙы ғына көткән тиерһең. Хәл-әхүәлән бер тынала әйтеп һалды:

- Йәрмөхәмәт улымды теге саҡ йән башынан 500 яугирҙән торған алайҙы йәштәр өсөн тип халыҡтан йыйған 16-шар һум аҡсаны тоттороп Ырымбурға апарып тапшырырға тип ебәргәйнем. Һыуға батҡандай юҡ булды, - Юлбарыҫ һаман да мәмерйә эсен тапауын белде. - Шуға хәбәр көтөп ултырам. Сибайға ла тап шул арҡала бара алманым...

- Беҙ һине ат башыңды күптән ҡаҙаҡ далаһына борғанһыңдыр тип өмөтләнгәйнек. Артынса Ибраһим менән үҙебеҙ ҙә ынтылырбыҙ тип мантышҡайныҡ...

- Илеңдән ҡасып ҡайҙа бармаҡсы булаһың, Буранбай? -Бер аҙ уйланып торғас, өҫтәп тә ҡуйҙы. - Үҙең ҡасып китһәң дә, ҡатындарыңды, балдарыңды тыныслыҡта ҡалдырмаясаҡтар, белгең килһә...

- Аҡсаны Ырымбурға апарып, шуның менән уларҙың ауыҙын тығырмын тигәйнеңме? - Буранбайға ла ҡорҙашының ярһыулығы күсте. - Үҙең беләһең, ҡорҙаш, Ибраһим менән минән дә аҡсаны кире ҡайтарып биреүҙе талап иттеләр. Соколов менән Аҡҡолдоң ҡулындағы аҡсаларҙы беҙ нисек итеп ҡайтарып бирергә тейеш булғанбыҙҙыр, этем генә белһен инде...

- Соколов дөмөгөп еңел ҡотолдо, бәлки ярҙам да иткәндәрҙер... - Бер нисә тәүлек йоҡо күрмәгән Юлбарыҫтың уйҙары буталды, һүҙҙе ҡапыл икенсегә бороуы ла шунан. - Ибраһим ҡайҙа булды һуң, ҡорҙашым?

- Ишмөхәмәт сәсән ауылынан Ибраһим Сибай тарафына йөҙ борҙо, мин һинең яҡҡа ығыштым. Шығай яғында хикмәтле ҡартҡа тап булдым, - Буранбай уны иҫләгәндә йылмаймайса булдыра алманы. -Миңә оҡшаны ул. Шаян да, етди лә. Беҙҙең Ташъярҙа осрашырҙы белә булып сыҡты...

- Ҡоттобай ҡарт ул, минең кеше. Ышаныслы. Уға таянырға була. Мин уны һин, ҡорҙашым, Иҙел яғына яңылыш үтеп китмәһен өсөн һаҡҡа ҡуйғайным...

- Урман хужаһы Һарылар араһынан әүлиә зат Ҡоттобай ҡарт шул үҙе икән дә...

- Һин у тиклемен ҡайҙан беләһең?

- Үҙе әйтте, ул тағы ла төшкә Рысыҡайҙан уландарың килеп етере хаҡында хәбәр тиште...

- Әүлиәлеге раҫ... -Юлбарыҫ әйтергәме-юҡмы тигәндәй туҡталып торҙо ла, баҙнаты етте. - Атайлыҡ бурысын үтәмәккә ғүмереңдең ҙур өлөшөн сит яҡта үткәрергә тура киләсәк һиңә, тип әйткәйне ул миңә бынан бер нисә йыл элек...

- Мине лә үтәнән-үтә күрҙе. Йә, ярар, Ҡоттобай ҡарт кеүек заттарыбыҙ бар ҙа, ҡоламабыҙ, Юлбарыҫ ҡорҙашым. Ниндәй уй-ниәттәрең бар, иртәгәгә?

- Уландарым килеп еткәс әйтерем, улар ниндәй хәбәр менән киләр. Бәлки Йәрмөхәмәт тә ҡайтҡандыр...

Икеһе лә тынып ҡалдылар. Һөйләшергә һүҙ булмағандан түгел, алдарындағы билдәһеҙлек уларҙы күберәк уйланырға мәжбүр итә шул. Бөрйән ырыуы башҡорто менән ҡатай аҫабаһы элегерәк осрашҡан сағында һәр төбәктең үҙенә хас һыҙаты, үҙенсәлеге хаҡында хәбәр һаталар, ваҡыт ҡыҫҡарталар ине. Ул саҡта күберәк хәрби тормош ваҡиғалары өҫтөнлөк итте. Яҙмыш уларҙы ошолай итеп төпһән төбөндәге мәмерйәгә индереп йәшерҙе. Мәмерйә ауыҙына терәлеп тиерлек гөрләгән Рәздең тауышын тыңлап ултырыу ҡаҫҡындарҙың күңеленә тыныслыҡ, һәүетемсә тормош рәхәтләнгән дә тойҙорта һымаҡ. Ваҡытлыса ғына булһа ла. Әммә йылға тауышына иғтибар итмәйсә, диҡҡәттәрен башҡа нәмәгә күсереүҙәре була, ысынбарлыҡ ҡотһоҙлоғо муйындарына арҡан булып уралғандай. Уралып ҡына ҡалмай, быуа ла башлай. Сөнки улар, үҙҙәрен эҙәрлекләүселәрҙән эҙ яҙлыҡтырған хәлдә лә, тәҡдирҙәренән ҡаса алмайҙыр.

Юлбарыҫ етеҙ хәрәкәтләнеп тиҙ генә шөңкәйтмә ҡағып, баҡырсала сәй ҡайнатып ҡорҙашына тыуған яғы үләндәренән сәй ҡайнатып эсереп алды. Сәй янына теш араһына ҡыҫтырыр, әүҡәтләнер ризығы ла мул ғына ине ҡатай аҫабаһының. Иҫке ауыҙға яңы аш тигәндәй, Буранбайға бигерәк тә Юлбарыҫ тырыз тултырып йыйған көртмәле таңһыҡ ине. Ирәндектә үҫмәй ул емеш. Көртмәләнең дә ҡараһы ла, ҡыҙылы ла тигәндәй. Үпкәләре йөҙгәнсе эселгән сәй йөрәктәрендә ауыр йөк булып ятҡан таштарын эреткәндәй тойолдо. Теремекләнеп киттеләр.

Тәһәрәтләнеп намаҙ уҡып алыуҙарына Юлбарыҫтың Ҡужахмәт, Баймөхәмәт уландары мәмерйәгә аяҡ баҫты. Буранбай уларҙы Илек нығытмаһында хеҙмәттә күргәне бар. Ғәйрәтле икәндәрен дә белә урман айыуҙарының. Аталарына оҡшап баһадир кәүҙәле, йәштәренә ҡарағанда олораҡ та һыпатлы ине улар.

Егеттәр ауылдан туғандары Йәрмөхәмәт хаҡында бигүк күңелле булмаған хәбәр алып килгәйне. Бер-береһен бүлеп, ярышып тиерлек хәбәр аткарып, улар шуны бәйән иттеләр. Муса Солтанморатов атлы Рысыҡай ауылы казағы Ырымбур яғынан юл йөрөп ҡайтҡан. Йомош менән губерна кәнсәһенә ингән һәм һаҡсылар уратыуында коридорҙа йөрөгән Йәрмөхәмәтте күреп хәлен белешкән. Ырымбурға аҡса алып китеп барыусы Йәрмөхәмәтте Стәрлетамаҡта һалдаттар ҡулға алған. Ул ниндәй йомош менән Ырымбурға китеп барыуын әйткәс, уны һаҡ аҫтында Ырымбурға алып килгәндәр. Йәрмөхәмәттең атаһы Юлбарыҫ Верхнеуралға өйәҙ судына барып башын һалмайынса, улы Ырымбур төрмәһендә аманатта ултырасаҡ икән.

- Инәһеҙҙәр! - Улының ниндәй хәлгә тарыуы хаҡында ишеткән Юлбарыҫ ҡоро дары кеүек гөлтләп тоҡанды, һикереп аяғына баҫты. - Күрһәтермен мин уларға аманатты...

- Атай, атай, ярһыма... - Оло улы Ҡужәхмәт һис нәмәгә ҡарамай мәмерйәнән сығырға ынтылған атаһын көскә туҡтатты. - Атай, беҙ бында килгәндә бер нисә урында боҫҡоларҙы шәйләнек. Улар беҙҙе күрмәне. Верхнеуралға беҙ ҙә һинең менән барабыҙ, йәшерен юлдан үҙебеҙ оҙатабыҙ...

- Ҡужәхмәт улың хаҡлы, Юлбарыҫ, беҙ ике көн элек ҡасып киткән Верхнеуралға баш һалырға барыуыңды ла хупламайым. - Буранбай Юлбарыҫтың ҡаршыһына уҡ барып баҫты. - Шуны аңла, властарға аҡса түгел, беҙҙең баштар кәрәк...

- Ә Йәрмөхәмәт? Уның бында ни гәйебе?

- Улың ир еткән, бирешмәҫ. Бер аҙ тотҡас, ебәрерҙәр. Һине ҡулға алыр өсөн уны ебәрмәй торалар...

- Юҡ, Буранбай ҡорҙашым, мин Верхнеуралға мотлаҡ барырға тейешмен...

(Дауамы. Башы 4-се һанда).

✓ ***Башҡортостандың интернет булған һәр ауылында, Мәскәү, Санкт-Петербург, Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә, хатта сит илдәрҙә "Ашҡаҙар"ҙы тыңлау мөмкинлеге бар. Һәм тыңлайҙар ҙа, кире бәйләнештәр шул хаҡта һөйләй.***

ИЖАДХАНА

Был көндәрҙә үҙенең ун биш йәшен билдәләгән "Ашҡаҙар" радиоһын хаҡлы рәүештә "Мәҙәни канал" тип атайҙар. Эфир тулҡындарында күңелгә хуш килерлек тапшырыуҙар, радио фонданан йыр һәм һүҙ сәнғәте өлгөләрен тыңларға һәм, әлбиттә, бөгөнгө ҡаҙаныштары тураһында тулы мәғлүмәт алырға була. Бына шундай рухи хазинаны туплау, халыҡҡа еткереү буйынса ҙурлыҡлы эш алып барыла был редакцияла. "Ашҡаҙар" радиоһының баш мөхәррире Рәйсә Рәйес ҡыҙы ҠАЗБУЛАТОВАға бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.

"АШҠАҘАР" - МӨХӘББӘТЛЕ РАДИО

➔ **Рәйсә Рәйес ҡыҙы, "Ашҡаҙар" радиоһының 15 йыллығына арнап, бик йөкмәткеле китап донъя күрҙе. Эфирҙы тик башҡорт телендә генә яңғыратып торған радионың тыуыу, гөрләтеп эшләп китеү тарихы бик үҙенсәлекле. Шул тарихты һәм уның бөгөнгө эшмәкәрлеген китапта сағылдырыу ауыр булманымы?**

- Китап сығарыу идеяһы ҡапыл тыуҙы, тиһәм, дөрөҫ булыр. "Ашҡаҙар" радиоһының 15 йыллығын билдәләү ниәтендә тәүҙә эфирҙа "Аҙымдар" тапшырыуын астыҡ. Сентябрҙән башланды ул. Унда һәр йәкшәмбе радиоға нигеҙ һалған, уны ойоштороуҙа ҡатнашҡан, ҡасандыр эшләп киткән, бөгөн ең һыҙғанып хеҙмәт иткән ижадсыларҙың иҫтәлектәрен бирә барабыҙ. Иҫтәлектәр арыу ғына йыйылып киткәс, ниңә баҫма вариантын да сығармаҫҡа, тигән уй килде. 15 йыл эсендә матбуғатта ла күп кенә мәҡәләләр донъя күргән, фотолар ҙа күп йыйылған. Шуларҙың иңиңдәренән ыҡсым ғына ҡулъяҙма тыуҙы. Күберәк иҫтәлектәр йыйыу, радио тарихын шәхестәр күҙлегенән барлау китаптың төп йөкмәткеһен тәшкил итә. Иҫтәлектәр рәсмилектән азат, йылы, уҡымлы, шәхси кисерештәр, уңыштар, хәл-ваҡиғалар менән бәйле булһын, тип уйлағайным. Шулай килеп сыҡты ла. Шәхестәрҙең радиоға бик үк ҡағылышлы булмаған фекерҙәрен дә ҡалдырҙыҡ. Сөнки улар яҙмышындағы факттар - уҡыусы өсөн шулай уҡ ҡыҙыҡлы. Йәнә яҙмаларҙа буласаҡ журналистарға, мөхәррирҙәргә, алып барыусыларға, тауыш режиссёрҙарына, башҡа радио хеҙмәткәрҙәренә ҡулланма булырлыҡ фекерҙәр, профессиональ кәңәштәр бар.

➔ **Ун биш йыл әллә ни күп ваҡыт түгел дә һымаҡ, ләкин һәр осор үҙенең ниндәй ҙә булһа асыштары, боролоштары, шулай уҡ унда эшләгән кешеләре менән иҫтә ҡала...**

- Радионы ойоштороуҙа 2010-2016 йылдарҙа "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы директорының радио тапшырыуҙар буйынса урынбаҫары Фәнүр Мөхәррәм улы Йәғәфәров менән "Ашҡаҙар" радиоһының тәүге баш мөхәррире Миләүшә Ҡасим ҡыҙы Гәлиева-Йәғәфәрованың өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Уларҙы юҡҡа ғына "Ашҡаҙар"ҙың атаһы менән әсәһе тип атамайҙар. Тап улар каналдың концепцияһын, маҡсаттарын билдәләүгә, йөкмәткеһен булдырыуға күп көс һалған. Эфирға бирелгән һәр йырҙы шәхсән үҙҙәре тыңлап һайлауы, Миләүшә Ҡасим ҡыҙының радио биҙәлеше өсөн шиғыр китаптарын "ҡосаҡлап" йөҙләүы - оло хөрмәт уята торған факттар. Эштәренә фанаттарса бирелгән кешеләр яратып тыуҙырған "Ашҡаҙар"ҙы.

Тормош бит, коллектив та, етәкселәр ҙә алмашынып торған. Ләкин береһе лә ваҡытлыса килдем тип эшләмәгән. Һәр береһе моңло радионың тулҡындары тынмаһын өсөн йөрәк йылыһын, оҫталығын, фантазияһын һалған. Был иҫтәлектәрҙә лә сағыла.

Бөгөн дә коллективта бик көслө, тәжрибәле журналистар эшләй. Барыһы ла тип әйтерлек "Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре" исеменә лайыҡ. Күптәре радионың тәүге көндәренән алып хеҙмәт итә. Урал Нигмәтуллин, Фәнүзә Баһауетдинова, Фәрзәнә Аҡбулатоваларҙың ҡаҙаныштарын һаҡамай, исемдәрен атау ҙа етә. Сығарылыш мөхәррире Гөлдәр Шәрипова ошо йылдар эсендә үҙен эфирҙы, редакция эшен шәп ойоштороусы, координациялаусы итеп күрһәтте.

➔ **Һәр радио үҙенең "тауыштары" менән айырылып тора. Был йәһәттән мәҙәни каналға тоғролоҡ һаҡлаған сәнғәт оҫталары ла бар...**

- Тап шулай, һәм "Ашҡаҙар"ҙың алтын тауыштары тураһында айырым әйтеп китергә кәрәктер. Халыҡ артистары Нурия Ирсаева менән Олег Ханов инде ун биш йыл тоғро тыңлаусыларыбыҙҙы иртә таңдан уята, көн буйы оҙата бара. Ҡанатлы фекерҙәр, күңелдә үҫтерер шиғри юлдар, афоризмдар тап улар тауышы менән яңғырай. Яңы миҙгелдән уларға билдәле актерҙар Светлана Хәкимова менән Салауат Юлдашбаев тауыштары өҫтәлде.

➔ **"Ашҡаҙар" радиоһы халҡыбыҙ өсөн тағы нимәһе менән ҡиммәт һәм ҡәҙерле?**

- Тәү сиратта алтын фондта тупланған алтын яҙмаларҙы һаҡлауы һәм тыңлаусыға ишеттереүе менән ҡиммәт ул. "Ашҡаҙар" - Башҡортостан радиоһының төп вариҫы тип әйтергә тулы хоҡуҡлыбыҙ бар. Сөнки фонд яҙмалары тулы кимәлдә тик беҙҙең эфирҙа ғына яңғырай. Ә фонд өсөн тәүге яҙмалар 1951 йылда эшләнә башлаған. 75 йылға яҡын араулыҡта радио архивында 50 меңдән ашыу яҙма тупланған. Шуларҙың биш меңгә яҡыны - әҙәби әҫәрҙәр: проза, поэзия, спектаклдәр. Бер мең ярымы - музыкаль һәм тематик тапшырыуҙар. Ә йырҙар һәм музыкаль әҫәрҙәр 30 меңдән күберәк. Беҙ уларҙы һайлап, теге йәки был датаға тура килтереп, ҡайһы ваҡыт ҡабат монтажлап, тауыш сифатын яҡшыртып, тыңлаусыға еткерәбеҙ.

Һәр осорҙоң үҙ проекттары, тапшырыуҙары, акциялары, традициялары булған. Мәҫәлән, һәр эш көнөндә эфирға сыҡҡан "Беҙҙең донъя", "Сәсмәүер", "Илһам", "Ижади портрет" проекттары, репортаждар тәүге көндән бөгөнгәсә йәшәп килә. Төрлө йылдарҙа "Матбуғат", "Үткәндәр һағында", "Мәңгелек моң", "Музыка донъяһы", "Атылған йондоҙ", "Тарихнамә", "Тыуған төйәк", "Мәҙәни майҙан", "Ике йондоҙ" тапшырыуҙары, "Халыҡ әйтһә", "Премьера", "Халыҡ лаҡаптары", "Етегән" рубрикалары сыҡҡан. Уларға яңылары өҫтәлә: "Бер ауылдың тарихы", "Ырыуың кем?", "Башҡортостан бында башлана", "Ябай тел менән", "Алтын фондтан - алтын яҙмалар", "Ашҡаҙар"ҙа - премьера!", "Ҡурай иле", "Уйна, гармун!" һәм башҡалар. Республика Милли китапханаһында "Бәйләнештә" селтәренә тура трансляция менән ойошторолған "Онотолмаҫ осрашыуҙар"ҙы халыҡ шулай уҡ яратып ҡабул итә. Тематик көндәр һәм аҙналыҡтар ҙа тыңлаусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уята.

➔ **Ҙур проекттарҙың береһе - "Ашҡаҙар моңдары" фестивале тамашасы күңелен тиҙ арала яулап алыуын әйтергә кәрәктер. Был проект күпме талантларҙың исемдәрен асты, уларға ҙур сәхнәгә сығырға мөмкинлек бирҙе. Был изге эш артабан да дауам итерме?**

- Эйе, "Ашҡаҙар моңдары" фестивале халыҡ йырҙарын башҡарыусы һәүәҫкәр йырсылар араһынан иң оҫталарын ҙур сәхнәгә сығарҙы, радионың мәртәбәһен күтәрҙе, киңерәк танытты. Тәүге йылда уҡ конкурс төбәк-ара кимәлгә сыҡты, унда Ырымбур, Силәбе, Һамар өлкәһе маһирҙары ҡатнашты. Матур башланғысты артабан дауами нигеҙҙә дауам итергә ниәтебеҙ.

Хәҙер мәғлүмәт сығанаҡтары күп. "Ашҡаҙар" исемле моңло, рухлы радионың барлығын төрлө акциялар, проекттар менән халыҡтың иҫенә төшөрөп торорға, иғтибар үҙәгендә булырға кәрәк. Коллективта матур йолалаларға, матур осрашыуҙарға нигеҙ һалынған. Халыҡ менән аралашыу социаль селтәрҙә лә әүҙем бара. Киләсәктә иң яҡшы әҙәби әҫәрҙәре, башҡорт эпостарын халыҡҡа еткереү йүнәлешен тағы ла йәнләндереп ебәрергә теләйбеҙ. Радионың алтын фондындағы байлыҡты файҙаланып, заманса форматта саралар үткәреү идеяһы ла бар. Ижад өсөн мөмкинлектәр сикһеҙ. Бары теләк һәм милли мәҙәниәтебеҙгә мөхәббәт һәм ихтирам ғына кәрәк.

➔ **Тыңлаусыларҙың бер үтенесен дә иҫкә төшөрөргә кәрәктер. Улар "Ашҡаҙар"ҙы юғары йышлыҡта иркен тыңлау мөкинлеге булһын ине, тиҙәр.**

- Был беҙҙең дә иң ҙур хыялыбыҙ - ФМ-дың юғары йышлыҡтарына, киңерәк аудиторияға сығыу. Яңылыҡ түгел, был мәсьәләне элек тә бер нисә тапҡыр күтәргәндәр. Тамсы тама-тама таш тишә. Ныҡышлыҡ үҙ һөҙөмтәһен бирер тип өмөтләнәбеҙ. Әле лә Башҡортостандың интернет булған һәр ауылында, Мәскәү, Санкт-Петербург, Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә, хатта сит илдәрҙә "Ашҡаҙар"ҙы тыңлау мөмкинлеге бар. Һәм тыңлайҙар ҙа, кире бәйләнештәр шул хаҡта һөйләй. Тимәк, юбилей йылында үткәндәрҙе барлап, иң матур, һөҙөмтәле алымдарҙы ҡулланып, яңыларын үҙләштереп, артабан тоғро тыңлаусыларыбыҙға хеҙмәт итергә генә ҡала!

ШУЛАЙ ИТЕП...

Яратып эшләнгән эш кенә уңышлы һәм емешле була. "Ашҡаҙар"ға халыҡ моңдарына ғашиҡтар, телгә, әҙәбиәткә, сәнғәткә, ил, ер, халыҡ яҙмышына битараф булмағандар килә. Алтын фондта тупланған алтын яҙмалар ҙа тап шундай заттар тарафынан тыуҙырылған, улар - оло һөйөү емеше. Тимәк, "Ашҡаҙар"ҙы мөхәббәтле радио булғаны өсөн яраталар.

✓ *Милли колорит, төбәк тематикаһына арналған сувенирҙар эшләү киң ҡолас ала. Райондарҙа туристарҙы хеҙмәтләндереү үҙәктәре, базалар асыла, милли кәсептәр тергеҙелә. Шулай итеп халҡыбыҙ аҡса эшләүҙең яңы юлын үҙләштерә.*

ИНТЕРНЕТТАН

АРАЛАШЫУ ҺӘЛӘТЕНӘ...

■ Хәҙерге рәсәйле 1980 йылдарҙа СССР-ҙа йәшәүсенән күпкә айырыла. Бындай фекергә Рәсәй Фәндәр академияһының Психология университеты ғалимдары килгән. Илебеҙ кешеләренең психологик портретын тикшереү һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, бөгөнгө кеше ул ваҡытҡа ҡарағанда күпкә ҡатмарлыраҡ, үҙ-үҙен генә ҡайғыртыусан, хатта бер аҙ яуызыраҡ, конфликттарға инеүсәнерәк, әҙәпһеҙерәккә әйләнгән. Алыҫ 80-се йылдар менән сағыштырып ҡарағанда, хәҙерге рәсәйле өс тапҡыр агрессивыраҡ, тупаҫыраҡ, әрһеҙерәк. Эксперттар фекеренсә, һүгенеүҙәр шулай уҡ - агрессия күрһәткесе.

■ Тукланыу продукттары хәүефһеҙлеге буйынса Европа идаралығы (EFSA) аспартам буйынса тикшеренеүҙәрҙе тамамлаған һәм уны хәүефһеҙ тип тапҡан. Шәкәрҙән 200 тапҡыр татлыраҡ булған аспартам диабет менән ауырыусылар һәм үҙ кәүҙәһе ауырлығын контролдә тоторға теләүселәр өсөн тәғәйенләнгән ризыҡтарҙы әҙерләүҙә ҡулланыла. Шәкәрҙе алыштырыусының канцероген сифаттары буйынса бәхәстәрҙә уның зыянлы булыуын билдәләй инеләр. Эксперттар әйтеүенсә, дозаһын күтәргән осраҡта аспартам, ысынлап та, зыянлы, әммә уға яғылған башҡа ғәйептәр дәлилләнмәгән. Төрлө илдәрҙә уның максималь дозаһы төрлөсә билдәләнә, шулай ҙа ул яҡынса - тәүлегенә 100-130 таблетка. Аспартам диетик газлы эсемлектәрҙең, һағыҙҙарҙың составына ла инә.

■ Ғалимдар Wi-Fi сәләмәтлектең ҡаҡшауына килтереүе ихтимал, тип белдерә. Дания ғалимдары балаларҙа һәм бүлмә гөлдәрендә һынауҙар үткәргән. Бер төркөм уҡыусылар Wi-Fi селтәренә тоташтырылған телефондарын яҫтыҡ аҫтына һалып йоҡлаған. Беренсе төндән һуң уҡ балалар баш ауыртыуына, иғтибарҙы туплауы ауыр булыуына зарланған. Тәжрибәнең икенсе өлөшөндә уның бүлмә гөлдәренә тәьҫире тикшерелгән. 6 гөлдө 12 көнгә Wi-Fi сығанаҡлы бүлмәгә бикләгәндәр, тағы 6 гөл ябай бүлмәгә урынлаштырылған. Экспериментҡа тәғәйенләнгән ваҡыт үтеүгә беренсе бүлмәләге гөлдәр һулыған, икенсе бүлмәләге гөлдәр сәскә атыуын дауам иткән. Wi-Fi-ҙың тәьҫир итеү механизмы әлегә өйрәнелмәгән, бының өсөн ҙур һынауҙар үткәреү кәрәк буласаҡ. Шулай ҙа ғалимдар хәҙерҙән үк йоҡларға ятҡанда уны һүндерергә һәм кеҫә телефондарын карауаттан 1,5 метр йыраҡлығында тоторға кәңәш итә.

■ Телевизорҙы күп ҡараған балалар әйләнә-тирәһендәге кешеләрҙе аңлау һәләтен юғалта. Эксперимент 1,5 йәштән 3 йәшкә тиклемге балаларҙа үткәрелгән. Уларҙың ата-әсәләре бала телевизор алдында күпме ваҡыт үткәрә, телевизор бүлмәнең ҡайһы урынында тора тигән һорауҙарға яуап биргән. Бүлмәлә телевизор даими тоҡандарып ҡуйылған булһа, бала башҡа кешеләрҙең кәйефен һәм тойғоларын насарыраҡ аңлай икән. Артабан был аралашыуҙа ҙур проблемалар тыуҙыра.

■ Ҡытайҙа һөттөң антиканцероген сифаттарын асыҡлаған тикшеренеү үткәрелгән. Илань университеты белгестәре һөт аҡһымында булған ферменттарҙы тикшереп, бер пептид ферменттың ашҡаҙан яман шеше күҙәнәктәре үҫеше хәүефен булдырмауын асыҡлаған. Ферменттың һөҙөмтәһе уның концентрацияһына, яман шеш күҙәнәктәренә тәьҫиренең күләменә һәм оҙайлығына бәйле. Тикшеренеүҙең авторы Вэй Чжен Чен әйтеүенсә, был асыш ашҡаҙан яман шешенә ҡаршы препараттар уйлап табыуға булышлыҡ итәсәк. Элегерәк оло кешеләр өсөн һөт зарарлы тигән ҡараш йәшәй ине, әммә белгестәр белдереүенсә, һөттө самаһын белеп ҡулланыу организмды онкологик сирҙәрҙән һаҡлай.

ЭШҠЫУАРЛЫҠ МӘКТӘБЕ

2024 йылдың октябрь аҙағында Өфөлә этнотуризм буйынса IV Халыҡ-ара форум үтте. Был - Башҡортостанда туризмдың йылдам үҫешен күрһәткән бер билдә. Һуңғы осорҙа республикабыҙ Ваҡиғалар туризмы өлкәһендә "Russian Event Awards" Халыҡ-ара премияһының I дәрәжәһенә өлгәште, шулай уҡ Тверь ҡалаһында үткән "Туристик сувенир" Бөтә Рәсәй конкурсында еңеү яуланы һәм "Йыл Маршруты" Бөтә Рәсәй туристик премияһына лайыҡ булды. Ғөмүмән алғанда, бөгөн был тармаҡ беҙҙең республикала һәм тотош Рәсәйҙә ҡеүәтле индустрия булараҡ формалашыу мәлен кисерә. Ошо хаҡта һәм үҙе етәкләгән ойошманың эшмәкәрлеге тураһында "Урал батыр" туроператоры" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттең генераль директоры Айгөл Рәсим ҡыҙы РӘХМӘТУЛЛИНА менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.

ЯЛ ИТӘ-ИТӘ...

Башҡортостаныңды таны!

➔ "Урал батыр" туроператоры исеменән үк ойошманың этнотуризмға яҡын тороуы тураһында ишаралай. Ни өсөн был йүнәлешкә айырым иғтибар бүләһегеҙ?

- Ойошма ғаилә бизнесы булараҡ барлыҡҡа килә. Кинйә Сәғит улы Күскилдин нигеҙ һала уға. Эҙләнеүҙәр, төрлө проекттар аша 2014 йылда ул башҡалар бик үк ҡағылмаған этнотуризм темаһын күтәреп сыға. Шул рәүешле "Урал батырҙың алтын билбауы" маршруты тыуа. Төбәгебеҙҙең хозур тәбиғәтен, тарихын, этнографияһын үҙ эсенә алған, уйланылған бай тематикалы күп көнлөк турҙар ойоштороу һөҙөмтәле була. Ул Өфөнән башланып, Белорет, Учалы, Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрйән, Ғафури райондары аша үтә. "Урал батыр" эпосы ваҡиғаларының башы Учалы районында һаҡланһа, Бөрйәндә халҡыбыҙҙың үлемһеҙ ауыҙ-тел ижады Шүлгәнташ мәмерйәһендә, Йылҡысыҡҡан күлендә һынланған. Ҡая таштар, ҡуйы урман, йылға-күлдәр, үткән дәүерҙәр эҙен һаҡлаған ҡомартҡылар һәм тәүтормош заманын һүрәтләгән боронғо халыҡ ижады, бер-береһен тулыландырып, туристар алдында Башҡортостандың камил бер образын тыуҙыра, уны бөтә донъяға таныта. Ә "алтын билбау"ға килгәндә, маршрут Көньяҡ Уралдың алтын ятҡылыҡтары киң таралған Белорет, Учалы, Баймаҡ райондары аша үтә, республикабыҙҙың ер аҫты хазиналарына ла бай булыуын күрһәтә. Ғөмүмән алғанда, беҙҙә туризмдың үҫеш өҫтөнлөгө нәҡ ошо этно йүнәлешендә ята, тип уйлайым. Сит өлкәләрҙән туристы иң элек Башҡортостандың тәбиғәте ылыҡтыра. Килгәс, ул милли аштан ауыҙ итә, милли кейемде кейеп ҡарарға ынтыла, уның нисек эшләнеүе менән ҡыҙыҡһына, милли кәсеп серҙәре тураһында белешә. Кейеҙ баҫыу, балаҫ һуғыу, күн әйберҙәр эшләү, ҡымыҙ бешеү, солоҡсолоҡ - барыһы ла уның өсөн ҡыҙыҡ.

➔ Туризм өлкәһендә эшләгән башҡа бик күп фирмаларҙың береһе булараҡ, "Урал батыр" туроператоры миҫалында Башҡортостанда тармаҡтың һуңғы осорҙағы үҫеш юлын күҙалларға мөмкиндер...

- Һәр бизнес даирәһендәге кеүек үк, туризм да үҙе үҫешә һәм йәнәш тармаҡтарға этәргес бирә. Туҡланыу, ҡунаҡханалар сервисы кимәле туристар ағымы артҡан һайын юғарыраҡҡа күтәрелә. Мәҫәлән, "Мәктәп туризмы" программаһына инеп китеү өсөн балаларҙы өс йондоҙло ҡунаҡханаларҙа йоҡлатыу талабы ҡуйыла. 2020 йылда төбәктә тейешле шарттар тыуҙырған 50-гә яҡын ҡунаҡхана иҫәпләнеп, улар ҙа сертификат алмай эшләй ине. Туризмдың йылдам үҫешә башлыуы эшҡыуарлыҡтың был өлкәһенә ыңғай йоғонто яһаны. Хәҙер сәйәхәтселәрҙе яҡшы урындарҙа йоҡлатыу проблемаһы юҡ. Туҡланыу индустрияһы ла бик тиҙ яңы шарттарға ҡулайлаша. Элек ресторан-кафелар стандарт меню менән генә сикләнһә, бөгөн улар милли ризыҡ та тәҡдим итә. Милли колорит, төбәк тематикаһына арналған сувенирҙар эшләү киң ҡолас ала. Райондарҙа туристарҙы хеҙмәтләндереү үҙәктәре, базалар асыла, милли кәсептәр тергеҙелә. Шулай итеп халҡыбыҙ аҡса эшләүҙең яңы юлын үҙләштерә, урындағы иҡтисад яңы һулыш ала. Республикала профессиональ гидтар мәктәбе формалаша. Был өлкәлә инде сертификатһыҙ эшләп булмай. Һуңғы йылдарҙа М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында, Өфө нефть техник университетта һәм башҡа уҡыу йорттарында гид һөнәре буйынса өҫтәмә белем бирә башланылар.

➔ Туризм - ул күп төрлө һәм күп тармаҡлы. Һеҙҙең фирма тағы ниндәй йүнәлештәр буйынса эшләй?

- Үҙебеҙҙе "туроператор" тип атап, фирманың үҫеш йүнәлешен билдәләгәнбеҙ. Йәғни клиенттарға ялды республиканың барлыҡ туристик мөмкинлектәренән сығып тәҡдим итәбеҙ. Был иһә - Башҡортостандың күпселек шифаханалары һәм турист базалары менән ныҡлы бәйләнешебеҙ булыуына ишара. Шуға ла мауыҡтырғыс, һәр кемдең күңеленә хуш килерҙәй турпрограммаларыбыҙ бар. Әйткәндәй, беҙҙең шифаханалар ситтә бик юғары баһалана. Социаль туризм өлкәһендәге дәүләт программаларында әүҙем ҡатнашабыҙ һәм, әлбиттә, үҙебеҙ турҙар, Ағиҙел, Инйәр йылғалары буйлап кәмәләрҙә сәйәхәт, йәйен дә, ҡышын да тәбиғәткә походтар ойоштораbыҙ.

➔ Башҡортостан халҡы әүҙем ялға ылығамы?

- Эйе, хатта ауыл кешеләре лә хәҙер тәбиғәткә сығып ял итергә әүәҫләнде. Ойошҡан туризм хеҙмәте менән дә файҙаланалар. Республикабыҙҙа иҫ киткес матур урындар шул тиклем күп, әлеге мобиль заманда уларҙы барып күреү өсөн һәр кемдең мөмкинлеге бар. Мин үҙем Башҡортостанды турфирмала эшләй башлағас астым. Уға тиклем нисектер форсат теймәне. Хәҙер йәй көндәрендә Бөрйәнгә ун тапҡыр барып урамаһам, күңелем булмай. Сөнки Бөрйән бит ул - көс биргән, рухландырған урын, унан мин илһамланып, эшкә дәртләнеп ҡайтам гел.

➔ Эшегеҙҙә республика ярҙамын тояһығыҙмы?

- Туризм бөгөн - эшҡыуарлыҡтың тос бер тармағы. Уны заманса көйләү йәһәтенән Башҡортостан етәкселеге мөһим саралар күрә. Туризмды үҫтереү концепцияһы, дәүләт программалары ҡабул ителгән. Былтыр республикала "Торатау" этнокомплексы, "Янғантау" геопаркында "Салауат төйәге" тарихи-мемориаль паркы асылды. Шишмә районында, Тура хан мавзолейы янында, Күсмә цивилизациялар музейының визит үҙәге эшләй башланы. Улар - туристарҙы ылыҡтырыр урындар. Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған туризм өлкәһе хеҙмәткәре" исемен булдырыу тураһында тәҡдиме лә тармаҡҡа иғтибарҙың юғары кимәлдә икәнен күрһәтә. Ковид пандемияһы, әле килеп санкциялар эске туризмдың йылдам үҫеүенә этәргес булды. Ошо трендты иҫәпкә алып, республика туристар өсөн мөмкин тиклем ҡулай шарттар тыуҙырырға тырыша, турфирмаларға төрлө ярҙам күрһәтә.

➔ Айгөл Рәсим ҡыҙы, гәзит уҡыусыларға һеҙҙең турала белеү ҙә ҡыҙыҡлы булыр ине...

- Сығышым менән үҙем Ҡырмыҫҡалы районы Ҡабаҡ ауылынанмын. Ә уҡыған һөнәрем буйынса, мин - педагог. Туризмға килеүемә быйыл биш йыл була - бәләкәй генә үҙенсәлекле юбилей инде. "Урал батыр" фирмаһында эшләй башлауым, уны етәкләүем яҙмыштың ҡушыуы булғандыр. Мәктәптә уҡығанда "Урал батыр" эпосы миңә ауыр бирелә ине, ә хәҙер үлемһеҙ халыҡ ижады өлгөһөн яңынан өйрәнәм, тип әйтергә лә мөмкин. Сөнки этнотур ойоштороу өсөн эпос мотивтарын бик яҡшы белергә кәрәк. Яңы эшемә башкөллө сумдым, бөгөн унан башҡа үҙемде күҙ алдына ла килтерә алмайым...

Рәсүл БАЙГИЛДИН
әңгәмәләште.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

ЯМАН АҘЫҠ ҮҘЕҢДЕ АШАЙ

Юҡҡа ғына сир ҙә, дауа ла ризыҡ аша инә, тимәгәндер боронғолар. Шуның өсөн бөгөн беҙгә, магазин кәштәләре төрлө ымһындырғыс тәм-томдан һәм төрлө ризыҡтан һығылып торғанда, бигерәк тә уяу һәм сәләмәтлегебеҙгә иғтибарлы булырға кәрәк. Сөнки яман аҙыҡ ашаһаң, ул яйлап һинең үҙеңде ашай башлай икәне бер кемгә лә сер түгел.

Аҡ май. Май 82,5 проценттан да кәм булырға тейеш түгел. 72,5 процентлы май - транс-май, йәғни водород менән таркатылған түбән сифатлы үсемлек майы. Әгәр ҙур процентлы май таба алмайһығыҙ икән, үсемлек майы ашау файҙалыраҡ. Тотош ҡап йәки килограмы менән транс-май ашағансы, бер-ике ҡалаҡ тәбиғи аҡ май ашағыҙ.

Транс-май ҡушылған аҙыҡ-түлек организмдың стресҡа ҡаршы тороуын кәметә, депрессия хәүефен арттыра. Бындай ризыҡтарға маргарин, йомшаҡ майҙар, аҡ һәм үсемлек майҙары ҡатнашмаһы, таҙартылған (рафинированный) үсемлек майҙары, майонез, кетчуп, фасфуд продукттары, фри картуфы, әҙерләү өсөн транс-майҙар ҡулланылған башҡа ризыҡтар, кондитер изделиелары - торттар, пирожныйҙар, печеньелар, крекерҙар, әҙерләү өсөн кулинар майы ҡулланылған башҡа ризыҡтар, снектар - чипсылар, попкорн һ.б. туңдырылған ярымфабрикаттар инә.

Пластик һауыттағы еңелсә тоҙланған сельдь балығы бары тик майҙа ғына һаҡлана. Бер ниндәй һеркәлә лә, шарапта ла һаҡланмай. Әгәр май юҡ икән, тимәк, утропин өҫтәлгән. Бөтөн донъяла утропин, бик зарарлы өҫтәмә тип танылып, ҡулланыуға тыйылған (аммиак менән формальдегид ҡушылғанда барлыҡҡа килә).

Еңелсә тоҙланған ыуылдырыҡ. Ыуылдырыҡ - оҙаҡ һаҡлана торған аҙыҡ түгел. Тик туңдырылған йәки күп итеп тоҙ ҡушылған саҡта ғына уның ғүмере "оҙая". Шуға күрә, тышында "еңелсә тоҙланған ыуылдырыҡ", тигән яҙыу булһа, тимәк, уға йә утропин, йә лимон кислотаһы ҡушылған. Икенсе нәмәләр ҙә ҡушылыуы ихтимал, әммә һөҙөмтәлә барыбер формальдегид барлыҡҡа килә.

Краб таяҡсалары. Атамаһынан айырмалы, таяҡсаларҙа бөтөнләй краб ите юҡ, ул бары тик соя ҡушылған краб эссенцияһы ғына. Ә 1993 йылдан алып уны етештереүселәр "ароматизаторлы краб таяҡсалары" тип билдәләргә тейеш ине.

Арахис. Петуния гены индерелә. Ныҡ ағыулы матдә. Бөжәктәр арахисты ашамай.

Сит илдән индерелгән картуф.

Какао.

Консерваланған йәшел борсаҡ.

Консерваланған кукуруз. Кукуруз таяҡсалары һәм татлы киҫәксәләр. Әгәр кукуруз таяҡсалары һәм киҫәксәләре һатып алаһығыҙ икән, улар татлы булырға тейеш түгел. Сөнки производствола шәкәр ҡулланылмай, ул 140 градуста яна. Уның урынына шәкәрҙе алмаштырыусы матдәләр, был осраҡта цикломат ҡулланалар.

Ароматизаторлы бутҡалар. Бөтә ароматизаторҙар ҙа - хатта тәбиғигә оҡшаштары ла - химик сәнәғәт продукттары. Шуға күрә уларҙы ашамау хәйерле.

Леденец. Барбарис. Хәҙер уларҙы эшләү өсөн көслө химик эссенция ҡулланыла. Быны ябай тәжрибә яҙһамында ла асыҡларға мөмкин. Әгәр кәнфитте бер аҙ һыулап, өҫтәл япмаһы өҫтөндә ҡалдырһағыҙ, ул уны лагы менән ҡуша тишәсәк. Хатта пластик һауыттар ҙа тишелә, ә ашҡаҙанығыҙ нишләргә тейеш?

Джемдар. Мармеладтар. Әселәндереүгә ҡаршы көслө матдәләр ҡатнашмаһы. Бер ваҡытта ла сейәне нисек булған, шул көйө һаҡлау мөмкин түгел. СССР заманындағыһы менән хәҙерге мармеладтың бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ. Былар барыһы ла - химия сәнәғәте мөғжизәләре.

Тиҙ бешеүсе туҡмастар, иреүсе аштар, картуф иҙелмәһе, бульон кубиктары, "Юпи" һәм "Зуко" көүек һуттар. Былар барыһы ла организмға зыян килтереүсе химия.

Сей килеш ыҫланған колбасалар һ.б. генно-модификацияланған соянан эшләнә. Сосиска, сарделька, бешерелгән колбаса, паштеттар һ.б. - туң май, эс майы, суска тиреһенән яһала. Колбаса изделиеларының 40 проценты ошо ҡатнашмаларға тура килә. Был осраҡта тәбиғи продукт тураһында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел. Саҡ ҡына муйын ите һәм бер килограмм гель алына ла, төн буйы махсус машинкала эшкәртелә. Таңға ҙур киҫәк "ит" барлыҡҡа килә. Уның составында ысын ит ни бары 5 процент ҡына булыуы мөмкин, ҡалғаны инде - гель (каратинин, тәм көсәйтеүселәр, төҫ биреүселәр). Бындай "ит"кә алһыу төҫтө махсус лапма әҙҙамында төҫ биреүсе ҡатнашма бирә. Әгәр витриналағы лапманы һүндерһәгеҙ, төҫтөң йәшел булыуын күрерһегеҙ.

Бөгөн бераү ҙә элекке кеүек ыҫламай. Махсус ыҫлыу шыйыҡсалары ҡулланыла, уларҙың составында шул уҡ формальдегид бар.

Оҙаҡ һаҡланған (2 айҙан ашыу) һөт ризыҡтары. Ике аҙнанан да оҙаҡ һаҡланған һөт продукттарын ҡулланырға ярамай.

Асептик ҡаптар - антибиотиклы ҡаптар.

Ҡарбуз. Үҫкәндә зарарлы ашламалар менән ашландырылыуы уны ашаусыны ағыуланыуға беренсе кандидат итә.

Борос (миҙгел ваҡытынан тыш). Генно-модификацияланған продукт.

Төрөлгән кекс һәм рулеттар. Составтарына ҙур күләмдә стабилизатор һәм консерванттар булыу арҡаһында был продукттар айҙар буйына боҙолмайынса һаҡлана.

Кәнфиттәр. 90 процент шоколад - бөтөнләй шоколад түгел (буяуҙар, алмаштырыусылар ҡушылмаһы).

Шоколад батондары. Тәмле һәм асығыуҙы баҫыусы шоколад батондары ҙур калорияға эйә булыу менән бер рәттән, төрлө буяуҙар һәм ароматизаторҙарға ла бай. Ҙур күләмдә шәкәр һәм төрлө химик ҡушылмалар булыуы ҙур калориялыҡ бирә һәм ҡабат-ҡабат ашағы килеү теләген тыуҙыра.

Сит илдән килтерелгән, тәмләткестәр ҡушылған сәйҙәр. Бер ниндәй ҡушылма булмаған, артыҡ нәмәләр йөҙөп йөрөмәгән натураль сәй эсегеҙ. Ароматлаштырылған сәйҙәргә лимон, әфлисун йәки башҡа кислоталар ҡушыла. Өйрәнеү шунда уҡ барлыҡҡа килә. Беҙгә организмдан барлыҡ кислоталарҙы сығарырға кәрәк.

Таҙартылған һәм тәмләтелгән үсемлек майҙары. Уларҙы салаттарға ҡулланырға ярамай. Фабрикалар производство өсөн сығарған бындай майҙар аш эшкәртеү системаһына бер ниндәй ҙә файҙа килтермәй, киреһенсә, ундағы бөтөн процестарҙы быуып тора.

Газландырылған татлы эсемлектәр. Улар организмға зарарлы матдәләрҙе тиҙерәк таратыу өсөн шәкәрҙең, газдарҙың һәм химияның ҡушылмаһынан ғибәрәт. Кока-кола, мәҫәлән - эзбиздән һәм тутты бөтөрөүҙән иң яҡшы сара.

Ҡышын һатылған баҡса еләге. Бер тин файҙаһы булмаған ризыҡ. Унда бер генә витамин да юҡ.

УҢЫШ ҠАҘАН

ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

Утыҙ беренсе хат "Әхлаҡи ултыраҡлыҡ даирәһе"

Үҙеңдә һәм башҡаларҙа нисек итеп "әхлаҡи ултыраҡлыҡ" тәрбиәләргә - ғаиләңә, өйөңә, ауылыңа, ҡалаңа, илеңә эйәләштерергә?

Был тик мәктәп һәм йәштәр ойошмаларының ғына бурысы түгел, ә ғаиләнеке лә тип уйлайым.

Ғаиләгә һәм өйгә яҡынлыҡ лекциялар һәм нәсихәттәр менән махсус рәүештә һалынмай, ә тәү сиратта ғаиләләге мөхиттән барлыҡҡа килә. Ғаиләлә уртаҡ ҡыҙыҡһыныуҙар, күңел асыуҙар, ял бар икән, был да бик яҡшы. Ә инде һирәкләп булһа ла бергә ултырып, ғаилә альбомдары ҡарала, яҡындарҙың ҡәберҙәрен тәрбиәләп торалар, ата-бабалары нисек йәшәгәне тураһында һөйләйҙәр икән - был икеләтә яҡшы. Һәр икенсе тиерлек ҡала кешеһенең ата-бабаһы яҡындағы йәки алыҫтағы ауылдан күсеп килгән, һәм был ауыл уның өсөн тыуған ер булып ҡалырға тейеш. Һирәкләп булһа ла бөтә ғаилә менән шул ауылға барып, үткәндәр тураһында хәтирәләр һаҡланыуын күмәкләшеп ҡайғыртырға һәм бөгөнгә уныштарға ҡыуанырға кәрәк. Ә инде тыуған ауылдар юҡ икән, ил буйлап бергәләп сәйәхәттәр яңғыҙ сәфәр ҡылыуҙарға ҡарағанда хәтерҙә нығыраҡ ҡаласаҡ.

Күрергә, тыңларға һәм хәтерҙә ҡалдырырға - быларҙы барыһын да кешеләргә ҡарата һөйөү менән эшләү уғата мөһим! Яҡшылыҡты күрә белеү еңел түгел. Кешеләрҙе аҡылы йәки интеллигентлығы өсөн генә баһаларға ярамай: уларҙы яҡшылыҡтары, хеҙмәте, үҙ кешеләрегеҙ - ауылдаштар йәки бергә уҡығандар, ҡалалаштар йәки нимәләләр "үҙендеке", "үҙенсәлекле" булыуҙары өсөн баһалағыҙ.

Әхлаҡи ултыраҡлыҡ даирәһе бик киң.

Береһендә - беҙҙең ҡәберҙәргә һәм зыяраттарға ҡарата мөнәсәбәтебеҙҙә айырым туҡталып китмәксемен.

Ҡалалар төҙөүсе архитекторҙарҙы йыш ҡына ҡала сиктәрендә зыярат булыуы борсой. Улар уны юҡҡа сығарырға, баҡсаға әйләндерергә тырыша, ә шул уҡ ваҡытта зыярат - ул ҡаланың бер элементы, ҡала архитектураһының үҙенсәлекле һәм бик ҡиммәтле өлөшө.

Ҡәберлектәрҙе яратып эшләгәндәр. Ҡәбер таштары баҡыйлыҡҡа күскән кешегә ҡарата хөрмәтте, уның хәтерен мәңгеләштерергә тырышыуҙы сағылдыра. Шуға ла улар күп төрлө, һәр береһе үҙенсәлекле, ҡыҙыҡлы. Онотолған исемдәрҙе уҡығанда, ҡайһы саҡта бында ерләнгән билдәле шәхестәрҙе, туғандарын йәки таныштарын эҙләгәндә, кешеләр ниндәйҙер кимәлдә "тормош аҡылы"на төшөнә. Күп зыяраттар үҙенсә нәфис. Шуға, "әхлаҡи ултыраҡлыҡ" тәрбиәләүҙә яңғыҙ ҡәберҙәрҙең йәки зыяраттарҙың роле бик ҙур.

Дмитрий ЛИХАЧЕВ.

10 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.25, 0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.55 Премьера. "Время героев". [16+]
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Уголь". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

БСТ
7.00 Сәләм.
10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]
11.45, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью.
12.00 Специальный репортаж. [12+]
12.15 Письма солдатам. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Башҡорттар. [12+]
16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
16.45 Х/ф "Советник". [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Защитники Отечества. [12+]
19.00, 4.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Д/с "Герои". [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Күстәнәс. [12+]
23.30 Золотой фонд башкирского ТВ.
2.30 Спектакль "Между небом и землёй". [12+]
5.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]

11 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК

ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Уголь". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

БСТ
7.00 Сәләм.
10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]
11.30, 16.30, 17.30, 20.45, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 13.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Тайм-аут. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Городок АЮЯ. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Автограф. [12+]
17.00, 20.15, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
19.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
21.20 Хоккей. "Куньлунь Ред Стар" (Пекин) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.
2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]
2.45 Спектакль "Три аршина земли. Нур". [12+]
4.30 Тормош. [12+]

12 ФЕВРАЛЯ СРЕДА

ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Уголь". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

БСТ
7.00 Сәләм.
10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Дорога к храму. [6+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45 Криминальный спектр. [12+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Физ-ра. [6+]
15.30 Зерно. [6+]
16.00 "100 имён Башкортостана". [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Тормош. [12+]
19.00, 4.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Защитники Отечества. [12+]
21.00 Спроси у Дубовского.
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Байыҡ представляет... [12+]
2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
2.30 Спектакль "Наследство". [12+]
5.00 Тайм-аут. [12+]

13 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ

ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Уголь". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

БСТ
7.00 Сәләм.
10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 13.45 Интервью. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]
12.15 Ҡурай даны. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Сулпылар. [6+]
15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Патриот РФ. [12+]
16.15 Дознание. [16+]
16.45 Мегасело. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Йома. [6+]
19.00, 4.00 Телецентр. [12+]
19.45 Мама. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 "Башҡорт йыры" представляет... [12+]
21.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]
22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
2.30 Спектакль "Февраль. Буран". [12+]

14 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА

ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Т/с Премьера. "Первый номер". [18+]
1.10 "Горячий лед". Фигурное катание. Финал Гран-при России. Мужчины. Короткая программа. Трансляция из Красноярска. [0+]
2.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Кулагины". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Один в один". [12+]
0.30 "Истории Большой Страны".
1.30 Х/ф "Счастье есть". [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

БСТ
7.00 Сәләм.
10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Йома. [6+]
11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45 Криминальный спектр. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]
12.15 Ҡурай даны. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
13.45, 17.45 Интервью. [12+]
14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Тирмәкәй. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Аль-Фатиха. [6+]
16.45, 4.45 Ради добра. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Башҡорттар. [6+]
18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань). КХЛ.
22.00 СВОих не бросаем. [12+]
22.15 Письма солдатам. [12+]
23.00 Ете егет. [12+]
0.00 Ҡурай-шоу. [12+]
2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]
2.45 Спектакль "Вишневая гора". [12+]
5.00 Хазина. [12+]

15 ФЕВРАЛЯ СУББОТА

ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Медведева против Медведевой". [12+]
11.05 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.20 Д/с "MONEYпуляторы. "Развод на любовь". [16+]
14.25 "Горячий лед". Фигурное катание. Финал Гран-при России. Танцы. Ритм-танец. Женщины. Короткая программа. Трансляция из Красноярска. [0+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Народный ледниковый". [0+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.10 Премьера. "Закрытый показ". [16+]
2.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Мимо тёщиного дома". [16+]
0.40 Х/ф "Ты только будь со мною рядом". [12+]
4.14 Перерыв в вещании.

БСТ
7.00 Доброе утро! [12+]
7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Мегасело. [12+]
8.30 Аль-Фатиха. [6+]
9.00 Ҡурай даны. [12+]
9.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]
9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
9.45 СВОих не бросаем. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Книга сказок. [6+]
10.45 Әкиәтсе. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 Преград. Net. [6+]
11.30 Ат уйнатып. [12+]
12.00 Елкән. [6+]
12.30, 5.00 Ете егет. [12+]
13.30, 4.30 Башҡорттар. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Все песни о прекрасном... [12+]
18.15 Легенды Урала. [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
19.00 Ради добра. [12+]
19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Байыҡ представляет... [12+]
22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30 Новости недели (на баш. яз.). [12+]
23.15 Караоке по-башкирски. [12+]
23.45 Концерт Розы Аккучуковой. [12+]
1.45 Новости недели (на баш. яз.). [12+]
2.30 Спектакль "Руди - never off". [12+]
4.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]

16 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.20 Д/с "MONEYпуляторы. "Развод на любовь". [16+]
14.35 Т/с "Участок". Кинопоказ. "30 лет вместе". [12+]
16.35 "Горячий лед". Фигурное катание. Финал Гран-при России. Женщины. Произвольная программа. Трансляция из Красноярска. [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с Премьера. "Территория". [18+]
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1
5.30, 2.20 Х/ф "Роман в письмах". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00, 1.35 Д/ф "Штурм Будапешта". [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.02 Перерыв в вещании.

БСТ
7.00 Доброе утро! [12+]
7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Тормош. [12+]
8.15 Ради добра. [12+]
8.30 Күстәнәс. [12+]
9.00 Легенды Урала. [12+]
9.15 Мама. [12+]
9.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Тирмәкәй. [6+]
10.45 Городок АЮЯ. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 Сулпылар. [6+]
11.30 Зерно. [6+]
12.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз.). [12+]
13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
15.00 Дорога к храму. [6+]
15.30 Честно говоря. [12+]
16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Локомотив" (Ярославль). КХЛ.
19.15 Әлләсе... [12+]
20.00 Патриот РФ. [12+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 "Благославляю тебя". Факия Тугузбаева. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]
22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Байыҡ. [12+]
1.30 Спектакль "Чёрный иноходец". [12+]
4.00 Колесо времени. [12+]
4.15 Моя планета - Башкортостан. [12+]

НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1446 һижри йыл.

Февраль (Шәғбан)	Иртәнге намаҙ	Ҡояш ҡалҡа	Өйлә намаҙы	Икенде намаҙы	Аҡшам намаҙы	Йәстү намаҙы
10 (11) дүшәмбе	7:09	8:49	13:30	16:19	18:13	19:53
11 (12) шишәмбе	7:07	8:46	13:30	16:21	18:15	19:55
12 (13) шаршамбы	7:05	8:44	13:30	16:23	18:17	19:57
13 (14) кесе йома	7:03	8:42	13:30	16:25	18:19	19:59
14 (15) йома	7:01	8:40	13:30	16:27	18:22	20:01
15 (16) шәмбе	6:59	8:38	13:30	16:29	18:24	20:03
16 (17) йәкшәмбе	6:57	8:36	13:30	16:31	18:26	20:05

"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

РОБЕРТ ЮЛДАШЕВ САҠЫРА!

7-9 февралдә Өфөлә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында I "Ел моңо" музыка һәм бейеү фестивале үтә.

Башҡортостандың халыҡ артисы, Ш.Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры, бик күп халыҡ-ара конкурстар лауреаты Роберт Юлдашев менән "Ҡурайсы" этно-төркөмө киң аудитория һәм Башҡортостанда йәшәүсе төрлө мәҙәниәт вәкилдәре өсөн һоҡланғыс байрам әҙерләй. Ошо көндәрҙә күп милләтле республикабыҙҙың баш ҡалаһы Өфөлә барған "Ел моңо" музыка һәм бейеү фестивале Башҡортостандың мәҙәни тормошонда ҙур ваҡиғаға әүереләсәк. Өс көн буйына өфөләр һәм ҡала ҡунаҡтары өс уникаль проекттың шаһиты буласаҡ.

Музыка билдәһе аҫтында үтеүсе тәүге көн, 7 февралдә, Роберт Юлдашевтың "Ҡурайсы" төркөмө симфоник оркестр музыканттары ҡатнашлығында киңәйтелгән составта сығыш яһай. "World musik" форматында төркөмдөң билдәле композициялары, композиция премьералары, донъя һәм Рәсәй кинематографынан саундтректар, Эдуард Артемьев, Ханс Циммер, Джон Уильямс, башҡорт композиторҙары Урал Иҙелбаев, Азамат Аҙнағоловтарҙың музыкаһы яңғыраясаҡ.

8 февралдә иһә тамашасыларҙы бөтөн күп төрлөлөгө менән әсир итеүсе Бейеү батшалығы көтә. Роберт Юлдашев башҡарыуындағы ҡурай моңо аҫтында "Guzal Dance", Стәрлетамаҡ ҡалаһы бейеү театры, "Солнышко", "Дарман", Регина Агилова етәкселегендәге бейеү коллективы, шулай уҡ ҙур сәхнәгә тәүләп юл башлаусы йәш коллективтар, Ҡыл-ҡумыҙ ансамбле (Әбйәлил районы), ғаилә триоһы (Баҡалы ауылынан), Урал тау (Белорет районы) ансамблдәре сығыш яһаясаҡ. Был көндә шулай уҡ "Бишбармаҡ", "Zainetdin" төркөмдәренең дә сығышы көтөлә.

9 февраль, фестивалдең һуңғы көнөндә, көй менән бейеүҙе берләштергән сағыу шоуҙың шаһиты буласаҡбыҙ. "Ҡурайсы" төркөмөнөң Рәсәй ҡалалары буйлап гастроль турында күрһәтелгән "Ел моңо" музыкаль-хореографик программаһы тамашасыларға улар яратып өлгөргән Этно-шоу тәҡдим итә.

Журналистар менән осрашыуҙа Роберт Юлдашев ошо үҙенсәлекле мәҙәни программаһы менән таныштырып, шулай тине: "Ҡурайһыҙ байрам - аҡсаны елгә осороу ул. Концертта халыҡ уйын ҡоралдары яңғыраһа, үҙенсәлекле байрам килеп сыға. Фестиваль, күҙҙәрен йомоп, музыканттар менән бергә гүзәллек донъяһына сума алырҙай йыр-моң һөйөүселәргә оҡшар, тип ышанам. "Ел моңо" тигән исем - Хоҙай бүләге. 2013 йылда Рәсәй буйлап гастролдәрҙә йөрөгәндә, бер ҡалала тамашасылар ҡурайҙы, беҙҙең легендаларҙы тыңлағас, концерттан һуң янныбыҙға килде. "Был - ел моңо! Күңелебеҙгә үтеп инде", тине улар һоҡланып. Уларҙың һүҙҙәренән тәнем семерҙәп китте, һәм беҙ программаны шулай тип атарға булдыҡ..."

БАБИЧТЫҢ ТЫУҒАН ЯҒЫНДА...

Башҡортостанда яңы әҙәби йыл Мишкә районының Ҡыйғаҙытамаҡ ауылында бөйөк шағир Шәйехзада Бабичтың 130 йыллығын билдәләүҙән башланды.

Бабичты "Киләсәк шағиры" тиҙәр, бөгөн, ысынлап та, шағир ижадының ялҡыны һүрелмәй, йылдар үткән һайын көслөрәк була бара. Бөгөн шағирҙың нәҫел-нәсәбенең тыуған төйәгендә Бабич рухы һүнмәй, уның иҫтәлектәрен һаҡлаған музей эшләп килә. Музейҙа Бабичевтар ғаиләһенең әйберҙәре, үткән быуаттан һаҡланған шәжәрә һәм башҡа уникаль экспонаттар урын алған. Музей эшен тыуған яҡты өйрәнеүселәр, шағирҙың туғандары, яҡташтары яҡшы ойошторған, шуларҙың береһе - учреждение етәксеһе Әлфиә Зарипова. "Бөгөн бөтә республиканан, Рәсәйҙең төрлө мөйөштәренән Бабичтар нәҫеле йыйылды. Беҙҙең өсөн ул - хәтер, нәҫел берҙәмлеге. Бында шиғырҙар яңғырай, Бабич рухы йәшәүен дауам итә. Бәләкәй генә ауыл музейы туғандарҙы туплар йорт булып ҡалды. Беҙ шағир ижадының бөгөнгә тиклем нисек һаҡланыуын һәм популярлаша барыуын күрәбеҙ. Уның шиғырҙарын яттан белгән йәштәр йылдан-йыл күбәйә. Был беҙҙе бик шатландыра, илһамландыра!" - тине музей етәксеһе.

Сараға килгән ҡунаҡтар араһында - бөйөк Шәйехзада Бабичтың ҡәләмдәштәре лә, музейға ҙур бүләк - компьютер алып килгән "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы журналистары ла бар ине. Сара барышында музей директоры Әлфиә Зариповаға "Ростелеком" компанияһынан интернетҡа тоташтырыу өсөн сертификат тапшырылды. Музейҙа сәскәләр һалғандан һуң байрам Мишкә мәҙәниәт үҙәгенең кинозалында дауам итте, унда бөйөк шағирҙың яҡташтары, шулай уҡ мәктәп уҡыусылары йыйылды. Артабан сараны "Бабич" фильмы, Милли йәштәр театры актеры Илгиз Таһиров менән осрашыу йәмләне. "Шәйехзада Бабич ижады XX быуат башы әҙәбиәтендә генә түгел, ғөмүмән, башҡорт шиғриәте үҫеше тарихында айырым урын алып тора. Уның ижади ғүмере - ни бары 10 йыл самаһы, ә әҫәрҙәренең матбуғатта баҫылыуы ни бары 4-5 йыл ғына дауам итә. Әммә ижадының даны Башҡортостан сиктәренән киңерәк таралған", - тип белдерҙе Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе Айгиз Баймөхәмәтов.

Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

8 февраль "Һинһеҙ килгән яҙҙар" (З. Ҡадырова, А. Абушахманов), мелодрама. 16+

9 февраль "Бөйрәкәй" (Т. Ғарипова, А. Абушахманов, инсц. А. Ишбулдина), драма. 16+

11 февраль "Ете быуын. Йәштәр" (Р. Харисова). 16+

12 һәм 13 февраль "Февраль. Буран" (З. Бураҡаева, Х. Үтәшев). 12+

14 февраль "Йырланмаған йырым һин" (В.Исхаҡов, А. Абушахманов), музыкаль милодрама. 16+

М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

8 февраль "Өс мушкетер" (А.Дюма романы буйынса, М. Ҡулбаев), авантюр комедия. 12+

9 февраль "Ҡара һыуҙар" (И.Ҡаҙаҡбаев). **Премьера.** 12+

11 февраль "Яҙмышымдың икенсе бүлеге" (Н.Саймон, А.Нәҙерғолов), трагикомедия. 16+

12 февраль "Ал яулыҡлы тирәккәйем" (А. Ишбулдина, Р.Хакимов), драма. 16+

13 **һәм 14 февраль "Мин һөйөүҙән яралғанмын"**. Гөлсөм Бикбулатованың концерты. 6+

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

8 февраль "Волшебник изумрудного города" (А. Волков), 0+

9 февраль "Три поросенка" (Д. Гәрәева), 0+

14 февраль "Снеговик и солнышко" (А. Малахов). 0+

Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

8 февраль Акапелла сакартвело. Грузин йырҙары. 6+

12 февраль "Һин ултыртҡан муйыл..." Роза Аккучукованың яҡты иҫтәлегенә арналған хәтер кисәһе. 12+

14 февраль "Всё о любви". Ғашиҡтар көнөнә арналған Полины Кобецтың концерты.

Салауат дәүләт башҡорт драма театры

14 февраль "Ҡыҙын алдым ҡосаҡҡа" (Б.Аппаев), комедия. Башҡортостандың халыҡ артисы Гөлфирә Сәфиуллинаның юбилей бенефисы. 12+

Сибай концерт-театр берекмәһе

13 февраль Башҡортостан Республикаһының Дәүләт ҡурайсылар ансамбле концерты. 12+

14 февраль "Күңел нурым ғәләм яҡтырта". Азат Исҡужиндың концерты. 6+

Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

8 февраль "Диләфрүзгә дүрт кейәү" (Т. Миңнуллин), комедия. 12+

9 февраль "Нисек кейәүгә сығырға?" (Н.Ғәйетбаев), комедия. 12+

14 февраль "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр" (В.Гуркин), премьера. Комедия. 12+

А.Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

12 февраль "Фронтовичка" (А. Батурина, И. Ҡаҙаҡбаев), драма. 12+

13 февраль "Беҙҙең байлыҡ" (А. Сәсәнбаев, З.Сөләймәнов), комедия. 12+

14 февраль "Һинән - фатир, минән - ир" (Н.Ғәйетбаев, Д.Нурғәлин), комедия-гротеск. 16+

БР Милли музейы

8 февраль "Үткән дәүерҙәрҙең һуғыш яралары" мәҙәни-ағартыу сараһы. 15:00. 12+

11 февраль "Һыу аҫты археологияһы" "Утрау-ҡала Свияжск" музей-заповедник күргәҙмәһен асыу. 14.00. 6+

12 февраль "Ғаилә шәмбеһе" акцияһы сиктәрендә "Бал ҡортонда ҡунаҡта" сараһы. 14:00. 5+

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

"СВЕТОФОР"ҘЫ ТИКШЕРӘЛӘР

Ғинуар аҙағында Роспотребнадзор хеҙмәткәрҙәре "Светофор" селтәрендәге магазиндарҙы тикшерә башланы. Уларҙы беренсе вице-премьер Денис Мантуров хупланы, ул күҙәтеү ведомствоһына һәм иҡтисади үҫеш министрлығына хөкүмәткә бының өсөн кәрәкле ҡағыҙҙарҙы тапшырырға ҡушты, тип хәбәр итә "Известия", Министрҙар кабинеты сығанағына һылтанып.

2024 йылдың декабрь аҙағында Дәүләт Думаһы депутаты Сергей Лисовский күп һанлы боҙоуҙар, сифатһыҙ һәм хәүефһеҙ булмаған продукция һатыу фонында "Светофор"ҙы тикшереүҙе һорай. Ул шулай уҡ селтәрҙең тәьмин итеүселәрҙең аҙыҡ-түлек етештереү тураһында законды, техник регламенттарҙы үтәмәүен, сауҙа селтәренә тәьмин итеүселәр ҙә зарлана икәнен билдәләй. Ритейлер сауҙа тураһындағы закондың мотлаҡ нормаларын урап үтә, ти етештереүселәр. Мәҫәлән, ваҡлап һатыу селтәре партнерҙар менән туранан-тура тәьмин итеү килешеүе төҙөмәй. Уның урынына контракттарҙы логистик үҙәктәргә рәсмиләштерәләр. Улар был хаҡта, профилле закон уларға ҡағылмай, тип аңлата. Мәҫәлән, бындай үҙәктәр тауарҙарҙы "Светофор"кәштәләрендә һатҡандан һуң ғына түләй. Сағыштырыу өсөн: бөгөн ритейлерҙар быны закон менән сикләнгән осорҙа эшләргә тейеш, ул тауарҙарҙың яраҡлылыҡ ваҡытына бәйле һәм, мәҫәлән, 10 көн тәшкил итә ала. Бынан тыш, логистик үҙәктәр етештереүселәргә ваҡыты үткән һәм һатылмаған продукцияны кире ҡайтара, был контрагенттарға бик отошло түгел.

✓ *Һәр төрлө машина иллеләп ябай кеше башҡара торғанды ғәмәлгә ашыра ала. Әммә күренекле, бөйөк кеше башҡарғанды бер генә машина ла ғәмәлгә ашыра алмай. (Генри Форд).*

ЙЫРСЫҒА ӨС ҺОРАУ

МИН ҺӨЙӨҮҘӘН ЯРАЛҒАНМЫН...

Был юлы Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Гөлсөм БИКБУЛАТОВАға төбәнек өс һорауыбыҙҙы:

Гөлсөм, һин бик иртә "йондоҙ" булып балҡыныың. 9 һәм 13 йәшеңдә балалар конкурсында еңдең, ә 18-ҙә "Ирәндек" моңдарының гран-приһын яуланың. Бикбулатовтар юлын дауам иттең булды инде. Ә шулай ҙа "Йондоҙлоҡ" башыңды әйләндермәнеме ул саҡта?

- Йондоҙлоҡ... Йондоҙсоҡ... Юҡ, ундай зәхмәт ҡағылманы. Бала булғанмын бит, йырлағым килгәс, йырлап тик йөрөгәнмен. Еңмеш булдым, гел үҙемдекен эшләргә тырыштым. Сибай интернатында уҡыным, енмешлегем арҡаһында уҡытыусыларыма, тәрбиәселәремә ауырлыҡ та һалғанмындыр, бәлки. Әле лә мин үҙемдә, йондоҙмон, тип йөрөмәйем. Ябайлығым еңә. Кеше менән һәүетемсә аралашам. Ҡайһы берәүҙәр яратып арҡамдан һөйөп, ҡайһылай ябайһығыҙ, тигән булалар. Шул ябайлыҡ арҡаһында ҡайһы саҡ янаһың, шунан, улай ярамай, тип уйлаған булаһын. Тик барыбер эскерһеҙлек, кешеләргә ышаныусанлыҡ үҙ халәтеңә кире ҡайтара.

"Аҡ болоттар" йыры бына нисәмә йыл яңғырай, ә ялҡытмай. Нисек уйлайһың, сере нимәлә? Ғөмүмән, һин үҙеңдең репертуарыңа бик тоғроһоң, ахры, шулаймы?

- "Аҡ болоттар", "Аҡ сәскәләр", "Апайыма аҡ сәскәләр" - гел аҡ төҫтә булған йырҙарым халыҡ күңеленә хуш килде. "Аҡ болоттар"ға килгәндә иһә, ул - Фәрит ағайым Бикбулатовтың юбилейына әҙерләнгәндә тыуған йыр. Композитор Юлай Үҙәнбаевҡа, ағайымды яңы йыр менән ҡотлағым килә, тип мөрәжәғәт иттем. Шиғыр алып килһәң, көйөн яҙып бирәм, тине ул, ризалашып. Унынсы синыфта уҡыған сағым, шиғыр эҙләйем, тик оҡшағанын, күңелгә ятышлыһын таба алмайым. Ә Фәрит ағайымды яңы йыр менән ҡотлау теләге шул тиклем көслө. Каникул ваҡытында ауылда, блантта (беҙҙең яҡта ишек алдын шулай атайҙар) уйланып йөрөп ятам, таштар типкеләйем. Шул мәл алдыма "Йәшлек" гәзитенең бер остоғон ел ойоҫҡотоп алып килеп һалды. Алып ҡараһам, "Йәш ғүмерҙәр" тигән шиғыр юлдары баҫылған. Авторы - Зәлифә Ғилметдинова. Ни ғиллә менәндер, гәзит битенең нәҡ шул урыны йыртылмаған. Шиғыр күңелгә ятты, уны Юлай ағайға алып барҙым. Бер нисә көндән йыр әҙер ҙә ине инде.

Миңә ҡалһа, "Аҡ болоттар" Илаһ ҡөҙрәте ярҙамында тыуҙы. Йыр хит булып китте, уны кем генә йырламаны. Әммә ләкин ул, статусым һымаҡ, миңә йәбеште лә ҡуйҙы, мине уның буйынса таныйҙар. Ул йыр бер ваҡытта ла ялҡытмай кешене. Бала ғына булыуыма ҡарамай, өлкәндәргә барып етерлек итеп башҡарғанмын уны. Йырҙың тәрән мәғәнәһен йәшәй-йәшәй генә төптән аңланым. Ошоға бәйле ҡыҙыҡ та, уйландырырҙай ҙа бер хәл: "Туғандарым ҡунаҡҡа йыйылғанда мотлаҡ "Аҡ болоттар"ҙы йырлар ине. Уның моңона ағайҙарыбыҙҙың береһе туҡтала алмай үкһепүкһеп илар булды. Беҙ, бала-саға, ҡунаҡҡа уны ҡарап өсөн генә килер инек. Ваҡыт үткәс кенә ул ағайҙың ни өсөн илағанын аңланым", - тип яҙҙы телефоныма бер ҡатын кеше. Ваҡыт та, донъялағы барлыҡ нәмәлә, ғүмер ҙә үтә шул...

Һин - 2004 йылдан Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры артисы. Театрҙағы һәм эстрадалағы ижад бер-береһен тулыландыра, бер-береһенә ярҙам итә, тип әйтә алаһыңмы? Бөгөн ниндәйерәк һығымталар яһай алаһың үҙ ижадың, үҙеңдең сәхнә хеҙмәтең тураһында?

- Театр - бөйөк сәнғәт. Миңә, йырсыға, театр факультетында уҡыу ныҡ ярҙам итте. Эсенә инеп, автор унын менән нимә әйтергә теләгәнен тойомлап, мәғәнәһен тулыландырып, тотош бер спектакль уйнағандай башҡараһың бит йырҙы. Эстрада һәм театр белеме, ысынлап та, береһе икенсеһен тулыландыра. Театрҙа эшләүем мине ныҡ үстерҙе, нескә күңелле илаҡ кешене сыныҡтырҙы. Унда йә бөгөләп ҡалаһың, йә тырмашып алға сығаһың - көсһөҙҙәрҙе ул яратмай. Үсаллыҡ та кәрәк ҡайһы саҡ. Театр - ике аяғымды ныҡ терәп баҫҡан таяуым.

Һығымталарға килгәндә инде, эскерһеҙ йәш саҡта дуҫтарың күп була, бөтә кешегә ышанаһың, ихласлыҡ хаттин ашкан була. Хәҙер дуҫтарҙың һайламдары ғына ҡалды, бергә ҡатышып йөрөгәндәр ҙә әҙәйҙе. Иң мөһиме - ғаиләндең, туғандарыңдың янында булыуы.

Ижадҡа ҡағылғанда, үкенескә ҡаршы, эшләп еткермәгәндәр юҡ түгел. Шул уҡ ваҡытта эшләнгәндәргә байҡау яһап, әлекке йырҙарымды тыңлап, ҡайһылай күпкә өлгәшкәнмен, ҡайһылай мин молодец, тип үҙемде маҡтап та ҡуям, үҙемә үҙем рәхмәт әйтәм. Шулай көс-ҡеүәт туплап, үҙемдә яңы ижадҡа көйләйем.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Тамашасыларҙы 13 һәм 14 февралдә Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры сәхнәһендә Гөлсөм Бикбулатованың "Мин һөйөүҙән яралғанмын" тип аталған ҙур концерты була тип тә иҫкәртеп ҡуйыйыҡ.

ТЕЛҺӨЙӘР

ҮРЕЛГӘН СЫМДАН - ШАҠМА

Баҡсаларҙы шаҡарма менән уратыу хәҙер ҙә осраштыра. Йыйнаҡ, зауыҡлы итеп шаҡармалау йорт-ҡураға ысынлап та үҙенсәлекле биҙәк өҫтәй. Шулай итеп, ҡайһы бер һөйләштә әле лә осраған шаҡарма, шаҡармалау тигәндәренән башлайбыҙ онотола биргән һүҙҙәрҙе хәтерҙә ныҡытыуҙы.

Шаҡарма. Шаҡармалау. Ҡыуал, сыбыҡ шаҡарып яһаған кәртә; текмә. *Шаҡарманы йәш талдан яһау уңайлы. Баҡса тәпәш кенә итеп шаҡармаланған.*

Шаҡбаҫар. Был әйбер теге йәки был техникаһы булған һәр кемгә таныштыр. Ул ҡоролманы домкрат тиҙәр. Башҡортсаһы, тимәк, - "шаҡбаҫар". *Һатыуҙа һыу баҫыуы менән дә, һауа баҫыуы менән дә эшләгән шаҡбаҫар бар.*

Шаҡма. Ул - бысаҡ, бәке һабындағы дүңгәләк. *Бысаҡтың шаҡмаһы үрелгән сымдан яһалған. Бәкенең шаҡмаһы алынған.*

Шалаҡ. "Шалаҡ" мәғәнәһе буйынса "сәсеҙ", "пәләш" тигән һүҙҙәргә иш. Шалаҡ түбә. *Ҡояштай балҡыған бәпембәләр, мамыҡтарын туҙҙырып, шалаҡ булып ҡалған.*

Шал. Шаллау. Урал аръяғында йәнле һөйләштә "шал" һүҙе йыш ҡулланыла. Мәғәнәһен аңлап бөтмәүселәр ҙә бихисап, ә ул "майлы буяу" тигәнде белдерә. *Иҙәнде буяу өсөн яҡшы шал алынды. Ял көнө иҙәндәрҙе тиҙ генә шаллап та ҡуйҙылар.*

НУРБИКӘ әҙерләне.

АҠЫЛ-ҠАҘНА

Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

АЯҘ КӨНДӨҢ...

йәшененән ҡурҡ

Башың диуанаға ҡалһа, бағанаға сәләм бирерһең.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Кешенең аҡылы һәм холҡо тураһында ул уҡыған китаптарға һәм дуҫтарына ҡарап фекер ит.

(Гельвеций).

Беҙҙе бер кем дә аңламаҫлыҡ итеп түгел, ә һәр кем аңлаһын тип тырышырға кәрәк.

(Публий Марон).

Һәр төрлө машина иллеләп ябай кеше башҡара торғанды ғәмәлгә ашыра ала. Әммә күренекле, бөйөк кеше башҡарғанды бер генә машина ла ғәмәлгә ашыра алмай.

(Генри Форд).

Беҙҙең йәнәшәлә йәшәй-йәшәй хайуандар ҡулға эйәләшә, ә кешеләр бер-береһе менән аралаша-аралаша хайуанға әйләнә.

(Гераклит).

Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ваҡыт аҡыллы, билемле Вэнь-Чжи исемле халыҡ табибына атаҡлы нәҫелдән сыҡҡан түрә, императорҙың туғаны, сәйер, таныш булмаған ауырыуҙан дауалауын һорап мөрәжәғәт итә.

- Ниндәй сир борсой, һөйләп ебәр, - тип һорай унан Вэнь-Чжи.

- Йөрәгемдә сәйер һалҡынлыҡ урын алды, - тип яуаплай түрә. Маҡтауҙарҙы - данлау, хурлауҙарҙы оятҡа ҡалыу тиеп һанамайым. Уңыш ҡаҙаныуҙарҙан шатлыҡ кисермәйем, юғалтыуҙарҙан төшөнкөлөккә бирелмәйем. Йәшәүгә үлемгә ҡараған кеүек ҡарайым. Байлыҡҡа ҡарашым фәҡирлеккә ҡарашыма тиң. Үҙем һәм башҡалар араһында айырма күрмәйем. Дәрәжә һәм бүләктәргә аптырып бармайым, язаға тарттырылыу ҙа мине ҡурҡытмай. Яҡшы саҡта ла, насар саҡта ла фекерҙәрем, уйҙарым үҙгәрмәй, үҙемде бер килеш тотам. Табыштар шатландырмай, ҡазалар көйөфемде ҡырмай. Күптән инде ҡыуаныстар ҙа, ҡайғылар ҙа мине тулҡынландырмай. Байлыҡ-муллыҡ тулы үҙ өйөмдә йәшәһәм дә, ниндәйҙер сит ҡунаҡханала йәшәгәндәй тоям үҙемде. Был сәйер ауырыу миңә батшабыҙға элекке һымаҡ бирелеп хеҙмәт итергә, туғандарым һәм дуҫтарым менән аралашырға, ҡатыным һәм балаларым менән идара итергә, хеҙмәтселәремә бойорорға ҡамасаулай. Һин йәндәрҙе дауалау серенә эйәһең - мине дауала, зинһар...

- Яҡтыға арҡаң менән әйләнеп тор, - тигән бағымсы. - Йөрәгеңдә үтә күрәм. Ҡайһылай ҙур! Уның урыны - йөҙрөк самаһындай, аҡыл эйәләренеке кеүек еңел һәм буш. Йөрәгеңдә алты канал асыҡ, ә етенсеһе ябылған. Шуғалыр ҙа, һин аҡыллы булыуҙы сир тип һанайһың. Күктәр беләә, бындай сиргә миндә дауа юҡ..."

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 25005

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

Телефондар:

Баш мөхәррир	**253-25-44**
Хәбәрселәр	**252-39-99**
Матбуғат таратыу	**252-39-99**

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
6 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 248